PDF-XChange Viewer
Click to buy NOW!
www.docu-track.com

**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**Министерство образования Республики Башкортостан**

**Администрация муниципального района Бураевский район**

**Республики Башкортостан**

**МОБУ ООШ д.Тангатарово**

РАССМОТРЕНО
на заседании
педагогического совета
Протокол №1
от «28» августа 2023 г.

УТВЕРЖДЕНО
Директор
_______________Галкова Г.Р.
Приказ № 61
от «28» августа 2023 г.

# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА

**учебного предмета**

**«Родной(башкирский) язык»**

для обучающихся 1 – 4 классов

Составитель: Галкова Г.Р,
учитель высшей категории

**Тангатарово 2023**

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ


| | |
|---|---|
| Аңлатма яҙыу | 3 |
| “Туған (башҡорт) теле” уҡыу предметына дөйөм характеристика | 4 |
| “Туған (башҡорт) теле” уҡыу предметын өйрәтеү маҡсаты һәм бурыстары | 8 |
| “Туған (башҡорт) теле” уҡыу предметының уҡыу планындағы урыны | 9 |
| “Туған (башҡорт) теле” уҡыу предметы йөкмәткеһенең төп йүнәлештәре | 10 |
| “Туған (башҡорт) теле” уҡыу предметының йөкмәткеһе: | |
| 1-се класта: | 11 |
| грамотаға өйрәтеү; | 11 |
| телде системалы өйрәтеү курсы | 14 |
| 2-се класта | 16 |
| 3- сө класта | 20 |
| 4-се класта | 23 |
| Башланғыс кластарҙа телмәр эшмәкәрлеге төрҙәре | 25 |
| Башланғыс дөйөм белем биреү кимәлендә “Туған (башҡорт) теле” уҡыу предметы программаһын үҙләштереү буйынса билдәләнгән һөҙөмтәләр: | 27 |
| Шәхси һөҙөмтәләр | 28 |
| Метапредмет һөҙөмтәләр | 30 |
| Предмет һөҙөмтәләре: | 30 |
| 1-се класс | 31 |
| 2-се класс | 32 |
| 3-сө класс | 33 |
| 4-се класс | |
| Яҡынса тематик планлаштырыу: | 35 |
| 1-се класс | 35 |
| 2-се класс | 50 |
| 3-сө класс | 60 |
| 4-се класс | 72 |
| Ҡушымта | 84 |

PDF-XChange Viewer
Click to buy NOW!
www.docu-track.com
PDF-XChange Viewer
Click to buy NOW!
www.docu-track.com

# АҢЛАТМАЛЫ ЯҘЫУ

Уҡытыу рус телендә ойошторолған дөйөм белем биреү ойошмаларының 1-4 кластарында “Туған (башҡорт) теле” уҡыу предметын өйрәтеү өсөн төҙөлгән өлгө программа Федераль дәүләт башланғыс дөйөм белем биреү стандартына (Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының 2022 йылдың 31 майында расланған 286-сы һанлы ҡарары), Төп башланғыс дөйөм белем биреү программаһына (18.03.2022 йыл № 1/22), шулай уҡ “Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу концепцияһы”на (Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының Коллегияһында 2019 йылдың 1 октябрендә расланған), “Башҡортостан Республикаһында дәүләт телдәрен һәм халыҡтарҙың туған телдәрен уҡытыу концепцияһы”на (Башҡортостан Республикаһы Башлығының 30.12.2020 йылдағы №УГ-613 указы) ярашлы төҙөлгән.

Программа үҙ эсенә аңлатма яҙыуҙы, уҡытыуҙың йөкмәткеһен, программа эстәлеген үҙләштереүҙе билдәләгән һөҙөмтәләрҙе һәм тематик планлаштырыуҙы ала.

Аңлатма яҙыуҙа предметты өйрәтеүҙә торған маҡсаттар һәм бурыстар, телде өйрәнеүгә башланғыс класс уҡыусыларының психологик яҡтан мөмкинлектәрен асыҡлаған характеристика бирелә. Предметтың уҡыу планындағы урыны күрһәтелә, йөкмәткенең эстәлегенә, билдәләнгән һөҙөмтәләрҙе аныҡлауға һәм тематик планлаштырыуға ҡарата аңлатма бирелә.

Предметтың йөкмәткеһендә башланғыс мәктәптә мотлаҡ уҡытылырға тейешле йүнәлештәр алынған.

Һәр класта йөкмәткене үҙләштереү һөҙөмтәһендә уҡыусыларҙың ниндәй универсаль уҡыу күнекмәләренә (танып-белеү - познавательные, аралаша белеү - коммуникативные, хатаны төҙәтә белеү, эште дөрөҫ йүнәлештә көйләү һәләте - регулятивные) эйә булырға тейешлеге бирелә.

Билдәләнгән һөҙөмтәләр үҙ эсенә башланғыс кластарҙа “Туған (башҡорт) теле” уҡыу предметын өйрәнеү аша шәхси, метапредмет һөҙөмтәләрҙе, шулай уҡ һәр класс аҙағында предметты өйрәнеүҙә ирешелгән уңыштарҙы ала.

Тематик планда программа йөкмәткеһе һәр бүлек буйынса бирелә, уҡыу эшмәкәрлегенә характеристика, йөкмәткене үҙләштереүҙә ҡулланылған алымдар, методик ысулдар, уҡытыуҙы ойоштороу төрҙәре күрһәтелә.

“Туған (башҡорт) теле” предметы “Туған тел һәм туған телдә әҙәби уҡыу” белем биреү өлкәһенә инә һәм уҡыу планының мотлаҡ уҡытыла торған өлөшөн тәшкил итә. Предметты өйрәтеү өсөн төҙөлгән был өлгө программа Башҡортостан Республикаһында һәм Рәсәй Федерацияһында дөйөм белем биреү ойошмаларының 1-4 кластарында башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәтеү өсөн тәҡдим ителә.

Уҡытыу рус телендә ойошторолған дөйөм белем биреү ойошмаларының 1-4 кластарында “Туған (башҡорт) теле” предметын өйрәтеү ойошманың мөмкинлегенә ҡарап һәм мәғариф тураһындағы хоҡуҡи акттарға ярашлы ата-әсәләрҙең ғаризаһына таянып ойоштором.

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

## “Туған (башҡорт) теле” уҡыу предметына дөйөм характеристика

“Туған (башҡорт) теле” предметын өйрәтеүгә тәғәйенләнгән өлгө программа уҡытыу рус телендә ойошторолған дөйөм белем биреү ойошмаларының 1-4 кластарында ҡулланыуҙы күҙаллай.

“Туған (башҡорт) теле” предметын өйрәтеү грамотаға өйрәтеүҙән башлана. Был эш  рус телендә грамотаға өйрәтеү менән бергә параллель рәүештә атҡарыла. Ике телдең өндәрен һәм хәрефтәрен сағыштырыу, уларҙың оҡшашлығын һәм айырмаһын айыра белеү аша уҡыусылар уҡырға, яҙырға өйрәнәләр, фонематик яҡтан өндәрҙең яңғырашын ишетеп, уларҙы бер-береһенән айырырға, һүҙ төҙөп мәғәнәһенә тап килтереп һүҙбәйләнеш, һөйләм  ҡорорға өйрәнәләр.

Яҙыу уҡырға өйрәтеү процессы менән бергә уҡыу һәм яҙыу эшмәкәрлектәрен бер-береһе менән тап килтереү (координация) принципы аша үткәрелә.

Башланғыс класта уҡыусыларҙың туған телдә артабан белем алыуына нигеҙ һалына, функциялы грамоталылыҡ формалаша.

Грамотаға өйрәтеү башында уҡыусыларҙы тел тураһындағы мәғлүмәттәр һәм әҙәби телдә аралашыу күнекмәләренә өйрәтеү маҡсаттары менән таныштырыу тора. Был этаптың йөкмәткеһе балаларҙа уҡыу эшмәкәрлегенә ҡарата теләк, ынтылыш һәм уҡыу процесының үҙенә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыуҙы күҙаллай. Беренсе сиратта һәр баланың телде аңлап ҡабул итеүен, бигеләк тә тыңлау һәм һөйләү эшмәкәрлегенең үҫешен билдәләүгә иғтибар бирелә. Уның менән бер рәттән баланы уҡыу эшмәкәрлегенә йәлеп итеү, мәктәп ҡағиҙәләренә күнектереү тора.

Башҡорт теле донъяһына балаларҙы йәлеп итеү - һүҙ менән таныштырыуҙан башлана. Һүҙҙең мәғәнәһен төшөндөрөү, төрлө аралашыу осраҡтарында уның ҡулланылған функцияһын тойомларға өйрәтеү, һөйләшеү барышында мәғәнәһенең үҙгәрешен аңларға күнектереү, фонетик һәм грамматик яҡтан формаларын дөрөҫ ҡабул итә белеү - рус теленә нигеҙләнеп ойошторола.

Уҡыусыларҙың  тәүбашлап һөйләм тураһындағы төшөнсәләре формалаша, фонематик ишетеү һәләте  һәм башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен дөрөҫ әйтә белеүе, төрлө һүҙҙәрҙә өндәрҙең килеү тәртибен билдәләүе үҫешә.

Улар схема-моделдәр ҡулланып, һүҙгә өн анализы эшләй башлайҙар, һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлергә,  моделдә бирелгән схема буйынса һүҙҙе “уҡырға” өйрәнәләр.

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com
PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

Әҙерлек осоронда һуҙынҡылар (ҡалын һәм нәҙек)һәм тартынҡылар (һаңғырау һәм яңғырау) тураһында төшөнсәләр формалаша, башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре һәм уларҙы билдәһе булған хәрефтәр өйрәнелә.

Яҙыу дәрестәрендә балалар дәфтәрҙе партаға дөрөҫ һалыу, ручканы ҡулда тейешле рәүештә тотоу, партала дөрөҫ ултырыу ҡағиҙәләрен үҙләштерәләр. Тәүҙә хәрефтәрҙең өлөштәрен, элементтарын, аҙаҡ – үҙҙәрен яҙырға өйрәнәләр.

Артабан тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙе, уларҙың хәрефтәрен яҙырға өйрәнәләр; ике өндө аңлатҡан һуҙынҡылар, өн аңлатмаған хәрефтәр менән танышалар. Был осорҙоң төп маҡсаты булып  уҡырға өйрәнеү тора. Балалар ике төрлө уҡыуҙы үҙләштерәләр: орфографик уҡыу (нисек яҙылған, шулай), орфографик уҡыу (нисек әйтелә, шулай уҡыйым); был осорҙа ижек таблицалары менән эшләйҙәр, ижектәрҙе бер-береһенә ҡушып уҡыу, яҙыу ысулдарына өйрәнәләр; бөтә хәрефтәрҙе лә бер-береһенә төрлөсә ҡушып яҙыу алымдарына эйә булып, һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе, кәләкәй генә текстарҙы яҙа башлайҙар.

Грамотаға өйрәтеүҙең  һуңғы ҡабатлау һәм дөйөмләштереү этабында әкренләп һүҙҙәрҙе тулыһынса уҡыуға күсеү, эстән уҡыу алымын үҙләштереү формалаша. Һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе, тексты  аңлап, дөрөҫ һәм етеҙ уҡыу камиллаша һәм үҫешә.

Балалар уйын формаһында ойошторолған төрлө диалогтарҙы уҡыу аша телмәр этикеты менән танышалар (телдән рәхмәт әйтеү, һаулыҡ һорашыу, хушлашыу һ.б.)

Өндәрҙең әйтелешен үҙләштереү, һүҙ байлығын арттырыу һәм грамматик төшөнсәләрҙе үҙләштереү класта, өйҙә үҙ-ара һөйләшеү барышында формалаша, баланың аң-белем кимәлен үҫтереүгә ярҙам итә.

Был осорҙа уҡыусылар әҙәби әҫәрҙәр уҡый башлайҙар, әлифба байрамына бағышланған проект эштәре башҡарып, үҙҙәре өйрәнгән уҡыу һәм яҙыу күнекмәләренә баһа бирергә өйрәнәләр.

Грамотаға өйрәнеү осоро тамамланғас, “Туған (башҡорт) теле” һәм  “Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу” предметтары айырым уҡытыла башлай һәм уҡыусыларҙы башҡорт теленә системалы рәүештә өйрәтеү башлана. Уның йөкмәткеһе башҡорт теле ғилеменең төп бүлектәренә ҡараған төшөнсәләр системаһын үҙ эсенә ала һәм телмәр берәмектәрен, уларҙың аңлатҡан мәғәнәләрен һәм үтәгән функцияларын коммуникатив компетенциялар формалаштырыу маҡсатында өйрәтеүҙе ала.

Башҡорт телен өйрәнгәндә һүҙлекте үҙләштереү иң мөһим урынды ала. Һүҙ, уның мәғәнәһе, әйтелеше, яҙылышы өҫтөндәге эш уҡыусылар менән системалы рәүештә алып барыла. Балаларҙы хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр төҙөргә,

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

бирелгән өлгө буйынса, һуңынан үҙ-аллы диалогтар, монологтар ҡороға, уҡылған әҫәр, ҡаралған видеофильм, күҙәтелгән тәбиғәт күренеше тураһында, йә һүрәт буйынса төркөмдәрҙә, йәки үҙ-аллы текстар төҙөргә өйрәтеү системалы рәүештә алып барыла.

Программала уҡыусылар үҙ-ара иркен аралаша алһын өсөн һәр класс өсөн актив үҙләштерелә торған һүҙҙәр исемлеге бирелә. Башланғыс класс уҡыусыларының башҡорт теленән һүҙ байлығы 3000 тирәһе һүҙҙе тәшкил итә. Шуның эсенән 600 һүҙ беренсе класта әүҙем үҙләштерелә, 700 һүҙ – икенсе класта, 800 һүҙ – өсөнсө класта, 850 – дүртенсе класта өйрәнелә. Үҙ теләге буйынса уҡытыусы һәр класта өҫтәлмә рәүештә 50-70 һүҙ өйрәтеүҙе планлаштыра ала.

Һүҙлекте байытыу барышында уҡыусылар һүҙҙәрҙең аңлатҡан мәғәнәһенә, уларҙың бер йәки бер нисә мәғәнәне, йә ҡапма-ҡаршы мәғәнәне аңлата алыуына төшөнәләр. Үҙгәртеүсе һәм яһаусы ялғауҙар ярҙамында яңы һүҙҙәр яһалыуын үҙләштерәләр.

Башланғыс класс уҡыусылары һүҙҙең фонетик һәм морфологик составы, төп һүҙ төркөмдәре һәм уларҙың грамматик категориялары, һөйләмдәге синтаксик роле тураһындағы мәғлүмәттәр менән танышалар.

Аралашыу маҡсатына, шарттарына һәм үҙенсәлектәренә ҡарап, тел сараларын ҡуллана белергә өйрәтеү өсөн башҡорт теле стилистикаһының төрлөлөгө тураһында мәғлүмәттәр бирелә. Һөйләү телмәренә хикәйәләү, әңгәмәләшеү, бәхәсләшеү, һүрәтләү инә. Рәсми стилдә белдереү, саҡырыу ҡағыҙы, резюме һ.б. яҙыла. Публицистик әҫәрҙәр исемлегенә сығыш яһау, мәҡәлә яҙыу, интервью биреү, фәнни стилдә - аннотация, баһалама, доклад, һ.б. инә.

Орфография һәм пунктуация ҡағиҙәләрен үҙләштереү телдең төп берәмектәре булған һүҙҙе һәм һөйләмде өйрәтеү менән бер рәттән алып барыла. Шул уҡ ваҡытта программала уҡыусыларҙы, терминдарҙы әйтмәйенсә, фонетика һәм морфология бүлектәренең йөкмәткеһе менән таныштырыу ҡарала.

Программала текст өҫтөндә эшкә айырыуса урын бүленә. Текста һөйләмдәрҙең бер-береһе менән бәйле килеүе, тексты төҙөлөү үҙенсәлектәре, уның төрҙәре тураһындағы төшөнсәләрҙең уҡыусылар аңында формалаштырыу, уға бәйле практик күнекмәләрҙе үтәй белеүҙәренә ирештереү маҡсаты ҡуйыла.

Уҡыусыларҙы һәр бер уҡыу эшмәкәрлеге нигеҙендә башҡорт теленә комплексłы өйрәтеү башҡорт һәм рус яҙыусылары, шағирҙары әҫәрҙәре, башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады нигеҙендә ҡорола.

Төп маҡсат булып балаларҙа башҡортса үҙ-ара аралаша белеү күнекмәләрен формалаштырыу һәм үҫтереү тора. Шуның өсөн уҡығанда, яҙғанда, грамматик ҡағиҙәләрҙе өйрәнгәндә, һөйләмдәр, бәйләнешле текстар төҙөү буйынса

PDF-XChange Viewer
Click to buy NOW!
www.docu-track.com

күнегеүҙәр башҡарғанда уҡыусылар һөйләү телмәре аша аралашып эш итергә тейештәр: һорауҙар биреү, уларға яуап ҡайтарыу; үҙе, яҡындары, класташтары, дуҫтары тураһында һөйләү, диалогтар, монологтар ҡороу, текст буйынса төрлө күнегеүҙәр башҡарыу һ.б.

Программала эҙмә-эҙлекле *мәғлүмәт* менән эш итә белеүҙең ябай ғына булған тәүге күнекмәләрен формалаштырыу ҡаралған. Башҡорт телен үҙләштереү барышында уҡыусыларҙа *мәғлүмәти мәҙәниәткә* нигеҙ һалына: улар яҙырға, уҡырға, дәреслек менән һөҙөмтәле эшләргә, *лингвистик* һүҙлектәрҙе, белешмә материалдарҙы ҡуллана белергә күнегә. Уҡыусыларҙың төрлө форматта бирелгән мәғлүмәт сығанаҡтары менән эшләй белеүе ҡарала (текст, һүрәт, таблица, схема, һүҙҙең моделе, хәтерҙә ҡалдырыу өсөн төҙөлгән инструкция). Улар анализларға, сағыштырып баһаларға, бирелгән мәғлүмәтте үҙгәртеп, икенсе йөкмәткә биреп, эш итергә өйрәнәләр. Шулай уҡ яңы мәғлүмәт төрҙәрен үҙҙәре барлыҡҡа килтереү һәләтенә эйә була башлайҙар: белдереү, хат яҙыу, баһалама биреү, ҡотлау открыткаһы әҙерләү, кескәй күләмле инша яҙыу, ижади эш йыйылмаһы төҙөү, класс стенгазетаһын әҙерләү һәм башҡалар.

Уҡыусыларҙың аң-белемде әүҙем үҙләштереүенә *проект эшмәкәрлекте* ойоштороу ҡарала. Был эш төрө балаларҙың дәрестә өйрәнгән белемдәрен нығытырға, киңәйтергә мөмкинлек бирә, уларға ижади яҡтан үҫеү шарттарын тыуҙыра, балаға үҙ-үҙенә ыңғай баһа бирә белергә өйрәтә. Шулай уҡ ололар һәм тиҫтерҙәре менән дөйөм эшләй белеү күнекмәләрен формалаштыра, кәрәкле мәғлүмәтте бергәләп эҙләргә, системаға һалырға һәм тейешенсә ҡулланырға күнектерә.

Программала грамматик һәм орфографик материалдар *концентризм принцибы буйынса* бирелә, йәғни бер үк тема кластан класҡа ҡабатланып, тәрәнәйтеп, киңәйтеп өйрәтелә.

Өлгө программа уҡытыусыларға заман талаптарына тура килгән һәм яңы алымдарға ҡоролған эш программаһын төҙөгәндә методик яҡтан ярҙам күрһәтеү маҡсатында төҙөлгән:

- “Туған (башҡорт) теле” предметын уҡытыу барышында Федераль дәүләт башланғыс белем биреү стандартында (31.05.2022й.) ҡуйылған талаптарға ярашлы уҡытыу процесында балаларҙа шәхси, метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләрҙең формалаштырыу мөмкинлеген бирә;

- Федераль дәүләт башланғыс дөйөм белем биреү стандартына (Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының 2022 йылдың 31 майында раҫланған 286-сы һанлы ҡарары), Төп башланғыс дөйөм белем биреү программаһына (18.03.2022 йыл № 1/22), Өлгө тәрбиә программаһына (дөйөм белем биреү буйынса Федераль

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

уҡытыу-методик берләшмә тарафынан 2.06.2020 йылда раҫланған, протокол № 2/20), шулай уҡ "Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу концепцияһы"на (Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының Коллегияһында 2019 йылдың 1 октябрендә раҫланған), "Башҡортостан Республикаһында дәүләт телдәрен һәм халыҡтарҙың туған телдәрен уҡытыу концепцияһы"на (Башҡортостан Республикаһы Башлығының 30.12.2020 йылдағы №УГ-613 указы) ярашлы "Туған (башҡорт) теле" уҡыу предметының йөкмәткеһен һәм планлаштырылған һөҙөмтәләрен һәр бер уҡыу йылына дөрөҫ билдәләргә ярҙам итә.

- һәр бүлекте йәки теманы уҡытыу өсөн тәҡдим ителгән яҡынса сәғәттәр һанына һәм төп эшмәкәрлек төрҙәренә таянып, класс уҡыусыларының үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, уҡытыусы календарь-тематик план төҙөй ала.

Өлгө программа Төп белем биреү программаһында мотлаҡ уҡытыла торған "Туған тел һәм туған телдә әҙәби уҡыу" белем биреү өлкәһенең йөкмәткеһен тулыһында үҙләштереү маҡсатын үтәргә ярҙам итә.

## "Туған (башҡорт) теле" уҡыу предметын өйрәтеү маҡсаты һәм бурыстары

Рус телендә белем алған башланғыс класс уҡыусыларын үҙ туған теленә өйрәтеү **маҡсаты** булып уҡыусыларҙың йәш мөмкинлектәрен һәм үҙ ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн башҡортса телдән һәм яҙма рәүештә тирә-йүндә башҡалар менән уңышлы аралаша белеү күнекмәләренә өйрәтеү һәм функциональ яҡтан грамоталы шәхес булыуҙы формалаштырыу тора.

Башҡорт телен өйрәтеү **бурыстары:**

- башҡорт телен төрлө яҡлап өйрәнеү аша (фонетика, орфография, лексика, грамматика) уҡыусыларҙы дөйөм лингвистик йәһәттән үҫтереү;
- туған тел йәшәйештә башҡалар менән мәҙәни һәм социаль юҫыҡта, шулай уҡ үҙ-ара тейешле мөнәсәбәттәр ҡороусы сара икәнлеген төшөндөрөү;
- илде, тыуған яҡты, халыҡты ярата белеү хистәрен, баланың үҙен Башҡортостандың, Рәсәйҙең вәкиле, гражданины булараҡ ҡабул итеүҙе формалаштырыу;
- "Туған (башҡорт) теле предметын өйрәнеүгә һәм унын аша аң- белем алыуға ынғай һәм тотороҡло ынтылыш формалаштырыу.

Был маҡсаттар башҡорт теленә өйрәтеү барышында уҡыу эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен дә практик яҡтан тормошҡа ашырыуға бәйле булып, иң беренсе сиратта *коммуникатив принципҡа* таяныуҙы күҙаллай. Балаларҙы башҡортса

һөйләшергә өйрәтеү һәм тел ғилемен үҙләштереү бер юҫыҡта үҙ-ара бәйләнеп, үрелеп, бер-береһен тулыландырып алып барыла.

Телгә өйрәтеүҙең практик йүнәлеше компетентлылыҡ үҫтереү нигеҙҙәренә таянып эш итеүҙе беренсе урынға ҡуйып, башланғыс класс уҡыусыларында коммуникатив (аралаша белеү), тел нормаларын ябай ғына кимәлдә үҙләштереү (тел нормаларын һәм лингвистик белемдәр), тел аша мәҙәниле булыу (тарихты, мәҙәниәтте, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, әхлаҡи нормаларҙы, йәшәү үҙенсәлектәрен өйрәнеү) компетенцияларын формалаштырыуҙы билдәләй.

*Коммуникатив компетенция* булып башланғыс класс уҡыусыларының программа кимәлендә башҡорт телендә һөйләшә, аралаша белеүе, *телмәр компетенцияһы* булып – уҡыусының башҡорт теле системаһын практик яҡтан үҙләштереүе, *лингвистик компетенция* булып тел ғилеме тураһындағы фәнни белемдәргә эйә булыуы, *мәҙәни компетенция* булып тел аша башҡорт халҡының мәҙәниәтен өйрәнеүе тора.

Рус телендә уҡытыу ойошторолған уҡыу ойошмаларында 1-4 класс уҡыусыларын бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә торған уҡыу эшмәкәрлеге төрҙәре (тыңлау, һөйләү, уҡыу, яҙыу) аша программа материалдарын үҙләштерергә һәм башҡортса аралашырға өйрәтеүҙе күҙаллай. Шул уҡ ваҡытта телгә өйрәтеү баланың лингвистик компетенцияға эйә булып, тел сараларын ҡулланыуҙа отҡорлоҡ, зирәклек күрһәтеүенә лә ныҡ бәйле булып тора.

## “Туған (башҡорт) теле” уҡыу предметының уҡыу планындағы урыны

Башланғыс класта балаларҙың рус теле менән берлектә башҡорт телен өйрәнеүе уларға лингвистик белем биреүҙең һәм башҡортса телмәр үҫтереүҙең тәү башы булып, киләсәктә телде тәрәнерәк өйрәнеүгә нигеҙ һала.

“Туған (башҡорт) теле” предметының йөкмәткеһе стандартта һәм Башланғыс дөйөм белем биреү өлгө программаһында ҡаралған талаптарға яуап бирә. Уҡыу планы буйынса дөйөм сәғәттәр һаны 258 (88 сәғәт 1-се класта, шул иҫәптән 66 сәғәт грамотаға өйрәтеү, 22 сәғәт телде системалы өйрәтеү өсөн, 68 – әр сәғәт 2 –се һәм 3 – сө кластарҙа, 34 сәғәт -4 класта).

Беренсе класта грамотаға өйрәтеүҙән һуң “Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу” предметын айырым уҡытыу башлана.

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

## “Туған (башҡорт) теле” уҡыу предметы йөкмәткеһенең төп йүнәлештәре

“Туған (башҡорт) теле” предметының материалдарын системалы, эҙмә-эҙлекле өйрәтеү түбәндәге йүнәлештәрҙе үҙ эсенә ала:

- лингвистик белем нигеҙҙәре: фонетика һәм орфоэпия, һүҙъяһалыш (морфемика), лексика, грамматика (морфология һәм синтаксис);
- графика, орфография һәм пунктуация;
- бәйләнешле телмәр үҫтереү.

Лингвистик материал уҡыусыларҙа башҡорт теле системаһы тураһында тәүге төшөнсәләрҙе формалаштыра, әҙәби тел нормаларын практик яҡтан үҙләштереүгә ярҙам итә.

Тел тураһында үҙләштерелгән белем аша уҡыусыларҙа орфографик һәм пунктуацион грамоталылыҡ формалаша. Балалар тел сараларын аңлы рәүештә ҡулланырға өйрәнәләр. Ошо нигеҙҙә уларҙа тел һәм телмәр үҙенсәлектәрен тойомлай, һиҙемләй белеү һәләте үҫешә, тимәк, уҡыусыларҙың телмәр мәҙәниәте һәм дөйөм аң-белем кимәле артабан үҫеш ала. Бындай ҡараш Федераль дәүләт башланғыс дөйөм белем биреү стандарты ҡуйған талаптарға тап килеп, башланғыс класс уҡыусыларын төрлө уҡыу эшмәкәрлеген үҙ-аллы башҡарырға, белемдәрен практик рәүештә көндәлек йәшәйештә ҡуллана белергә өйрәтә.

Алда күрһәтелгәнсә, предметтың йөкмәткеһе концентризм принцибына таянып ҡоролған, йәғни бер үк бүлектәр һәм темалар кластан класҡа ҡабатланып килә. Материалдарҙы тулыландырып, киңәйтеп, тәрәнәйтеп, алдан өйрәнелгән белемдәргә таянып үҙләштереү ҡарала. Программаның былай төҙөлөшө балаларға телде өйрәнеүҙә, башҡортса яҙырға, уҡырға һәм аңлы рәүештә аралашыу-һөйләшеү процесына уңай шарттар тыуҙыра.

Лексик темалар түбәндәге блоктарҙа күрһәтелә:

1 блок. Мин башҡорт телен өйрәнәм.

2 блок. Танышыу.

3 блок. Минең мәктәбем.

4 блок. Минең республикам.

5 блок. Мин һәм минең ғаиләм.

6 блок. Мин һәм минең дуҫтарым.

7 блок. Мине уратып алған донъя.

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

## “Туған (башҡорт) теле” уҡыу предметының йөкмәткеһе:

## 1 класс

**(88 сәғәт), шул иҫәптән грамотаға өйрәтеүгә 66 сәғәт, предметты системалы рәүештә өйрәтеүгә – 22 сәғәт бүленә.**

Программала “Туған (башҡорт) теле” предметының йөкмәткеһе уҡыусыларға башланғыс дөйөм белем биреү этаптарына бәйле ҡарала. Уҡыусылар тәү башлап уҡыу эшмәкәрлеге төрҙәрен үҙләштерәләр: тыңларға, һөйләргә, уҡырға, яҙырға өйрәнәләр. Башланғыс белем алыу рус телендә ойошторолғанлыҡтан, беренсе класс уҡыусылары башҡорт телен өйрәнеүҙе түбәндәге этаптар аша һәм рус теле менән бер юҫыҡта өйрәнәләр.

### Грамотаға өйрәтеү

Башҡорт телен өйрәтеү рус телендәге кеүек үк үҙ эсенә ала:

1. Грамотаға өйрәтеү һәм телмәр үҫтереү. Телдән әҙерлек осоро.
2. Әлифба осоро. Грамотаға өйрәтеү, уҡыу, яҙыу, телмәр үҫтереү.
3. Әлифба аҙағы осоро. Һөйләү һәм яҙма телмәрҙе комплекслы үҫтереү.

Программала грамотаға өйрәтеүҙең телдән әҙерлек осоронда беренсе класс уҡыусыларын түбәндәгеләргә өйрәтеү һалынған:

- башҡорт телендә яңғыраған телмәрҙе тыңлап аңлай, мәғәнәһенә төшөнә белеү күнекмәләрен формалаштырыу;
- башҡорт телендә әйтелгән телмәр ағышынан һүҙҙе, ижекте, өндө, өндәр ҡушылмаһын, бигерәк тә башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен айыра, таный, әйтә белергә өйрәтеү;
- телдән әйтелгән, йәки уҡылған тексты аңлатҡан мәғәнәһенә төшөнөү.

Программаның беренсе класс өсөн тәғәйенләнгән йөкмәткеһе мәктәпкә килгән балаларҙың телмәр үҫеше кимәленең төрлө булыуын иҫәпкә алып билдәләнә. Шунлыҡтан грамотаға өйрәтеү этабында алдан үткәрелә торған телдән әҙерлек осоронда, беренсенән, лексик һәм грамматик материалдарҙы күберәк ҡабатлатыу һәм нығытыу планлаштырыла. Икенсе яҡтан, ошо рәүешле балаларҙың белем кимәлен тигеҙләп, уларҙы грамотаға өйрәтеүгә әҙерлек эше алып барыла: һөйләшеү телмәрен үҫтереү; өндәрҙең дөрөҫ әйтелешен нығытыу; аралашыу өсөн кәрәкле һүҙҙәрҙе өйрәнеп, һүҙлекте байытыу; йыш ҡулланыла торған телмәр өлгөләрен, һөйләм ҡалыптарын үҙләштертеү; һөйләмдәр төҙөргә, уларҙы кәрәкле интонация менән бирә белергә өйрәтеү.

Һөйләмдәге һүҙҙәр, грамматик конструкциялар һөйләү эшмәкәрлеге аша үҙләштереләләр (күргәҙмә материал буйынса әңгәмә, дәрес ваҡытында йәки

PDF-XChange Viewer
Click to buy NOW!
www.docu-track.com
PDF-XChange Viewer
Click to buy NOW!
www.docu-track.com

дәрестән тыш үткәрелгән телмәр уйындары, кескәй күләмле шиғырҙар ятла[illegible] һөйләү, һүрәттәр буйынса хикәйә төҙөү, күргән хәл-ваҡиғалар тураһында һөйләшеү, диалог һәм монолог төҙөү һ.б.)

Беренсе класта рус мәктәптәрендә уҡыған уҡыусыларға башҡорт телен өйрәтеү өсөн әлифбаға тиклемге телдән әҙерлек осорона 20 сәғәт, хәреф өйрәнеү осорона 26 сәғәт, әлифбанан һуңғы осорға 20 сәғәт бүленә. Башҡорт өндәрен һәм хәрефтәрен өйрәтеүгә айырым дәреслек төҙөлмәй. Бөтә материал беренсе класс өсөн “Туған (башҡорт) теле” дәреслегендә бирелә.

Әлифбанан һуңғы осорҙа күбеһенсә телмәр үҫтереү, дөрөҫ уҡырға, яҙырға өйрәнеү күнекмәләренә иғтибар бирелә. Өндәрҙе, һүҙҙәрҙе, ябай ғына һөйләмдәрҙе өйрәнеү барышында уҡыусылар уҡыу эшмәкәрлеге төрҙәрен (һөйләү, тыңлау, уҡыу, яҙыу) үҙләштерәләр. Был осор ҙа балаларҙың аралашыу, аң-белемгә эйә белеү күнекмәләрен өйрәнеүенә бәйле алып барыла.

Һөйләү һәм яҙма телмәр уҡыусыларҙа түбәндәге күнекмәләрҙең формалашыуын тәьмин итә:

- башҡорт өндәрен, өндәр ҡушылмаһын һәм ижектәрҙе ишетеп аңлап, уларҙы дөрөҫ әйтеүҙе;
- ябай ғына таныш темаларға бәйле диалог ҡороуҙы;
- аңлау өсөн еңел булған бәләкәй генә тексты дөрөҫ уҡыуҙы;
- өйрәнеү һәм тикшереү маҡсатында үткәрелгән яҙма эштәрҙе өйрәнелгән орфограммаларҙы һаҡлап, хәрефтәр яҙылышын дөрөҫ башҡарып яҙырға өйрәтеү.

**Телмәр үҫтереү**

Сюжетлы һүрәттәр, һүҙле уйындар, дәрестә өйрәнелгән һәм күҙәтеү материалдары аша рус телендә өйрәнелгән материалдарға таянып, кескәй генә хикәйә төҙөү.

Тексты тыңлағанда йәки үҙ-аллы уҡығанда уның мәғәнәһенә төшөнөү.

**Һүҙ һәм һөйләм**

Һүҙҙе һәм һөйләмде бер-береһенән айыра белеү. Һөйләмдә һүҙҙәрҙе айырыу, уларҙың теҙелеп килеү тәртибен үҙгәртеү.

Һүҙҙе өйрәнеү һәм тикшереү мөмкинлеген аңлау. Һүҙҙең мәғәнә аңлатыуын төҫмөрләү, төшөнөү.

**Фонетика**

Телмәр өндәре. Һуҙынҡы өндәр ([о], [ы], [э], [ө], [ү], [ә]) һәм тартынҡы өндәр ([ҡ], [ғ], [h], [ҙ], [ҫ], [ң]) һәм уларҙы билдәләүсе хәрефтәр тураһында төшөнсәләр.

Һүҙҙең өндәре һәм уларҙың мәғәнәһе. Һүҙҙә өндәрҙең теҙелеп килеүен һәм иҫәбен билдәләү. Бер йәки бер нисә өн буйынса бер-береһенән айырылып торған

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com
PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

һүҙҙәрҙе сағыштырыу. Һүҙгә өн анализы эшләү. Өн моделдәре менән эшләү: өн моделе буйынса һүҙ төҙөү, һүҙҙең өндәре буйынса модель ҡороу.

Һуҙынҡыларҙы һәм тартынҡыларҙы айырыу. Йомшаҡ һуҙынҡыларҙы ҡалын һуҙынҡыларҙан, ҡаты тартынҡыларҙы нәҙек тартынҡыларҙан, яңғырау тартынҡыларҙы һаңғырау тартынҡыларҙан айырыу.

Баҫымды билдәләү.

Ижек. Һүҙҙә ижектәрҙең иҫәбе. Баҫымлы ижек.

**Графика**

Өндө хәрефтән айырыу: хәреф өндөң билдәһе. Башҡорт графикаһының ижек принцибына таяныуы. Е, ё, ю, я хәрефтәренең функцияһы. Ике өндө [в] и [w] аңлатҡан **В**в хәрефе.

Башҡорт алфавитында хәрефтәр тәртибе. ***ҫ*** и ***ң*** хәрефтәренең баш хәрефтәре юҡлығы, сөнки был хәрефтәрҙән башланған һүҙҙәр юҡ.

**Уҡыу**

Ижекләп уҡыу (һуҙынҡы өнгә таянып). Ижектәрҙе һуҙып уҡыу. Ижек таблицалары һәм бергә ҡушылған ижектәр формаһын уҡыу. Һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлмәй, бөтөн килеш балаға хас тиҙлектә уҡыу. Тыныш билдәләренә иғтибар итеп, тауышты үҙгәртеп, интонация һәм пауза һаҡлап уҡыу. Һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе аңлап уҡыу. Кескәй күләмле шиғырҙы, тексты тасуири уҡыу.

Орфоэпик уҡыу (һүҙҙәрҙе тулыһынса ижектәргә бүлмәй уҡыу). Орфографик уҡыу (һәр өндө асыҡ итеп әйтеп уҡыу) - күсереп яҙғанда йәки уҡытыусы әйтеп яҙҙыртҡанда үҙ-үҙеңде тикшерергә күнегеү.

**Яҙыу**

Дәфтәр битендә һәм класс таҡтаһында дөрөҫ йүнәлеш һаҡлап яҙыу. Яҙыу ваҡытында гигиеник талаптар.

Баш һәм бәләкәй хәрефтәр һыҙмаһы, уларҙы дөрөҫ яҙыу. Әйтелешендә һәм яҙылышында айырмаһы булмаған һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе тыңлап ишетеү аша яҙыу. Дөрөҫ күсереп яҙыу алымдары һәм тәртибе.

Хәрефте аңлатмаған график саралар: һүҙҙәр араһында буш урын ҡалдырыу, һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсереү билдәһе.

**Орфография һәм пунктуация**

Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен ҡулланыу: һүҙҙәрҙе бер-береһенән айырып яҙыу, яңғыҙлыҡ исемдәрҙе, һөйләм башында һүҙҙе ҙур хәрефтән яҙыу, һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсергәндә һыҙыҡса ҡуйыу, һөйләм аҙағында тыныш билдәләре.

**Тематик блоктар.**

**«Мин башҡорт телен өйрәнәм».** «Туған (башҡорт) теле» дәреслеге менән таныштырыу. Донъяла төрлө илдәр барлығын, ундағы халыҡтарҙың төрлө

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

телдәрҙә аралашыуы тураһында һөйләү. Китаптар уҡырға һәм яҙырға өйрәтәләр. Был китаптан беҙ башҡорт телен өйрәнербеҙ, бер-беребеҙ менән һөйләшергә, башҡортса хат һәм ҡотлауҙар яҙырға өйрәнербеҙ. Башҡорт телендә беҙҙең олатайҙар, өләсәйҙәр, атайҙар әсәйҙәр һөйләшә. Шуға беҙ ҙә башҡорт телен өйрәнеп, улар һымаҡ башҡортса һөйләргә, йырларға, китап уҡырға, спектакль ҡарарға тейешбеҙ.

**«Танышыу».** Исем, фамилия һәм атайҙың исеме тураһында һөйләшеү**.** Башҡортса бер–береңде тәбрикләү, һаулыҡ һорашыу, танышыу, хушлашыу. Телефондан аралашыу. Уйын һәм уйынсыҡтар аша өйрәнелгән типик фразаларҙы нығытыу.

**«Минең мәктәбем»**. Мәктәп. Класс. Уҡыу кәрәк-яраҡтары. Уҡытысы һәм уҡыусылар. Класта дежур булыу. Тәнәфес. Физзарядка. Тиҙәйткестәр ятлайбыҙ. Уйындар уйнайбыҙ.

**«Мин һәм минең ғаиләм»**. Беҙҙең ғаилә. Ғаиләлә беҙ нисәү? Ата-әсәйҙәр шөғөлө. Ололарға өй эштәрендә ярҙамлашыу. Ашау: иртәнге аш, төшкө аш, киске аш. Ваҡыт: көн һәм төн. Сәғәт һәм минуттар. Аҙна көндәре. Беҙҙең байрамдар: минең тыуған көн.

**«Мин һәм минең дуҫтарым»**. Кейем магазинында. Аҙыҡ магазинында. Аҙыҡ-түлек һатып алыу. Минең бесәйем. Минең этем (көсөгөм). Мин яратҡан сәскә. Баҡсала гөлләмә йыям. Дуҫыма бүләк. Беҙҙең

**«Минең республикам»**. Нимә ул Тыуған ил? Беҙ ҡайҙа йәшәйбеҙ? Беҙҙең ҡала нисек атала? Һинең ауылың нисек атала? Өләсәйгә ҡунаҡҡа. Башҡорт ризыҡтары: бишбармаҡ, бәлеш, ҡыҫтыбай, ҡоймаҡ, сәк-сәк. Картуф ҡаҙабыҙ. Беҙҙең байрамдар: Яңы йыл шыршыһына әҙерләнәбеҙ.

**Мине уратып алған донъя»**. Беҙҙең баҡса: түтәлдәрҙә нимә үҫә? Емеш-еләктең ҙур урожайы. Йәшелсәләрҙе йыябыҙ.

Тыуған тәбиғәт: урманда ниндәй ағастар үҫә? Беҙҙең яҡтың ҡыр хайуандары: ҡуян, төлкө, бүре, айыу, мышы. Өй хайуандары: һыйыр, һарыҡ, ат, эт, бесәй. Йорт ҡоштары: тауыҡ, әтәс, ҡаҙ, өйрәк, күркә. Беҙ уларҙы нисек тәрбиәләйбеҙ?

## Телде системалы өйрәтеү курсы

**Тел тураһында дөйөм мәғлүмәт.**

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com
PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

Тел кешеләрҙең төп аралашыу ҡоралы. Һөйләшеүҙең маҡсаты һәм аралашыу осраҡтары.

**Фонетика**

Телмәр өндәре. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр, уларҙың айырмаһы. Һүҙҙә баҫым. Нәҙек һуҙынҡылар (*и, ә, ү, э(е), ө*), ҡалын һуҙынҡылар ***(а, у, о, ы).***

Йомшаҡ һәм ҡаты тартынҡылар, уларҙың айырмаһы. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар, уларҙың айырмаһы. Тартынҡы өн [**й'**]. [**ж**], [**ш**], [**ч'**], [**щ'**] хәрефтәре.

Ижек, һүҙҙә ижектәр һаны. Һүҙҙе ижектәргә бүлеү. Баҫымлы ижек.

**Графика**

Өн һәм хәреф**.** Уларҙың айырмаһы. Яҙыуҙа тартынҡыларҙың ҡалынлығын **а, о, у, ы** хәрефтәре менән билдәләү. Яҙыуҙа тартынҡыларҙың йомшаҡлығын **е, ё, ю, я, и, э** хәрефтәре менән билдәләү. Айырыу билдәләре **ь** һәм **ъ**.

***Ю, я, ё*** хәрефтәре һүҙ башында рус телендәге кеүек үк яҙылалар: *юрган, япрак, ёлка.* ***Е*** хәрефе ике функция үтәй:һүҙ башында ***йэ*** булып ишетелә, ләкин ***е*** хәрефе яҙыла. Һүҙ уртаһында һәм аҙағында ***э*** өнө ишетелһә лә, ***е*** яҙыла: *ер* [йэр], *етмеш* [йэтмэш].

***В*** хәрефе ике өндө аңлата: рус теленән ингән һүҙҙәрҙә **[в]: *вагон, ваза,*** башҡорт һүҙҙәрендә **[w]: ваҡыт [wаҡыт**]. Әммә яҙыуҙа һәр саҡ ***Вв*** хәрефе менән билдәләнә.

Башҡорт телендә ***[ң, ç*** ] өндәренең баш хәрефтәр юҡ.

Хәрефте аңлатмаған график саралар: һүҙҙәр араһында буш урын ҡалдырыу, һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсереү билдәһе.

Башҡорт алфавиты: хәрефтәрҙең килеү тәртибе һәм дөрөç әйтелеше. Алфавит буйынса һүҙҙәрҙе теҙеү.

**Орфоэпия**

Башҡорт теленең әйтелеш нормаларына ярашлы һүҙҙәрҙә өндәрҙе, өндәр теҙмәһен дөрөç әйтеү.

***Лексика***

Һүҙ - телмәр берәмеге (таныштырыу).

Һүҙҙең предметтың атамаһын, билдәһен, эш-хәрәкәтен аңлатыуы (таныштырыу). Һүҙҙәрҙең яңғырауын ишетеп, мәғәнәһен аңлау маҡсатында уларҙы рус теленән башҡортсаға тәржемә итеү. Дәреслектә бирелгән русса-башҡортса һүҙлекте ҡуллана белеү.

Мәғәнәһе аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табып билдәләү.

**Синтаксис**

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

Һөйләм - телмәр берәмеге (таныштырыу). Һүҙ һәм һөйләм (уларҙың айырмаһын һәм оҡшашлығын күҙәтеү).

Һорауҙар ярҙамында һөйләмдә һүҙҙәрҙең бәйләнешен билдәләү. Төҙөлөшө боҙолған һөйләмдәрҙе дөрөҫләп яңынан төҙөү. Һүҙҙәр йыйылмаһынан һөйләм төҙөү.

**Орфография и пунктуация**

Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен ҡулланыу:

- һүҙҙәрҙе бер-береһенән айырып яҙыу;
- яңғыҙлыҡ исемдәрҙә, йәнлек ҡушаматтарында, һөйләм башында һүҙҙе ҙур хәрефтән яҙыу;
- һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсергәндә һыҙыҡса ҡуйыу;
- һөйләм аҙағында тыныш билдәләре: нөктә, һорау һәм өндәү.

Дөрөҫ күсереп яҙыу алымдары һәм тәртибе.

**Телмәр үҫтереү**

Телмәр кешеләрҙең бер-береһе менән аралашыу ҡоралы. Текст телмәр берәмеге (таныштырыу).

Аралашыу төрҙәре: уның маҡсаты, кем менән, ҡайҙа һөйләшеү бара. Әйтелгәнде тыңлап, уға яуап ҡайтарып, үҙ-ара аралашыу (ролдәргә бүлеп диалог уҡыу, видеоматериалдар ҡарап, аудиояҙмалар тыңлап, әңгәмәләшеү).

Аралашыу этикеты (сәләмләү, ғәфү үтенеү, хушлашыу, рәхмәт әйтеү, һорау менән мөрәжәғәт итеү).

**Тематик блоктар**

**«Мин башҡорт телен өйрәнәм».** Беҙҙең ауылда (ҡалала) кемдәр йәшәй? Улар ниндәй телдә һөйләшә? Һин ниндәй телдәр беләһең?

**«Танышыу».** Тиҫтерҙәрҙе сәләмләү төрҙәре. Таныш һәм таныш булмаған кешегә мөрәжәғәт итеү формалары.

**«Минең мәктәбем».** Мәктәптә. Дәрестәр теҙмәһе. Түңәрәк (кружок) дәресендә. Библиотекала.

**«Мин һәм минең ғаиләм».** Өй. Ата-әсәләр һөнәре һәм шөғөлө. Буш ваҡытты нисек ү-ткәрәбеҙ.

**«Мин һәм минең дуҫтарым».** Китап магазинында. Бүләк һайлау (дуҫыма, уҡытыусыға, ата-әсәйемә, яҡындарыма).

**«Минең республикам».** Әсәйҙәр байрамы. Беҙ байрам өҫтәлендә.

**«Мине уратып алған донъя».** Йәй етте. Беҙ нисек йәйҙе үткәрәбеҙ.

**2 класс**

**Тел тураһында дөйөм мәғлүмәт.**

PDF-XChange Viewer
Click to buy NOW!
www.docu-track.com

Тел кешеләрҙең төп аралашыу ҡоралы һәм милли мәҙәниәт күренеш Рәсәйҙә һәм Ер шарында төрлө телдәр барлығы тураһында ябай ғына төшөнсәләр. Телде өйрәнеү ысулдары: күҙәтеү, анализлау.

**Фонетика и графика**

Өндәрҙең һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә тәъҫире. Өндө хәрефтән айырыу. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙе бер-береһенән айырыу. Нәҙек һәм ҡалын һуҙынҡыларҙы айырыу. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар, уларҙың айырмаһы. Йомшаҡ һәм ҡаты тартынҡылар, уларҙың айырмаһы.

Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре [ғ], [ҙ], [ҫ], [ҡ], [ң], [һ]. Уларҙы аңлатҡан хәрефтәр.

Парлы һәм парһыҙ тартынҡылар.

Башҡорт телендә сингармонизм законы (һуҙынҡы өндәр гармонияһы).

Айырыу билдәләре **ь** һәм **ъ**.

Һүҙ башында һәм һуҙынҡыларҙан һуң **е, ё, ю, я** хәрефтәре.

**В** хәрефе аңлатҡан өндәр**[в] и [w]:** *Валя, Вәсилә, вагон, ваҡ. (ныҡытыу).*

*У, ү* хәрефтәре һуҙынҡылар араһында, шулай уҡ һүҙ аҙағында **[уы], [үэ]** тип уҡылалар һәм тартынҡы өндө белдерәләр: *бау, ауыл, бәүелсәк, килеү.*

Һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеү. Алфавитты һүҙлектәр менән эш иткәндә ҡулланыу.

Хәрефте аңлатмаған график саралар: һүҙҙәр араһында буш урын ҡалдырыу, һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсереү билдәһе, абзац, пунктуация билдәләре (өйрәнелгән кимәлдә).

**Орфоэпия**

Башҡорт теленең әйтелеш нормаларына ярашлы һүҙҙәрҙә өндәрҙе, өндәр теҙмәһен дөрөҫ әйтеү (өйрәнелгән һүҙҙәрҙә).

Башҡорт телендә баҫымдың үҙенсәләеге: баҫым һүҙҙең аҙаҡҡы ижекгенә һәр саҡ тип әйтерлек төшә; юҡлыҡты белдергән *ма, -мә* киҫәксәләре алдынан килгән ижек гел баҫымлы була; һорау алмаштарында *(ҡа'йҙа? ни'сә?)* беренсе ижеккә һәр ваҡыт баҫым төшә.

***Лексика***

Һүҙҙең әйтелешенең һәм мәғәнәһенең берҙәмлеге. Һүҙҙең лексик мәғәнәһе (дөйөм төшөнсә). Мәғәнәһен аңлатырға кәрәк булған һүҙҙәрҙе табыу. Уларҙың мәғәнәһен текст буйынса йәки аңлатма һүҙлек аша билдәләү.

Бер һәм күп мәғәнәле һүҙҙәр (күҙәтеү аша төшөндөрөү).

Башҡорт теленең аңлатма һүҙлеге. Телмәрҙә синонимдарҙы һәм антонимдарҙы ҡулланыуҙы күҙәтеү.

**Һүҙ составы (морфемика)**

PDF-XChange Viewer
Click to buy NOW!
www.docu-track.com

Тамыр һүҙҙең төп өлөшө. Тамырҙаш һүҙҙәр. Уларҙың билдәләре. Бер тамырҙан торған һүҙҙәрҙе синонимдарҙан, омонимдарҙан айырыу (терминды өйтмәйенсә). Һүҙҙең тамырын билдәләү.

Ялғау - һүҙҙең үҙгәреүсән өлөшө.

**Морфология**

*Исем* (таныштырыу): дөйөм мәғәнәһе, ниндәй һорауҙарға яуап бирә. Телмәрҙә ҡулланышы. Башҡорт телендә *Кем? Кемдәр?* һорауы тик кешеләргә ҡарата ғына бирелә. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр.

*Ҡылым* (таныштырыу): дөйөм мәғәнәһе, ниндәй һорауҙарға яуап бирә. Телмәрҙә ҡулланышы. Ҡылымдарҙа юҡлыҡты белдереүсе *–ма, - мә* киҫәксәләре.

*Сифат* (таныштырыу): дөйөм мәғәнәһе, ниндәй һорауҙарға яуап бирә. Телмәрҙә ҡулланышы.

*Һан.* Ябай һәм ҡушма һандар.

**Синтаксис**

Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. Һөйләмдә һүҙҙәрҙең бәйләнеше (ҡабатлау). Һөйләм -

телмәр берәмеге. Һөйләм һәм һүҙ, уларҙың айырмаһы. Һөйләмдә логик баҫымды билдәләүҙе күҙәтеү.

Әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләмдәр төрө: хәбәр һөйләм, һорау һөйләм, өндәү һөйләм.

**Орфография и пунктуация**

Яңғыҙлыҡ исемдәрҙә, йәнлек ҡушаматтарында, һөйләм башында һүҙҙе ҙур хәрефтән яҙыу. Һөйләм аҙағында тыныш билдәләре. Орфограмма тураһында төшөнсә. Дәреслектән орфографик һүҙлекте ҡулланыу.

Яҙғанда үҙ-үҙеңде тикшереп, хаталарҙы төҙәтергә күнектереү:

- яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙың сиратлашыуы (китап – китабым);
- һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсергәндә һыҙыҡса ҡуйыу;
- ҡылымдарҙа *–ма, - мә* киҫәксәләрен бергә яҙыу;
- һөйләм аҙағында тыныш билдәләре: нөктә, һорау һәм өндәү билдәһе;
- яңғыҙлыҡ исемдәрҙә, йәнлек ҡушаматтарында, һөйләм башында һүҙҙе ҙур хәрефтән яҙыу.

**Телмәр үҫтереү**

Һөйләшеү өсөн кәрәкле телмәр сараларын һайлап ҡулланырға өйрәтеү (бирелгән һорауға яуап биргәндә, үҙ фекерен белдергәндә).

Һөйләшергә өйрәтеү (нисек башларға, дауам итергә, иғтибарҙы йәлеп итергә тамаларға).

Практик рәүештә диалог ҡорорға өйрәтеү. Аралашыу этикеты (сәләмләү, ғәфү үтенеү, хушлашыу, рәхмәт әйтеү, һорау менән мөрәжәғәт итеү).

Һүрәт буйынса телдән хикәйә төҙөү. Һорауҙар ярҙамында хикәйә төҙөргә өйрәтеү.

Текст. Тексттың билдәләре: һөйләмдәрҙең мәғәнә буйынса бер-береһенә бәйле килеүе һәм тамаланған уй-фекерҙе аңлатыуы. Тексттың темаһы. Төп мәғәнәһе. Тексттың башы (исеме). Бирелгән текстка исем уйлау. Текст өлөштәренең (абзац) бер-бер артлы мәғәнәүи яҡтан теҙелеп килеүе.

Һүҙҙәрҙең һөйләмдә килеү тәртибе һәм абзацтың урыны боҙолоуҙы төҙәтеү. Текст төрҙәре: һүрәтләү, хикәйәләү, фекерләү һәм уларҙың үҙенсәлектәре.

Дәреслектәге аңлатма һәм орфографик һүҙлектәрҙе ҡулланыу.

Дөрөҫ интонация һаҡлап тексты тасуири уҡыу. Ҡотлау һәм ҡотлау открыткаһы яҙыу.

20–35 һүҙҙән торған хикәйәләү тексын һораузар аша тулыһынса һөйләп биреү.

**Тематик блоктар**

**«Мин башҡорт телен өйрәнәм».** Башҡортостанды уратып алған ерҙәрҙә йәшәгән халыҡтарҙың телдәре тураһында һөйләшеү. Был республикаларҙың, өлкәләрҙең һәм уларҙың башҡалаларының атамаларын өйрәнеү, уларҙы рус һәм башҡорт телендә яҙыу (һүҙлек ҡулланыу). Был халыҡтар ниндәй телдә һөйләшәләр? Улар бер-береһен аңлаһын өсөн нимә эшләргә кәрәк?

**Танышыу**. Хәйерле көн! Хәлдәрегеҙ нисек? Ғәфү итегеҙ, зинһар өсөн! Йәйен ял итергә ҡайһы илгә бараһығыҙ?

**Минең мәктәбем.** Яңы уҡыу йылы менән! Кем бөгөн дежур? Беҙҙең класс. Беҙҙең мәктәп – иң яҡшыһы. Мин яратҡан дәрестәр. Аҙна көндәре. Ҡайһы дәрестәрҙе яратам! Ашханаға барабыҙ. Ашау ҡағыҙәләре. Тиҙҙән каникул.

**Мин һәм минең ғаиләм**. Беҙ – татыу ғаилә. Мин – ярҙамсы. Ашамлыҡтар. Сәй эсергә саҡырабыҙ. Кем иртән ашарға ярата? Бергәләп төшкө аш әҙерләйбеҙ. Беҙҙә – ҡунаҡтар!

**«Минең республикам».** Мин Башҡортостанда йәшәйем. Өфө – Башҡортостандың баш ҡалаһы. Мин ҡалала йәшәйем. Мин ауылда йәшәйем. Экскурсияла. Салауат Юлаев һәйкәле. Һылыуҡай Ағиҙел йылғаһы. Бал ҡортона һәйкәл. Йырлаусы "Ете ҡыҙ" фонтаны. Еңеү паркы.

**«Мине уратып алған донъя».** Минең өй (минең квартира). Ҡала буйлап саф һауала йөрөү. Тышта һауа торошо. Йыл миҙгелдәре. Башҡортостанда алтын

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

көҙ. “Сөмбөлә” байрамы. Ҡыш етте.  Сана шыуабыҙ. Ҡоштар өсөн тағараҡ. Яҙы... түтәлдәрҙә. “Наурыз” байрамы.

Һаумы, йәй! Беҙ яратҡан еләктәр. Урманда ағастар. Ҡайҙа нимә үҫә? Болонда үҫемлектәр.Ҡыр хайуандары. Ҡыр ҡоштары.

Ат – башҡорттоң тоғро дуҫы. Ҡурай моңдары.Ҡымыҙ – шифалы эсемлек. Балыҡта. Беҙҙең олатайҙарҙың һәм өләсәйҙәрҙең яратып уйнаған уйындары: “Тирмә”, “Аҡ тирәк, күк тирәк”.

Башҡорт халыҡ әкиәте “Эт үҙенә нисек хужа тапты?”.

**3 класс** (68 сәғ.)

**Тел тураһында дөйөм мәғлүмәт.**

Башҡорт теле – башҡорт халҡының теле. Телде өйрәнеү алымдары: күҙәтеү, сағыштырыу, анализлау, лингвистик тикшереү ойоштороу.

**Фонетика һәм графика**

Өндө хәрефтән айырыу. Һуҙынҡы  һәм тартынҡы өндәрҙе  бер-береһенән айырыу. Нәҙек  һәм ҡалын һуҙынҡыларҙы айырыу. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар, уларҙың айырмаһы. Йомшаҡ һәм ҡаты тартынҡылар, уларҙың айырмаһы (үтелгәндәрҙе ҡабатлау). Айырыу билдәләре **ь** һәм  **ъ**. Был билдәләр булған һүҙҙәрҙә өн һәм хәрефтәр һаны.

У һәм ү хәрефтәре һуҙынҡы өндәр араһында һәм һүҙ аҙағында.

Алфавитты һүҙлектәр, белешмә сығанаҡтар, каталогтар  менән эш иткәндә ҡулланыу.

**Орфоэпия**

Әйтелеш нормалары буйынса башҡортса һөйләшкәндә һүҙҙәрҙә өндәрҙе, өндәр теҙмәһен дөрөҫ әйтеү (өйрәнелгән һүҙҙәрҙә).

**Лексика**

Һүҙҙең лексик мәғәнәһе (ҡабатлау). Һүҙҙәрҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе (таныштырыу). Синонимдар һәм антонимдар (таныштырыу), уларҙы төрлө һүҙ төркөмдәренән килгән һүҙҙәргә табыу. Иҫкергән һүҙҙәр (таныштырыу).

**Һүҙ составы (морфемика)**

Һүҙҙең тамыры. Тамырҙаш һүҙҙәр. Уларҙың билдәләре. Бер тамырҙан торған һүҙҙәрҙе синонимдарҙан, омонимдарҙан айырыу (терминды әйтмәйенсә). Һүҙҙең тамырын билдәләү(ҡабатлау). Ялғау тураһында ҡабатлау.

**Морфология. Һүҙ төркөмдәре.**

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

*Исем*: дөйөм мәғәнәһе, ниндәй һорауҙарға яуап бирә. Телмәрҙә ҡулланышы. Күплектәге һәм берлектәге исемдәр. Исемдәрҙең килеш һәм һан менән үҙгәреүе. Исемдәргә морфологик (грамматик) анализ.

*Сифат*: дөйөм мәғәнәһе, ниндәй һорауҙарға яуап бирә. Телмәрҙә ҡулланышы. Төп һәм шартлы сифаттар (терминды аңлатмайынса). Сифат дәрәжәләре (төп, сағыштырыу, артыҡлыҡ, аҙһытыу). Сифатҡа грамматик анализ.

*Ҡылым*: дөйөм мәғәнәһе, ниндәй һорауҙарға яуап бирә. Телмәрҙә ҡулланышы. Ҡылымдарҙың заман һәм һан менән үҙгәреүе. Ҡылымдарҙа юҡлыҡты белдереүсе *–ма, - мә* киҫәксәләре. Хәҙерге һәм үткән заман ҡылымдарына берлектә һәм күплектә һорауҙар ҡуйыу.

*Алмаш* (дөйөм төшөнсә). Зат алмаштары, уларҙың һанда һәм килештә үҙгәреүе:: *берлектә –мин,һин, ул; күплектә – беҙ, һеҙ, улар. Алмашҡа грамматик анализ.*

*Һан.* Ябай һәм ҡушма һандар. Телмәрҙә төп һәм рәт һандарын айырыу һәм ҡулланыу. Һандарҙың килеш менән үҙгәреүе. Килеш һорауҙары.

**Синтаксис.**

*Һөйләм.* Һорауҙар ярҙамында һөйләм эсендә һүҙҙәр бәйләнешен асыҡлау. Һөйләмдең баш киҫәктәре – эйә һәм хәбәр. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре (төрҙәргә бүлмәйенсә). Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләм. Әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәре. Һөйләмдә өндәш һүҙ.

Һөйләмдә ***һәм, ләкин*** теркәүестәре менән килгән тиң киҫәктәрҙе күҙәтеү.

**Орфография һәм пунктуация**

Яҙғанда үҙ-үҙеңде тикшереп, хаталарҙы төҙәтеү. Орфографик һүҙлекте ҡулланыу. Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен ҡулланыу:

- айырыу ҡатылыҡ билдәһе **ъ**: (Аҡъяр, ҡулъяулыҡ);
- айырыу йомшаҡлыҡ билдәе **ь**: (көньяҡ, төньяҡ);
- ҡылымдарҙа *–ма, - мә* киҫәксәләрен бергә яҙыу;
- һүҙ аҙағында ялғауҙар ҡушылғанда [ҡ], [к], [п] өндәре [ғ], [г], [б] өндәре менән сиратлаша: *ҡала**ҡ** – ҡалағым; көрә**к** – көрәгем; кита**п** – китабым;*
- өндәш һүҙҙән һуң өтөр ҡуйыу.

**Телмәр үҫтереү**

Аралашыу этикет нормалары: телдән һәм яҙма сәләмләү, ғәфү үтенеү, рәхмәт әйтеү, кире ҡағыу;

Уҡыу барышында һәм көндәлек аралашыуҙа телмәр этикетын һаҡлау;

Диалогта һәм дискуссияла үҙ фекереңде дөрөҫ итеп еткерергә һәм дәлилләргә күнегеү;

Икенсе класта башланған текст  менән эште дауам итеү: һөйләмдәрҙең мәғәнә буйынса бер-береһенә бәйле килеүе һәм тамаланған уй-фекерҙе аңлатыуы. Тексттың темаһы. Төп мәғәнәһе. Тексттың башы (исеме). Бирелгән текстка исем уйлау. Текст өлөштәренең (абзац) бер-бер артлы мәғәнәүи яҡтан теҙелеп килеүе. Һөйләмдәрҙә алмаштарҙы,  синонимдарҙы, *һәм, ләкин* теркәүестәрен ҡулланыу; Текста терәк һүҙҙәр. Һүҙҙең мәғәнәһен аңлатма һүҙлек аша билдәләү.

Текст төрҙәрен билдәләү (һүрәтләү, хикәйәләү, фекерләү). Үҙ-аллы текст төҙөү. Хат, белдереү төҙөү. Тексты тейешле мәғлүмәтте  аңлау, төшөнөү өсөн, йәки танышыу өсөн уҡыу.

План буйынса  тексттың йөкмәткеһен яңғыҙ, йәки коллектив менән бергәләп һөйләү.

**Тематик блоктар:**

**«Мин башҡорт телен өйрәнәм»**. Ауыҙ-тел ижадында халыҡтарҙың йәшәйеше, уларҙың көнкүреше, шөғөлдәре, нисек кейенгәндәр, нимә менән туҡланғандар – шулар сағыла. Быңдай мәғлүмәтте фольклорға таянып иҫбатлап буламы? Рус халыҡ әкиәте “Ҡаҙҙар-аҡкоштар”ҙың һәм башҡорт  халыҡ әкиәте “Ҡурай”ҙың һүрәттәрен сағыштырып, элек кешеләр ниндәй кейем кейгәндәр, был кейемдәрҙең атамаһын русса һәм башҡортса әйтеп ҡарайыҡ (уҡытыусы ярҙамында).

**Танышыу**. Һиңә нисә йәш? Һин ҡайҙа йәшәйһең?  “Һинең ғаиләң ниндәй? “Буш ваҡытыңда нимә менән шөғөлләнәһең?”

**Минең мәктәбем.**

Белем көнө менән! Мин бөгөн дежур. Башҡорт теле дресендә. Китап – яҡшы дуҫ. Айһылыу Йәғәфәрова – балалар яҙыусыһы. Республиканың халыҡ яҙыусыһы – Ноғман Мусин.

**Мин һәм минең ғаиләм**. Олатайым өйрәтеүҙәре. Өләсәйем кәңәштәре. Минең шәжәрәм. Ғаилә байрамы. Йорт эштәрендә ярҙамлашырға яратам. Һиңә ниндәй китап оҡшай? Минең яратҡан шөғөлөм. Мин һәм спорт. Йәкшәмбе көнөндә ял.

**Мин һәм минең дуҫтарым.** Минең тыуған көнөм. Ҡунаҡта үҙеңде нисек тоторға? Дуҫтар менән күңелле. Халыҡ уйыны «Прятки – Һәпәләк». Өләсәйемә хат яҙам. Яратҡан уйынсыҡтарым. Минең дуҫым компьютер. Аҡбай – ысын дуҫ. Минең бесәйем (К. Ушинский буйынса).  Илде һаҡлаусылар байрамы.

**Минең республикам.**

Башҡортостан – мөғжизәле ер. Өфөләге Дуҫлыҡ монументы. Салауат Юлаев – башҡорт халҡының милли батыры. Өфөлә транспорт. Тирә-яҡты өйрәнеү

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

музейына экскурсия. Фәрит Иҫәнғолов – балалар яҙыусыһы. Мәскәү – беҙҙең илдең башҡалаһы. Нисек сәйәхәт ойоштороpға?

**Мине уратып алған донъя**. Тыуған яғым тәбиғәте. Башҡортостан тауҙары. “Минең Уралым” – “Урал батыр” эпосынан өҙөк. Ағиҙел – тыуған яҡтың ынйыһы. Башҡортостан – күлдәр иле. Башҡорт халыҡ йыры “Түңәрәк күл”. Урман – беҙҙең байлыҡ. Ниндәй үләндәр беләһең? Йәшел аптека. Ҡоралай – беҙҙең тәбиғәттең биҙәге. Ат – кешенең дуҫы. Алтын көҙ килә. Көҙгө байлыҡ! Ҡыш етте. Ҡышҡы уйындар. Һаумы, яҙ! Еңеү байрамы.

**4 класс (34 сәғ.)**

**Тел тураһында дөйөм мәғлүмәт.**

Рәсәйҙә төрлө милләт халыҡтары йәшәйлекте, улар аралашҡан телдәрҙең дә, мәҙәниәттәрҙең дә төрлө-төрлө булыуын аңлау. Туған тел халыҡтарҙың рухи һәм әхлаҡи байлығы.

Башҡорт теле – Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле. Телде өйрәнеү алымдары: күҙәтеү, сағыштырыу, анализлау, лингвистик тикшереү ойоштороу, мини-күҙәтеү, проект эше башҡарыу.

**Фонетика һәм графика**

Өндәрҙе һүҙҙән айырым һәм һүҙ эсендә ҡуйылған маҡсат буйынса сағыштыра, төркөмләй белеү. Һүҙгә өн-хәреф анализы эшләү.

**Орфоэпия**

Һөйләшеү һәм уҡыу барышында дөрөҫ интонация һаҡлау. Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү нормалары;

Һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешен орфоэпик һүҙлектән тикшерергә өйрәнеү.

**Лексика**

Телмәрҙә синонимдарҙы, антонимдарҙы, иҫкергән һүҙҙәрҙе (ябай осраҡтарҙы) өйрәнеүҙе дауам итеү һәм ҡулланырға өйрәнеү.

Телмәрҙә фразеологизмдарҙы ҡулланыуҙы (ябай осраҡтарҙы) күҙәтеү.

**Һүҙ составы (морфемика)**

Һүҙҙең нигеҙе. Һүҙҙе үҙгәртеүсе ялғауҙар (ауыл-**ға**). Яңы һүҙ яһаусы ялғауҙар (ауыл-**даш**). Һүҙҙең сотавын тикшереүгә схема. Һүҙҙе схема менән сағыштырыу.

**Морфология**

**Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре.**

*Исем*: исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүе. Эйәлек заты ялғауҙары. Исемдең грамматик үҙенсәлектәре: һан, килештәрҙә үҙгәреүе (ҡабатлау).

*Сифат*: Сифат дәрәжәләре (төп, сағыштырыу, артыҡлыҡ, аҙһытыу). Морфологик анализ (ҡабатлау).

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com
PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

*Ҡылым*: хәбәр һәм бойороҡ һөйкәлеше формалары. ҡылымдарҙың зат, һан һәм заман менән үҙгәреүе. Ҡылымдың үткән, хәҙерге һәм киләсәк заман формаларына һорау ҡуя белеү. Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымы аңлатҡан эш-хәрәкәттәр. Ҡылымдың һөйләмдә тотҡан роле. Ҡылымға морфологик анализ.

*Алмаш*: Зат алмаштары, уларҙың һан менән үҙгәреүе:: *берлектә – мин,һин, ул; күплектә – беҙ, һеҙ, улар* (ҡабатлау). Урын һәм ваҡыт алмаштары (таныштырыу).

*Рәүеш* (дөйөм төшөнсә): дөйөм мәғәнәһе, ниндәй һорауҙарға яуап бирә. Телмәрҙә ҡулланышы.

*Һан.* Төп һәм рәт һандары. Ҡушма һандарҙың барлыҡҡа килеүе. Һандарҙың килеш менән үҙгәреүе. Һанға морфологик анализ.

*Ярҙамсы һүҙҙәр* (дөйөм төшөнсә): *бәйләүестәр (менән, өсөн); теркәүестәр* (дөйөм мәғәнәһе, телмәрҙә ҡулланышы). ***Һәм, ләкин*** теркәүестәре ябай һәм ҡушма һөйләмдәрҙә.

**Синтаксис**

Һүҙ, һүҙбәйләнеш һәм һөйләм. Уларҙың оҡшашлығы һәм айырмаһы. Әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәре (хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр). Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре:

Аныҡлаусы – предметтың билдәһен, эйәһен, иҫәбен аңлата һәм “ниндәй?, ҡайһы?, кемдең?, нисәнсе?” һорауҙарына яуап бирә.

Тултырыусы – предметты аңлата һәм төп килештән башҡа бөтә килеш һорауҙарына яуап бирә.

Хәл – эш-хәрәкәттең ҡайҙа, ҡасан, нисек барғанын белдерә һәм һөйләмдә хәбәрҙе асыҡлап килә.

Тиң киҫәкле һөйләмдәр.

Ябай һәм ҡушма һөйләмдәр.

Ябай һөйләмгә синтаксик анализ.

**Орфография һәм пунктуация**

1-се, 2-се, 3-сө кластарҙа өйрәнелгән дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен ҡабатлау. Һүҙҙәрҙең яҙылышын орфографик һүҙлектән тикшерә белеү.

Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен ҡулланыу:

- тиң киҫәкле һөйләмдә тыныш билдәләре (*һәм, ләкин* теркәүестәре менән, йәки теркәүесһеҙ булғанда);
- тура телмәр эргәһендә тыныш билдәләре (күҙәтеү);
- хәрефтәрҙең һыҙмаһын дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен үтәү.

**Телмәр үҫтереү**

PDF-XChange Viewer
Click to buy NOW!
www.docu-track.com

1-се, 2-се, 3-сө кластарҙа өйрәнелгәндәрҙе ҡабатлау һәм нығытыу: телдән һәм яҙма формала аралашыу (хат, ҡотлау открыткаһы, белдереү һ.б.); диалог, монолог, текстың темаһын, төп мәғәнәһен билдәләүҙе нығытыу.

Бирелгән һәм үҙ аллы төҙөлгән текстарҙы дөрөҫләү, аныҡлау, яңы һүҙҙәр өҫтәү.

Изложение яҙыу: телдән йәки яҙма рәүештә текстың эстәлеген тулыһынса асып биреү. Телдән текстың һайлап алынған өлөшөн һөйләү.

Сочинение – яҙма эш төрө. Өйрәнеү һәм танышыу маҡсатында уҡыу. Текстаг тейешле мәғлүмәтте эҙләү.

Һүҙҙең мәғәнәһен белешмә сығанаҡтарҙан, шулай уҡ федераль исемлеккә индерелгән электрон ресурстар аша эҙләп ҡулланыу.

**Тематик блоктар:**

**«Мин башҡорт телен өйрәнәм».** “Сәңгелдәк” (серия 4) видеояҙмаһын ҡарап, башҡорт телен өйрәнеү. Яңы һүҙҙәрҙе отоп, яҙып алыу.

**“Танышыу”.** Барығыҙға ла хәйерле көн теләйем! Татлы һүҙҙәр. Фаҡиһа Туғыҙбаева – Башҡортостандың халыҡ шағирәһе. Иң бәхетле көн!

**“Минең мәктәбем”.** Мәктәптә минең беренсе көнөм. Бына сентябрь етте! Белем – ул хазина. Сәғәт нимә тураһында һөйләй? Мәктәп урамы. Ялҡаулыҡты яратмайбыҙ!

**«Мин һәм минең ғаиләм».** Башҡорт исемдәренең серҙәре. Һау булып үҫәм! Минең яратҡан шөғөл.

**“Мин һәм минең дуҫтарым**”. Яратҡан әкиәттәрем. Театр, музей һәм кино яратабыҙ.

**“Минең республикам”.** Нимә ул Ватан? Ҡурай тауышы. “Шүлгәнташ” ҡурсаулығы. “Янғантау” санаторийы. Республиканың ҡалалары.

**“ Мине уратып алған донъя**“.

Тәбиғәт – беҙҙең өй. Йыл миҙгелдәре. Ниндәй гәзиттәр уҡыйһың? Башҡортостан телеканалында һәм “Юлдаш” радиоһында ниндәй тапшырыуҙар оҡшай?

## Телмәр эшмәкәрлеге төрҙәре

**(башланғыс мәктәптең бөтә кластары өсөн дә, курсив менән күрһәтелгән материалдар тел өйрәнеүгә ҙур ынтылышы һәм һәләте булған балаларға тәғәйенләнә )**

**Тыңлау (аудирование).** Телдән аралашыуҙың маҡсатын һәм сәбәбен аңлы рәүештә дөрөҫ ҡабул итеү. Бирелгән тексты тыңлап, ишетеү аша төп һәм өҫтәлмә

Click to buy NOW! PDF-XChange Viewer www.docu-track.com

мәғлүмәтте ҡабул итә, аңлай, уның төп идеяһын билдәләй һәм йөкмәткеһе һорауҙар аша бирә белеү.

**Һөйләү.** Һөйләшеү маҡсатына һәм шарттарына ярашлы тейешле телмәр сараларын ҡулланыу. Диалог формаһындағы аралашыуҙы үҙләштереү. Һөйләшеүҙе башлау, дауам итеү, тамамлау, аралашыу барышында үҙенә иғтибар йәлеп итә белеү. Өйрәнелгән темалар буйынса телдән монолог төрҙәрен үҙләштереү (һүрәтләү, хикәйәләү, фекерләү).

Уҡыу һәм көндәлек йәшәйештә һөйләшеүҙә ҡулланылған этик нормаларҙы үҙләштереү (һаулыҡ һорашыу, хушлашыу, ғәфү үтенеү, рәхмәт әйтеү, үтенес менән мөрәжәғәт итеү һ.б.) *Орфоэпик нормаларҙы һәм дөрөҫ интонация һаҡлап һөйләшеү.*

**Уҡыу.** Күнекмәләрҙе үтәү бирелмәләрен (орфография ҡағиҙәләре, грамматик төшөнсәләр, һорауҙарҙың һәм күнегеүҙәрҙең йөкмәткеһе) уҡыу һәм төшөнөү, күнегеүҙе үтәү өсөн тексты ҡайтанан уҡып сығыу, кәрәкле мәғлүмәтте табыу маҡсатында текстан кәрәкле өлөштө һайлап уҡыу.

**Яҙыу.** Тәү башлап яҙырға өйрәтеү һәм дөрөҫ яҙыу күнекмәләрен формалаштырыу. Хәрефтәрҙе, хәрефтәр ҡушылмаһын, ижектәрҙе, һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе дөрөҫ яҙырға күнектереү.

Яҙғанда гигиена талаптарын үтәргә өйрәтеү. Ҡул суҡтарының һығылмалығын, иркен рәүештә хәрәкәтләнеүен үҫтереү. Әкренләп тиҙ яҙыуға күсеү. Үтелгән ҡағиҙәләрҙе һаҡлап күсереп яҙыу, әйтелгәнде ишетеп яҙыу.

*Уҡылған йәки тыңлаған тексттың йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәре менән ҡабатлап яҙыу (тулыһынса, ҡыҫҡаса, һайланма рәүештә).*

Хикәйәләү, шулай уҡ һүрәтләү текстарын үҙ һүҙҙәре менән ҡабатлап яҙырға өйрәтеү. Төрлө стилдәге, жанрҙағы, төрҙәге телмәр өлгөләре төҙөргә өйрәнеү (хат, записка, ҡотлау, баһалама, белдереү).

*Балаларға үҙҙәренә ҡыҙыҡлы булған темалар буйынса ҡыҫҡа ғына күләмле иншә төҙөү (уҡылған әҙәби әҫәр, ҡаралған һүрәт, видеоролик йәки күҙәтеү тәьҫораттары һөҙөмтәһендә).*

**Текст**. Тексты телмәр эшмәкәрлегенең һөҙөмтәһе итеп ҡабул итеү (практик эш кимәләндә). Текст билдәләре. Текста төп теманы, төп фекерҙе билдәләү. Тексттың планын төҙөү. Хикәйәләү һәм һүрәтләү текстарының үҙенсәлектәре.

*Балаларға ҡыҙыҡлы булған темалар буйынса уҡыу эшмәкәрлеге барышында һәм көнкүрештә аралашыу шарттарына ярашлы ҡыҫҡа ғына күләмле һүрәтләү текстары төҙөү (алдан әҙмә-әҙлекле үткәрелгән әҙерлек буйынса).*

*Тексты бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү (башҡортсанан руссаға һәм киреһенсә).*

Таныш булмаған һүҙҙәрҙе белешмә баҫмалар, шулай уҡ верификация үтеп, федераль исемлеккә ингән электрон ресурстар аша асыҡлау.

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

## Башланғыс дөйөм белем биреү кимәлендә “Туған (башҡорт) теле” уҡыу предметы программаһын үҙләштереү буйынса билдәләнгән һөҙөмтәләр:

“Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында”ғы законда һәм Федераль дәүләт башланғыс дөйөм белем биреү стандартында ҡуйылған талаптар буйынса “Туған (башҡорт) теле”уҡыу предметын өйрәнеп, башланғыс мәктәпте тамамлаған уҡыусылар түбәндәге һөҙөмтәләргә эйә булырға тейештәр:

**Шәхси һөҙөмтәләр:**

Шәхси һөҙөмтәләр мәктәптә ойошторолған уҡыу һәм тәрбиә процесына бәйле һәм уның сағылышы булып тора. Уҡытыу һәм тәрбиә эше тыуған ерҙең тарихына, мәҙәниәтенә, халыҡ йолаларына, традицияларына таянып үткәрелә һәм был эштә “Туған (башҡорт) теле” уҡыу предметының әһәмиәте үтә лә ҙур.

Башҡорт теле дәресендә алынған аң-белем балаларға рухи аҙыҡ булып, уларға илен, халҡын, телен яратҡан шәхес булып үҫергә ярҙам итә. Уларҙа түбәндәге кешелек сифаттары тәрбиәләнә:

***Гражданлыҡ һәм илһөйәрлек һыҙаттарын тәрбиәләү:***

- бала үҙен Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең бер вәкиле итеп күҙаллай, уларҙың тарихына, мәҙәниәтенә битараф булмаған шәхес булып үҫергә тырыша;
- телде халыҡтарҙың милли ҡомартҡыһы, мәҙәни байлығы итеп ҡабул итә;
- башҡорт теленең рус теле менән бер рәттән республиканың дәүләт теле һәм кешеләр менән аралашыу ҡоралы икәнлегенә төшөнә;
- тыуған яҡтың һәм илдең үткәненә, бөгөнгөһөнә, киләсәгенә битараф түгел;
- халыҡтар араһындағы дуҫлыҡты, берҙәмлекте хуплай; уны үҫтереү, киңәйтеү сараларында әүҙем ҡатнаша;
- йәмғиәттә кешеләр бер-береһенә ҡарата хөрмәтле, мәрхәмәтле булып, әхлаҡи һәм этик нормаларҙы ҡабул итеп, уларға таянып йәшәргә тейешлекте аңлай һәм үтәргә тырыша.

**Рухи һәм әхлаҡи тәрбиә:**

- һәр бер кешенең үҙенә генә хас булған сифаттары булыуын таный;
- башҡаларҙы хөрмәтләү, улар менән ыңғай мөнәсәбәттә булыу, ауыр ваҡыттарҙа ярҙам ҡулы һуҙыу һыҙаттары формалаша;
- кешеләргә физик һәм мораль яҡтан насарлыҡҡа этәргән холоҡ-фиғел торошон ҡабул итмәй;

**Эстетик тәрбиә:**

- мәҙәниәткә ҡарата хөрмәтле, халыҡ йолаларына, ижадына һәм сәнғәт төрҙәренә ыңғай ҡарашлы;
- үҙен күңеле ятҡан ижади эшмәкәрлектә һынап ҡарау теләге бар.

**Физик тәрбиә, һау булып үҫеү мәҙәниәтен формалаштырыу:**

- йәшәйештә һау һәм хәүефһеҙ йәшәү ҡағиҙәләрен үтәргә тырышыу (үҙе һәм башҡалар өсөн);
- физик һәм психик һаулыҡҡа һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**Хеҙмәт тәрбиәһе:**

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

- кеше тормошонда һәм йәмғиәттә хеҙмәттең ҡиммәтен аңлау. Хеҙмәт һөҙөмтәләренә һаҡсыл һәм яуаплы булыу. Төрлө хеҙмәт эшмәкәрлегендә ҡатнашып, практик күнекмәләргә эйә булырға ынтылыу. Төрлө һөнәрҙәргә ҡыҙыҡһыныу күрһәтеү.

**Экологик яҡтан тәрбиә:**

- тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл булыу, әҙәби әҫәрҙәр аша уны ҡурсылау, һаҡлау сифаттарын тәрбиәләү;
- тәбиғәткә зыян килтереүҙе ҡабул итмәү.

**Фәнни яҡтан донъяны танып-белеү ҡиммәттәре:**

- уратып алған донъя тураһында фәнни төшөнсәләрҙең формалашыуы;
- аң-белемгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу, әүҙемлек, үҙ аллылыҡ, отҡорлоҡ, ынтылыш тәрбиәләү.

**Метапредмет һөҙөмтәләр:**

“Туған (башҡорт) теле” уҡыу предметының йөкмәткеһен үҙләштереү һөҙөмтәһендә уҡыусыларҙа түбәндәге **танып-белеү универсаль уҡыу күнекмәләре** формалашасаҡ:

*Төп логик күнекмәләр:*

- предметтарҙы сағыштырыу, оҡшашлыҡтарын табыу;
- рус телендә алған белемдәрен башҡорт телен өйрәнгәндә уларҙы сағыштырыу нигеҙендә ҡуллана белә башлай;
- уҡытыусы тәҡдим иткән алгоритмға таянып, телмәр берәмектәрен төркөмләү өсөн оҡшашлыҡты һәм айырманы билдәләү;
- күнегеүҙе үтәү өсөн етешмәгән мәғлүмәтте табыу тәртибен үҙ аллы ҡулланыу;
- башҡорт телендә яңғыраған телмәрҙе (ололарҙың, тиҫтерҙәренең һөйләүе, балалар өсөн радио һәм телевизион тапшырыуҙар, компьютер саралары аша бирелгән текстарҙы, һ.б.) таный, аңлай, тейешенсә ҡабул итә;
- башҡортса яҙылған һүҙҙәрҙе, ижектәрҙе, өндәрҙе, өндәр теҙмәһен дөрөҫ әйтә, уҡый, улар менән һөйләмдәр төҙөй ала;

*Төп эҙләнеү-тикшереү күнекмәләре:*

- туған телдә яҙа һәм һөйләү белеү кешене мәҙәни яҡтан билдәләүсе күрһәткес икәнлеген аңлай;
- программала ҡаралған башҡорт әҙәби теленең нормаларын (орфоэпика, лексика, грамматика) һәм үҙ-ара аралашыу этикетын үҙләштереп, йәшәйештә ҡуллана башлай;
- төрлө аралашыу осраҡтарында ололар һәм тиҫтерҙәре менән тейешле этикет ҡағиҙәләрен һаҡлап, ыңғай мөнәсәбәттә эш итә белә;
- күнекмәне үтәү буйынса бирелгән бер нисә варианттан иң отошлоһон һайлай белергә өйрәтеү;
- бирелгән алгоритм буйынса төрлө анализдар эшләй белеү (өн-хәреф анализы, һүҙ составына анализ, грамматик анализ, синтаксик анализ )- программа материалдары кимәлендә;

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

- күнегеүҙе үтәү өсөн етешмәгән мәғлүмәтте таба белеү.

- башҡорт телендә һөйләшеү һәм аралашыу кимәле буйынса үҙ-үҙенә баһа бирергә өйрәнә.

- уҡыу мәсьәләләрен сискәндә туған телдә төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәтте табып, тейешенсә ҡуллана белә;

*Мәғлүмәт менән эшләү:*

- практик күнекмәләрҙе үтәү маҡсатында мәғлүмәт табыуҙа һүҙлектәр, белешмә ҡулланмалар ҡуллана; алгоритм буйынса тейешле мәғлүмәтте табып ҡуллана, уның дөрөҫлөгөн уҡытыусы өйрәтеүенсә тикшерә белә;

- интернеттан мәғлүмәт эҙләгәндә информация хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен ололар ярҙамында һаҡлап, улар менән кәңәшләшеп эш итергә күнегә;

- телмәр берәмектәрен тикшереү йәки күҙәтеү һөҙөмтәләре буйынса лингвистик мәғлүмәтте үҙ-аллы схемалар, таблицалар аша еткерә белә.

Башланғыс мәктәп аҙағында уҡыусыларҙа **коммуникатив универсаль уҡыу күнекмәләре** формалаша:

*Аралашыу:*

- бирелгән темаға диалог ҡора ала, һорауҙарға ҡыҫҡа йәки тулыһынса асыҡлап яуап ҡайтара белә. Диалогты башлап йәки дауам итеп алып китә ала;

- алдан әҙерләнеп, йәки әҙерлекһеҙ тексты етеҙ, аңлы рәүештә һәм тасуири итеп уҡый ала. Тексты йөкмәткеһен ҡыҫҡаса, йәки ентекләп, йәки һайлап алып һөйләп бирә ала;

- бер нисә предметты, йәки күренеште ябай ғына рәүештә сағыштырып, телдән һәм яҙып һүрәтләй белә;

- уҡыу эшмәкәрлегенә бәйле ябай ғына һөйләмдәр менән үҙ фекерен әйтә һәм үҙенең дөрөҫлөгөн иҫбатлай ала;

-башҡарған проект эше тураһында телдән отчет бирә, йәки презентация буйынса, һ.б. һөйләй белә;

- кроссвордтар, ребустар, йомаҡтар сисә белә.

- телмәр этикетын һаҡлап һаулыҡ һораша, хушлаша, ғәфү үтенә, рәхмәт әйтә, ниндәйҙер үтенес менән мөрәжәғәт итә белә.

**Берлектәге эшмәкәрлек:**

- оҙаҡ йәки ҡыҫҡа ваҡытта башҡарыла торған коллектив эштәрҙең маҡсаттарын һәм үтәлеү этаптарын билдәләй белә (проект эше, мини-тикшереү һ.б.);

- төркөмдә бергәләп башҡарылған эште һәм уның һөҙөмтәһен һөйләшеп, килешеп, роллдәр буйынса бүлешеп башҡарыу;

- төркөмдә бергә эшләгәндә төрлө роллдәрҙе башҡара алыу һәләтен үҫтереү (етәксе, башҡарыусы), үҙ-аллылыҡ, зирәклек, әүҙемлек күһәтеү.

Башланғыс мәктәп аҙағында уҡыусыларҙа **эште көйләүсе универсаль уҡыу күнекмәләре** формалаша:

*Үҙ эшеңде ойоштороу:*

- уҡыу күнегеүҙәрен үтәү өсөн бирелгән эште башҡарыу планын һәм тәртибен билдәләү;

*Үҙ эшеңде тикшереү:*

- күнегеүҙәр үтәгәндә уңыштың йәки хатаның сәбәбен асыҡлау;
- уҡыу эшмәкәрлегенә бәйле ябай ғына һөйләмдәр менән үҙ фекерен әйтә һәм үҙенең дөрөҫлөгөн иҫбатлай ала;
- үҙ эшен үҙ аллы тикшереп, баһалай белеү һәләтенә эйә;

**Предмет һөҙөмтәләре**

“Туған (башҡорт) теле” уҡыу предметын дүрт йыл буйынса уҡытыу балала туған телгә ҡарата яратыу, уны өйрәнеүгә ынтылыш тәрбиәләй. Бала үҙен Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең бер вәкиле итеп күҙаллай башлай, уларҙың тарихына, мәҙәниәтенә битараф булмаған шәхес булып үҫергә тырыша, башҡорт телен халыҡтың милли ҡомартҡыһы, мәҙәни байлығы итеп ҡабул итә.

Башҡорт теленең рус теле менән бер рәттән республиканың дәүләт теле һәм кешеләр менән аралашыу ҡоралы икәнлегенә төшөнә. Бала башҡортса яҙырға, уҡырға, тирә-йүндә кешеләр менән аралашырға өйрәнеп, үҙендә оло ғорурлыҡ тойғолары һиҙә.

**Беренсе класс аҙағында уҡыусы түбәндәге күнекмәләргә эйә була:**

- һүҙҙе һәм һөйләмде айыра; һүҙҙе һөйләм эсенән табып, әйтә ала;
- һүҙҙән өндәрҙе айырып, әйтә белә;
- тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙе айыра;
- ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙы айыра;
- йомшаҡ һәм ҡаты, шулай уҡ яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙы (һүҙ эсендә һәм һүҙҙән тыш) айыра;
- “өн”һәм “хәреф” төшөнсәһен айыра;
- һүҙҙә ижектәр һанын билдәләй;
- һүҙҙә ижектәргә бүлә;
- башҡорт алфавитының хәрефтәрен дөрөҫ әйтә; алфавит хәрефтәре буйынса һүҙҙәрҙе төркөмләй ала;
- баш һәм бәләкәй хәрефтәрҙең һыҙмаһын боҙмайынса, хәрефтәрҙе бер-береһенә ҡушып һәм һүҙҙәрҙе аңлайышлы матур итеп яҙа;
- өйрәнелгән дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен ҡуллана: һөйләмдә һүҙҙәрҙе айырып яҙыу; һөйләм аҙағында тыныш билдәләре: нөктә, һорау һәм өндәү билдәләрен ҡуйыу; һөйләм башын, яңғыҙлыҡ исемдәрҙе (исемдәр, фамилиялар, хайуан ҡушаматтары) баш хәрефтән яҙыу; һүҙҙәрҙе юлдан юлға ижек аша күсереү;
- һүҙҙәрҙе һәм һөйләмдәрҙе хатаһыҙ, буш урын ҡалдырмай, күсереп яҙа (текст 25 һүҙҙән кәм түгел);

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

- телдән әйтелгән тексты хатаһыҙ, хәрефтәрҙе боҙмай, яҙа (текста 3—5 һүҙҙән торған һөйләмдәр була, һүҙҙәр һаны 20 артмаҫка тейеш). Һүҙҙәрҙең яҙылышы әйтелеше менән тап килергә тейеш;
- өйрәнелгән ҡағиҙәләрҙә ебәрелгән хаталарҙы таба һәм төҙәтә;
- тыңланған тексты аңлай;
- мәғәнәһен аңлап, ҡысҡырып һәм эстән ҡыҫҡа ғына тексты интонация менән уҡый ала;
- текстан аңлашылмаған һүҙҙе таба белә;
- бирелгән һүҙҙәр менән һөйләм төҙөй;
- сюжетлы һүрәттәр һәм күҙәтеүҙәр ярҙамында телдән 3—5 һүҙҙән торған текст төҙөй;
- уҡыу күнекмәләрен үтәгәндә өйрәнелгән төшөнсәләрҙе ҡуллана.

**Икенсе класс аҙағында уҡыусы түбәндәге күнекмәләргә эйә була:**

тел аралашыу ҡоралы икәнлекте төшөнә;

- ҡуйылған маҡсатҡа ярашлы тартынҡы өндәрҙе һүҙ эсендә йәки унан тыш баһалай: ҡаты һәм йомшаҡ тартынҡыларҙың парлы һәм парһыҙ булыуын билдәләй ала; яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙың парлы һәм парһыҙ булыуын билдәләй ала;
- һүҙҙе ижектәргә бүлә һәм ижек һанын билдәләй белә;
- һүҙҙә өндәр һәм хәрефтәр һанын билдәләй, шулай уҡ **е, ё, ю, я** хәрефтәре булған һүҙҙәрҙә;
- тамырҙаш һүҙҙәрҙе таба белә;
- һүҙҙә тамырҙы билдәләй ала;
- һүҙҙә ялғауҙы билдәләй белә;
- текстан күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе табып, мәғәнәһен аңлата ала. Һүҙлек буйынса мәғәнәне асыҡлай белә;
- Кем? Нимә? Һорауҙарына яуап биргән һүҙҙәрҙе таба;
- Нимә эшләй? Нимә эшләне? Һорауҙарына яуап биргән һүҙҙәрҙе таба;
- Ниндәй? Һорауҙарына яуап биргән һүҙҙәрҙе таба;
- әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәрен билдәләй;
- һүҙҙә йәки һүҙҙәр араһында өйрәнелгән орфограмманы таба ала;
- өйрәнелгән дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен ҡуллана: һөйләмдә һүҙҙәрҙе айырып яҙыу; һөйләм аҙағында тыныш билдәләре: нөктә, һорау һәм өндәү билдәләрен ҡуйыу; һөйләм башын, яңғыҙлыҡ исемдәрҙе (исемдәр, фамилиялар, хайуан ҡушаматтары) баш хәрефтән яҙыу; һүҙҙәрҙе юлдан юлға ижек аша күсереү; ялғауҙарҙы, айырыу нәҙеклек һәм ҡатылыҡ билдәләрен бергә яҙыу;
- һүҙҙәрҙе һәм һөйләмдәрҙе хатаһыҙ, буш урын ҡалдырмай, күсереп яҙа (текст 50 һүҙҙән кәм түгел);
- телдән әйтелгән тексты хатаһыҙ, хәрефтәрҙе боҙмай, яҙа (текста 3—5 һүҙҙән торған һөйләмдәр була, һүҙҙәр һаны 45- тән артмаҫка тейеш). Һүҙҙәрҙең яҙылышы әйтелеше менән тап килергә тейеш;
- өйрәнелгән ҡағиҙәләргә бәйле ебәрелгән хаталарҙы таба һәм төҙәтә;

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

- дәреслектә бирелгән аңлатма, орфографик, орфоэпик һүҙлектәрҙе ҡуллана;

-бирелгән тема буйынса 2-4 һөйләмдән торған телдән диалог һәм монолог төҙә белә;

- уҡылған йәки тыңланған текст буйынса 1—2 һөйләмдән торған телдән йәки яҙып ябай ғына һығымта бирә белә;

- бирелгән һүҙҙәр менән, һорауҙар аша уларҙың бер-береһе менән бәйләнешен асып, һөйләм төҙә;

- текст темаһын билдәләй, уға исем бирә белә;

- бер нисә бирелгән һөйләмдән текст төҙә ала;

- һорауҙарға таянып, 30—45 һүҙҙән торған хикәйәнең эстәлеген тулыһынса асыҡлап яҙыу (изложение);

- өйрәнелгән телмәр төшөнсәләрен үҙ һүҙҙәре менән аңлата ала.

**Өсөнсө класс аҙағында уҡыусы түбәндәге күнекмәләргә эйә була:**

- башҡорт телен ғорур башҡорт халҡының милли ҡомартҡыһы, мәҙәни байлығы итеп ҡабул итә һәм уны рус теле менән бер рәттән республиканың дәүләт теле һәм кешеләр менән аралашыу ҡоралы икәнлегенә төшөнә;

- өндәрҙе ҡуйылған маҡсатҡа ярашлы һүҙ эсендә йәки унан айырым сағыштыра, төркөмләй белә;

- һүҙгә өн-хәреф анализы эшләй ала;

- һүҙҙәрҙә йомшаҡлыҡ һәм ҡатылыҡ билдәләренең функцияһын билдәләй, өн һәм хәреф һанын теүәлләй белә, шул рәттән **е, ё, ю, я** хәрефтәренән торған һүҙҙәр менән дә.

- тамырҙаш һүҙҙәрҙе омонимдарҙан һәм синонимдарҙан (терминды әйтмәйенсә) айыра белә;

- текста һүҙҙең мәғәнәһен билдәләй;

- тура мәғәнәле һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе айыра;

- исем һүҙ төркөмөн таба, уның һанын, килешен билдәләй;

- сифат һүҙ төркөмөн таный;

- ҡылым һүҙ төркөмөн таный, һанын, заманын билдәләй;

- зат алмаштарын таба (төп формала); текста исемде артыҡ ҡабатлау булмаһын өсөн зат алмаштарын ҡуллана белә;

- әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәрен билдәләй;

- һөйләмдә баш һәм эйәрсән киҫәктәрҙе билдәләй ала;

- йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәрҙе айыра белә;

- һүҙҙә йәки һүҙҙәр араһында өйрәнелгән орфограмманы таба ала;

- һүҙҙәрҙе һәм һөйләмдәрҙе хатаһыҙ, буш урын ҡалдырмай, күсереп яҙа (текст 70 һүҙҙән кәм түгел);

- телдән әйтелгән тексты хатаһыҙ, хәрефтәрҙе боҙмай, яҙа (текста 3—5 һүҙҙән торған һөйләмдәр була, һүҙҙәр һаны 65- тән артмаҫҡа тейеш). Һүҙҙәрҙең яҙылышы әйтелеше менән тап килергә тейеш;

- өйрәнелгән ҡағиҙәләргә бәйле ебәрелгән хаталарҙы таба һәм төҙәтә;

- төрлө типтағы тексты аңлай һәм текстан тейешле мәғлүмәтте таба белә;

- - уҡылған йәки тыңланған текст буйынса 1—2 һөйләмдән торған телдән йәки яҙып ябай ғына һығымта бирә белә;

- -бирелгән тема буйынса 3-5 һөйләмдән торған телдән диалог һәм монолог төҙә белә;

- телдән һәм яҙып 2 – 3 һөйләмдән торған текст төҙә белә. Тексттың йөкмәткеһе саҡырыу, һорау, ғәфү үтенеү, рәхмәт әйтеү, кире ҡағыу темалары менән бәйле булырға тейеш.

- текстағы һөйләмдәрҙең бер-береһе менән бәйле булыуын билдәләй (зат алмаштары, синонимдар, *һәм, ләкин* теркәүестәр ярҙамында);

- текста мәғәнәне асыусы төп һүҙҙәрҙе билдәләй;

- тексттың темаһын һәм төп мәғәнәһен билдәләй;

- план төҙөп, уның буйынса текст әҙерләй белә;

- бирелгән план буйынса үҙ аллы йәки бергәләп изложение яҙыу;

- өйрәнелгән телмәр төшөнсәләрен үҙ һүҙҙәре менән аңлата ала.

- аңлатма һүҙлек ярҙамында һүҙҙәрҙең мәғәнәһен асыҡлай.

**Дүртенсе класс аҙағында уҡыусы түбәндәге күнекмәләргә эйә була:**

- Рәсәй Федерацияһында йәшәгән төрлө милләт халыҡтарының теле һәм мәҙәниәте ил халҡы өсөн рухи һәм әхлаҡи ҡиммәт булыуын, уларҙы һаҡлау һәм артабан үҫтереү һәр кемдең бурысы икәнлекте аңлай;

- башҡорт теле башҡорт халҡының теле, ул илгә исем биргән тел, ул халыҡтың тарихын, мәҙәниәтен һаҡлаусы һәм ҡурсылаусы. Шуға ла ул Башҡортостандың дәүләт теле тип иғлан ителгән, уны өйрәнеү, ул телдә һөйләшеү һәр кемдең бурысы тигәнде бала ҡабул итергә тейеш;

- туған телдә яҙа һәм һөйләү белеү кешене мәҙәни яҡтан билдәләүсе күрһәткес икәнлекте аңлай;

- һүҙҙәргә өн-хәреф анализы эшләй белә (дәреслектә бирелгән алгоритм буйынса);

- бирелгән һүҙҙәргә синоним һайлай белә;

- - бирелгән һүҙҙәргә антоним һайлай белә;

- телмәрҙә мәғәнәһенә аңлатма кәрәк булған һүҙҙәрҙе таба, текстағы өҙөк буйынса уны аңлата ала;

- һүҙҙең составына анализ үткәрә, һүҙ составына схема төҙөй; схема менән һүҙҙең составын сағыштырып, һығымта яһай белә;

- грамматик билдәләр буйынса һүҙҙең ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарауын билдәләй ала;

- исем һүҙ төркөмөнөң грамматик билдәләрен таба, уның һанын, килешен билдәләй; исемгә грамматик анализ эшләй;

- сифат һүҙ төркөмөнөң грамматик билдәләрен таба, уларҙың ниндәй ялғауҙар ярҙамында барлыҡҡа килеүен, төп сифатҡа (*ҙур, йәш, аҡ*) йәки шартлы сифатҡа (алтын сәғәт, ҡышҡы көн) ҡараймы, сифат дәрәжәһен билдәләй; сифатҡа грамматик анализ эшләй;

- ҡылым һүҙ төркөмөн таный, һанын, заманын билдәләй; ҡылымға грамматик анализ эшләй;

- зат алмаштарының грамматик билдәләрен таба (төп формала): зат, һан; текста исемде артыҡ ҡабатлау булмаһын өсөн зат алмаштарын ҡуллана белә;

- һөйләмде, һүҙбәйләнеште, һүҙҙе бер-береһенән айыра;

- әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәрен билдәләй;

- йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәрҙе айыра белә;

- тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе таба белә;

- ябай һөйләмгә синтаксик анализ эшләү тәртибен белә;

- һүҙҙә йәки һүҙҙәр араһында өйрәнелгән орфограмманы таба ала;

- һүҙҙәрҙе һәм һөйләмдәрҙе хатаһыҙ, буш урын ҡалдырмай, күсереп яҙа (текст 85 һүҙҙән кәм түгел);

- телдән әйтелгән тексты хатаһыҙ, хәрефтәрҙе боҙмай, яҙа (текста 3—5 һүҙҙән торған һөйләмдәр була, һүҙҙәр һаны 80- дән артмаҫҡа тейеш);

- бирелгән тема буйынса 4-6 һөйләмдән торған телдән диалог һәм монолог төҙә белә;

- аралашҡанда тейешле телмәр сараларын ҡуллана белә;

- телдән һәм яҙып 3 -5 һөйләмдән торған текст төҙә белә.

- текстың темаһын һәм төп мәғәнәһен билдәләй;

- төҙөлгән план буйынса текст әҙерләй белә;

- телдән һәм яҙма рәүештә тексты эҙмә-эҙлекле һөйләй ала;

- текстҡа план төҙөй белә;

- телдән текстың өҙөгөн һайлап һөйләй ала (выборочный пересказ);

- алдан әҙерлек буйынса бирелгән темаға сочинение яҙа;

- өйрәнелгән төшөнсәләрҙе үҙ һүҙҙәре менән аңлата ала;

- һүҙҙең мәғәнәһен белешмә ҡулланмалар, шулай уҡ электрон ресурстар аша аңлата белә.

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

## Предметтың йөкмәткеһен яҡынса тематик яҡтан планлаштырыу

Программаны тормошҡа ашырғанда уҡытыу-методик материалдарҙан торған электрон белем биреү сараларын ҡулланыу тәҡдим ителә (ҡушымта).

Күрһәтелгән сәғәттәр һаны тәҡдим формаһында бирелә, уларҙы белем биреү ойошмаһының мөмкинлегенән, уҡыусыларҙың предметты үҙләштереү һәләтенән сығып үҙгәртергә мөмкин.

**1 класс –88 сәғәт.**

| Курстың бүлеге, темаһы | Программа йөкмәткеһе | Сәғәттәр һаны | Уҡытыу формалары һәм методтары<br>Уҡыусылар эшмәкәрлегенә характеристика |
|---|---|---|---|
| **Грамотаға өйрәтеү - 66 сәғәт** | | | |
| **Телмәр үҫтереү**<br>Блоктар: «Мин башҡорт телен өйрәнәм», «Танышыу» | Башҡорт теле дәреслеге менән танышыу. Төрлө илдәрҙә кешеләр төрлө-төрлө телдәрҙә аралашалар.<br>Китаптар уҡырға һәм яҙырға өйрәтәләр. Башҡорт өндәре һәм хәрефтәрен ошо китап аша өйрәнеп була, бер-беребеҙ менән аралашырға, хат яҙырға, ҡотларға өйрәнербеҙ.<br>Башҡорт теле – беҙҙең туған тел. Был телдә беҙҙең ата-әсәйҙәр, олатайҙаә һәм өләсәйҙәр һөйләшә. | 6 | Әңгәмә: башҡорт теле дәреслеге беҙҙең яҡын дуҫ, тел тураһында бөтәһен дә белә. Китап биттәрендә беҙ хәрефтәр, һ-ҙҙәр, ҡыҙыҡлы һүрәттәр күрәбеҙ. Китап беҙҙе уҡырға, яҙырға, бер-беребеҙ менән, уҡытыусы, ата-әсәйҙәр менән һөйләшергә өйрәтер.<br>Китапта ниндәй һүрәттәр оҡшаны? Ниндәйҙер таныш һүрәттәр күрҙегеҙме?<br>Башҡорт теле дәреслеген “Букварь” менән сағыштырып ҡарағыҙ әле: улар бер-береһенә оҡшашмы, әллә юҡмы? |

PDF-XChange Viewer
Click to buy NOW!
www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | **Темалар:** Исем, фамилия, атаһының исеме тураһында мәғлүмәт. Сәләмләү, танышыу, хушлашыу. Телефондан һөйләшеү. Уйын һәм уйынсыҡтар (типик телмәр фразаларын | | Уҡытыусының башҡортса әйткәнен ҡабул итеү.<br>Уҡытыусының һәм тиҫтерҙәренең башҡорт телендә әйткән һүҙҙе, фразаны аңлауы (һүҙ менән, йә ым-ишара аша аңлатыуы).<br>Бәләкәй генә хикәйә төҙөү (күрһәтелгән сюжетлы һүрәттәр серияһы,уйын, күҙәтеү аша).<br>Башҡорт телендә әйтелгән, йә үҙе уҡыған һүҙҙе, һөйләмде, бәләкәй генә тексты аңлы рәүештә ҡабул итә. Ҡурсаҡтар менән уйнап ойошторолған танышыу уйындарында әүҙем ҡатнаша ( рус теленә таянып).<br>Уҡытыусы биргән алгоритм буйынса типик фразалар ҡулланып диалог ҡора.<br>Парлап эшләү:<br>-сюжетлы һүрәттәр серияһы аша ваҡиғаның теҙелеп килеүе боҙолған осраҡтарҙы төҙәтеп эшләй белеү: сюжетты аңлап, һүрәттәргә ҡарап, тексты телдән һөйләп биреү;<br>- ваҡиғаларҙың барышын дөрөҫләп, һүрәттәргә анализ биреп, рәссамдың хаталарын табып, ваҡиғаны дөрөҫләп, телдән һөйләп биреү.<br>Уҡыу осраҡтарына бәйле бирелгән тема буйынса диалогтар ҡороп уйнау (“Телефондан һөйләшеү”, “Исемең нисек?”, “Ниндәй уйынсыҡтар оҡшай?” һ. б.<br>Күмәкләп мәктәп тормошона бәйле кескәй генә хикәйә төҙөү.<br>Күмәкләп ниндәйҙер предметты һүрәтләп һөйләргә өйрәнеү (уйынсыты, дәреслекте, һ.б.)<br>Үҙ-аллы эш: терәк һүҙҙәр менән бәләкәй генә хикәйә |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | төҙөү.<br>Бергәләп төҙөлгән текст буйынса фекер алышырға өйрәтеү: һүҙ дөрөҫ кулланылғанмы, диалог килеп сыкканмы?<br>Һүҙҙе тыңлап, уның мәғәнәһен әйтеү (башҡортса, йә русса).<br>Уйын “Тәржемәселәр”: һүҙҙәрҙе, фразаларҙы, һөйләмде руссанан башҡортсаға, йә киреһенсә тәржемә итеү. |
| **һүҙ һәм һөйләм.**<br>Блок: «Мине уратып алған донъя» | һүҙҙе һөйләмдән айырыу. һөйләмдәге һүҙҙәрҙе айырыу, уларҙың теҙелеп килеү тәртибен төрлөсә үҙгәртеп ҡарау.<br>һүҙҙе өйрәнеү һәм тикшереп ҡарауҙы аңлау.<br>Һүҙ мәғәнәһен күҙәтеү.<br>**Темалар:** Мәктәп. Класс. Уҡыу кәрәк-яраҡтары. Уҡытыусы һәм уҡыусылар. Класта дежур булыу. Тәнәфес. Физзарядка.<br>Тиҙәйткестәр ятлайбыҙ. Уйындар уйнайбыҙ. | 10 | Кумәк эш: бирелгән һүҙ менән һөйләм төҙөү.<br>һүҙҙе рус теләндәге һүҙ менән сағыштырып, уның әйтелешен хәтерҙә ҡалдырыу.<br>Уйын: “Ҡар өйөмө”: сылбыр буйынса, һәр бер бала һөйләмгә яңы һүҙ өҫтәй.<br>Уйын “Йәнле һүҙҙәр” (балалар һөйләмдәге һүҙҙәр ролендә төрлөсә урындарын үҙгәртеп, һөйләм төҙөп, теҙеләләр һәм “һөйләмде” уҡыйҙар.<br>һөйләмде моделләштереү: һөйләмдәге һүҙҙәрҙең һанын һанап, һәр береһен таҫма менән билдәләйҙәр.<br>Үҙ-аллы эш: һөйләмдәге һүҙҙәрҙең һанын һанап, һәр береһен таҫма менән билдәләү (һәр уҡыусы айырым).<br>һөйләмдең моделе менән эш: моделдең үҙгәреуенән сығып, һөйләмде үҙгәртеү.<br>Уҡыу ситуацияһына бәйле диалогтарҙы уйнап күрһәтеү: “Мин бөгөн уҡытыусы”, “Мин – уҡыусы”, “Миңә башҡорт теле дәресендә нимә кәрәк?”, “Минең |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | партамда нимә артыҡ?” һ.б.<br>Күмәк эш: “Иртәгә була торған дәрестәрҙең атамаһын әйт!”<br>Уҡыу диалогы: “Мин иртән мәктәпкә нисек әҙерләнәм? (уҡыусылырҙың береһе һорау бирә, икенсеһе яуаплай)<br>“Мин иртәнсәк нимә эшләйем?”(уҡыусылырҙың береһе һорау бирә, икенсеһе яуаплай)<br>Төркөмдә эш: “Ҡайһы команда тиҙерәк һөйләм төҙөр?” (2–3 һүҙҙән).<br>Терәк һорауҙар һәм сюжетлы һүрәттәр буйынса һөйләмдәр төҙөү.<br>Уйын: “Һөйләмдәге хатаны төҙәт!” (стилистика һәм грамматика буйынса хатаны төҙәтеү)<br>Уҡыу диалогы: “Был предмет менән нимә эшләргә була? Ә был предметты аңлатҡан һүҙ менән нимә эшләргә мөмкин?”<br>Уйын: “Модель буйынса һүҙ төҙө!”<br>Күмәк эш: Тиҙәйткестәрҙе ятлау (тәүҙә – хор менән, аҙаҡ – тын ғына тауыш менән, бышылдап, сәпәкәйләп, бармаҡтар менән партаға туҡылдып).<br>Айырым: ҡымҡырып тиҙәйткесте сылбыр буйлап әйтеү. |
| **Фонетика**<br>(бөтә лексик темаларҙа өйрәтелә)<br>Блок: «Мин һәм | Телмәр өндәре. Һуҙынҡылар (ҡалын һәм нәҙек) һәм тартынҡылар (яңғырау һәм һаңғырау) тураһында тәүге төшөнсәләр. Үҙенсәлекле һуҙынҡы өндәр [о], [ы], [э], [ө], | 12 | Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү һәм хәрефтәрҙе яҙыу күнекмәләре: Уу – Үү, Әә – Ее, Оо – Өө, Кк – Ҡҡ, Хх – Һһ, Зз – Ҙҙ, Гг – Ғғ, Нн – ң, Сс – ҫ.<br>Үҙенсәлекле тартынҡыларҙы дөрөҫ әйтергә өйрәтеүгә артикуляция күнекмәләре: [ҡ], [ғ], [һ], [ҙ], [ҫ], [ң]. |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| …инең ғаиләм» | [ү], [ә] һәм уларҙың хәрефтәре. Тартынҡылар [ҡ], [ғ], [һ], [ҙ], [ç], [ң], уларҙың хәрефтәре. Һүҙҙең әйтелешенең һәм уның мәғәнәһенең берлеге. Бер йәки бер нисә өндә айырмаһы булған һүҙҙәрҙе сағыштырыу.<br>Һүҙгә өн анализы, өн моделдәре менән эш: һүҙҙең өн моделен төҙөү; ошо моделгә яңы һүҙҙәр табыу.<br>Һуҙынҡы өндәрҙе тартынҡы өндәрҙән, ҡалын һуҙынҡыларҙы [а], [у], [о], [ы], нәҙек һуҙынҡыларҙан[ә], [ү], [ө], [э], [и], яңғырау тартынҡыларҙы һаңғырау тартынҡыларҙан, ҡатыларын йомшаҡтарынан айырыу.<br>Ижек – һүҙҙең төп әйтелеш берәмеге. Һүҙҙәрҙә ижектәр һаны. Баҫымлы ижек.<br>**Темалар:**<br>Беҙҙең ғаилә. Ғаиләлә беҙ нисәү? Ата-әсәләрҙең шөғөлө. Йорт эштәрендә ярҙам.<br>Туҡланыу: иртәнге аш, төшкө аш, киске аш. Ваҡыт: төн һәм көн. Сәғәт һәм минуттар. Аҙна көндәре. Беҙҙең байрамдар: минең тыуған көн. | | Өйрәнелгән һүҙҙәрҙе йырлап, үҙенсәлекле тартынҡыларҙы айырып әйтеп, бармаҡ уйындары уйнау.<br>Тиҙәйткестәрҙе, һанашмаҡтарҙы ятлау.<br>Күмәк эш: һүҙҙең өн моделен төҙөү (рус телендәге алгоритмға таянып).<br>Парлы эш: “Һүҙҙәр нимәһе менән айырыла?” – һүҙҙә өндәрҙең яңғырауын һәм уларҙың һандарын сағыштырып: *төн – көн; апай – ағай; сәй – шәкәр; ҡалаҡ – ҡолаҡ*. «Что означают эти слова?».<br>Уйын: “Минең һымаҡ әйт!” (уҡытыусының әйтелеш өлгөһөн отоп алыу өсөн).<br>Игра: “Һүҙҙә был өн бармы?” (уҡытыусы әйткән өн һүҙҙә булһа, бала тупты тота”.<br>Уйын-ярыш: “Кем күберәк был өн булған һүҙҙәрҙе хәтерҙә ҡалдырыр, мин уҡыған шиғырҙа”<br>Модель менән эш: бирелгән өндөң һүҙҙә (башында, уртаһында, аҙағында) килеүенә ҡарап, тейешле моделде һайлау.<br>Күмәк эш: һүҙҙәрҙе беренсе өнө, йәки аҙаҡҡыһы буйынса төркөмләү.<br>“Йәнле өндәр”: балалар ниндәйҙер өн ролендә һүҙҙәр төҙөп, уйнайҙар.<br>Һүҙҙең өн составын төрлө төҫтәге фишкалар ҡулланып төҙөү (рус телендәге кеүек).<br>Бергәләп төҙөлгән өн моделенә анализ биреү һәм уның тураһында һөйләү.<br>Ижади эш: бирелгән моделгә тап килтереп һүҙҙәр |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | әйтеү.<br>Парлап эшләү: ике һүҙҙең моделен сағыштырып, айырмаһын һәм оҡшашлығын билдәләү.<br>Өндәрҙе ниндәйҙер бирелгән билдәһе буйынса төркөмләгәндә, башҡарған эште аңлатып, һөйләп башҡарыу (мәҫәлән, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар).<br>Уҡыу диалогы: "Әйтелеше буйынса һуҙынҡылар тартынҡыларҙан нисек айырылылыр?"<br>Уйын: "Ҡустыһын әйт!" (ҡатылығы һәм йомшаҡлығы буйынса парлы тартынҡылар).<br>Күмәк эш: тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәргә анализ биреү, бер-береһенең әйткәнен дөрөҫләү.<br>Башҡарылған эштең һөҙөмтәһен билдәләргә күнегеү, хаталар булһа – төҙәтергә күнегеү.<br>Һүҙҙәге ижектәр һанын һанап, әйтеп эшләү.<br>Парлап эшләү: бирелгән ижектәр һаны буйынса һүҙҙәр уйлап табыу. |
| **Графика.**<br>Блок «Мин һәм минең дуҫтарым» | Өндө хәрефтән айырыу: хәреф өндө белдергән билдә. Башҡорт теленң графикаһы ижек принцибына таянып ҡоролған. *Е, ё, ю, я* хәрефтәренең функцияһы.<br>***В*** хәрефе, ике өндө аңлата: [в] и [w]. Башҡорт алфавитында хәрефтәр теҙмәһе.<br>**Темалар:**<br>Кейем магазинында. Аҙыҡ-түлек магазинында. Минең бесәйем. МИнең этем. Минең яраткан сәскәм. Баҡсала гөлләмә | 8 | Уйын: "Тейешле хәрефте тап!" (өндөң хәрефен билдәләү).<br>Уйын: сәпәкәй итегеҙ, әгәр [w] өнөн ишетһәгеҙ!"<br>Уҡытыусы асыҡ итеп һүҙҙәрҙе әйтә: *вагон, waҡыт, велосипед, wәғәҙә, врач, виноград, waтыҡ, винегрет, waҡ, waҡиға, винегрет.*<br>Уҡыу диалогы: "ь и ъ билдәләре ни өсөн кәрәк?", аңлатығыҙ.<br>Уҡытыусының башҡорт алфавитының тарихы тураһында һөйләүе, алфавиттың мәғлүмәтте |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | йыябыҙ. Беҙҙең уйындар. Кинотеатрға барабыҙ. | | системаға һалыуында уйнаған роле.<br>Уйын: “Алфавиты ҡабатла!”, “Алфавиттың өҙөгөн ҡабатла!”, “Алфавит буйынса тик һуҙынҡы өндәрҙе генә әйт!”<br><br>Бергәләп эшләү: “Алфавит буйынса һүҙҙәрҙе яҙ!”, “Кластағы уҡыусыларҙың исемен алфавит буйынса яҙ!” |
| **Уҡыу.**<br>Блок: «Минең республикам» | Ижекләп уҡыу ( һуҙынҡы өнгә иғтибар итеп, уны һуҙып әйтеп). Ижектәр таблицаһы, һәм асыҡ ижектәр (тартынҡы өнгә һуҙынҡы өн ҡушылыптөҙөлгән таблицалар: *кә, ҡу,бе*).<br>Талғын ижекләп уҡыу һәм ижектәрҙе бер-береһенә ҡушып, һүҙҙе тулыһынса уҡыу. Плавное слоговое чтение и чтение целыми словами со скоростью, соответствующей индивидуальному темпу.<br><br>Тыныш билдәләренә тап килтереп, тауыш интонацияһы һәм паузалар менән уҡыу. Һүҙҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе аңлап уҡыу.<br><br>Бәләкәй күләмле проза әҫәрҙәрен һәм шиғырҙарҙы тасуири уҡыу.<br>Орфоэпик уҡыу (һүҙҙәрҙе тулыһынса уҡырға | 10 | “Тәҙрәләр” методик ҡулланмаһы менән эш: ижектәрҙе һуҙынҡы өндә алмаштырып уҡыу<br>Күнегеү: уҡылған ижекте атамаһында ошо ижек булған һүрәтте табыу.<br>Уҡылған һүҙҙәрҙе был предметтар төшөрөлгән һүрәттәр ҙе күрһәтеп әйтеү.<br>Парлап эшләү: һөйләмдең башын һәм аҙағын бирелгән өлгөләрҙән табып, ҡушып, тулы һөйләм төҙөү.<br>Уйын: “Һөйләмде тамамла!” - аҙағы бирелмәгән һөйләмдәрҙе уҡып, аҙағын уйлап, мәғәнәһе буйынса әйтеп бөтөрөү.<br>Һөйләмдә төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе өҫтәп әйтергә.<br>Күнегеү: уҡылған һөйләмде мәғәнәһе тап килгән һүрәт менән билдәләргә.<br>Бергәләп эшләү: уҡылған текстҡа яуап биреү, ундағы тейешле мәғлүмәтте таба белеү.<br>Бергәләп эшләү: ҡайһы бер һүҙҙәр һүрәттәр менән |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | өйрәнең барышында).<br>Орфографик уҡыу (әйтеп уҡыу) – уҡытыусы әйтеп яҙҙырғанда, йәки тексты күсереп яҙғанда үҙ-үҙеңде тикшереү маҡсатында.<br><br>**Темалар:** Нимә ул Тыуған ил? Беҙ ҡайҙа йәшәйбеҙ? Беҙҙең ҡала нисек атала? Беҙҙең ауыл нисек атала? Өләсәйгә ҡунаҡҡа. Башҡорт аш-һыуҙары: бишбармаҡ, бәлеш, ҡыҫтыбай, ҡоймаҡ, сәк-сәк. Беҙҙең байрамда: Яңы йыл шыршыһына әҙерләнәбеҙ. | | күрһәтелгән тексты, һүрәттә күрһәтелгән һүҙҙәрҙе әйтеп уҡыу.<br><br>Ижади эш: уҡылған әҫәр буйынса бирелгән һүрәттәрҙе төшөрөп бөтөрөү.<br>Бергәләп эшләү: бәләкәй генә тексты, йәки һөйләмде тыныш билдәләрен айырып, тауыш интонацияһын һәм паузаларҙы һаҡлап уҡыу. (алдан әҙерлек эше үткәрелә)<br>Уҡытыусының ике төрлө уҡыу формаһының (орфографик һәм орфоэпик)мөһимлеген аңлатыу.<br>Парлашып эшләү: һөйләмде, тексты орфоэпик уҡырға өйрәнеү, бер-береһенә телдән әйтеп, яҙҙыртып. Аҙаҡ – ролдәр менән алмашыу. |
| **Яҙыу.**<br>Блок: «Мине уратып алған донъя» | Дәфтәр битендә һәм класс таҡтаһында дөрөҫ йүнәлеш һаҡлап, яҙырға күнегеү.<br>Рус телендәге хәрефтәр һыҙмаһы менән сағыштырып, башҡорт теленең баш һәм бәләкәй хәрефтәрен яҙыу.<br>Матур, аңлайышлы, бер-береһе менән дөрөҫ тоташтырылған хәрефтәр менән яҙыу.<br><br>Әйтелеше һәм яҙылышы бер булған һөйләмдәрҙе һәм һүҙҙәрҙе әйтең буйынса яҙыу.<br>Күсереп яҙыу ҡағиҙәләре һәм алгоритмы.<br>Хәреф булмаған график саралары ҡуллана белеү: һүҙҙәр араһында буш урын, юлдан- | 18 | Парлап эшләү: бер-береһенә тасуири уҡып ишеттереү.<br>Уйын: “Хәрефтәр конструкторы” – хәрефте элементтары буйынса йыйыу.<br>Хәрефтең элементтарын тикшереү һәм хәтерҙә ҡалдырыу.<br>Пластилиндан, тимер сыбыҡтан башҡорт хәрефтәрен эшләү һәм улар менән һүҙҙәр уйлау.<br>Уйын: “Хәрефте әйт!” - бер-береһенә оҡшаш хәрефтәрҙе айырып, дөрөҫ әйтеү, улар менән һүҙ уйлау.<br>“Хәреф менән нимә булды?”: формаһы боҙолған хәрефтәрҙе тикшереү һәм етешмәгән өлөштәрен өҫтәү. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | юлға күсереү тамғаһы.<br>**Темалар:**<br>Беҙҙең баҡса: түтәлдәрҙә нимә үҫә? Емеш-еләктең бай урожайы. Минең яратҡан еләктәр. Картуф ҡаҙабыҙ. Йәшелсәләрҙе йыябыҙ.<br>Тыуған тәбиғәт: урманда ниндәй ағастар үҫә?<br>Беҙҙең яҡтың ҡыр хайуандары: ҡуян, төлкө, бүре, айыу, мышы.<br>Йорт хайуандары: һыйыр, һарыҡ, кәзә, ат, эт, бесәй.<br>Йорт ҡоштары: тауыҡ, әтәс, ҡаҙ, өйрәк,күркә. Беҙ уларҙы нисек тәрбиәләйбеҙ? | | Практик эш: яҙылған хәрефтең дөрөҫлөгөн өлгө буйынса тикшереү һәм төҙәтеү.<br>Парлап эшләү: бер үк һүҙҙәрҙе китап хәрефтәре (баҫма) һәм яҙма хәрефтәр менән сағыштырыу һәм тикшереү.<br>Баҫма һөйләмдәрҙе һәм тексты яҙыу.<br><br>Күсереп яҙыуҙа эш башҡарыу тәртибен һаҡлау, бер-береһенең яҙма эшен тикшереп, баһалау.<br>Һанашмаҡтарҙы, бармаҡ уйындарын уйнап күрһәтеү.<br>Обыгрывание считалок, пальчиковых игр.<br>Тиҙәйткестәрҙе ятлау. |
| **Орфография һәм пунктуация** (бөтә лексик темаларҙа өйрәнелә) | Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре һәм уларҙы ҡулланыу:һүҙҙәрҙе айырым яҙыу; һөйләмде, исемдәрҙе, хайуан ҡушаматтарын ҙур хәрефтән башлап яҙыу; һүҙҙәрҙе ижектән ижеккә күсереү; һөйләм аҙағында тыныш билдәләре: нөктә, һорау һәм өндәү билдәһе. | 2 | Тексты биргәләп тикшереп, унан кеше исемдәрен, хайуан ҡушаматтарын табып, дәфтәргә күсереп яҙыу.<br>Күнегеү: тәрлә һүҙҙәрҙән төҙөлгән һөйләмде башын һәм аҙағын дөрөҫ урынлаштырып яҙыу, һүҙҙәр араһында буш урындар ҡалдырыу.<br>Һөйләмде яҙғанда ни өсөн һүҙҙә баш хәреф яҙылғанын аңлатып эш итеү.<br>Уйын: бирелгән хәрефкә кем күберәк исемдәр яҙыр?<br>Практик эш: өйрәнелгән ҡағиҙәләрҙе ҡулланып, тексты уҡытыусы әйтеүе (диктовка) буйынса, йәки күсереп яҙыу.<br><br>Мини-проект: бер юлға ҡыҙҙар исемен, икенсе юлға – малайҙар исемен яҙыу. Һуңынан уларҙы һанарға. Исемдәрҙә ниндәй баш хәреф күберәк булып сыҡты?. |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| **Телде системалы өйрәтеү - 22 сәғәт** | | | |
| **Тел тураһында дөйөм мәғлүмәт.**<br><br>Блок: «Мин башҡорт телен өйрәнәм» | Тел кешеләрҙең бер-береһе менән аралашыу һәм тирә-йүнде өйрәнеү ҡоралы.<br>Телдәрҙең күплелеге һәм төрлөлөгө.<br>Аралашыу маҡсаты һәм осраҡтары.<br>**Темалар:**<br>Беҙҙең ауылда / ҡалала кемдәр йәшәй? Улар ниндәй телдә һөйләшәләр? Һин ниндәй телдәр беләһең? | 2 | Уҡытыусы һөйләүе: “Тел – кешеләрҙең аралашыу ҡоралы”.<br>Диалог: “Тел ярҙамынан башҡа аралашып буламы?”<br>Рус телендә уҡытыусы уҡыу ситуацияһы ҡора: беҙ алыҫҡа ауылға ҡунаҡҡа барҙыҡ ти, унда тик башҡортса ғына һөйләшәләр. Нисек кешеләр менән һөйләшербеҙ? Диалог тәүҙә рус телендә, аҙаҡ – башҡортса бара.<br>Бергәләп, телдең аралашыу сараһы икәнлеккә ябай ғына һығымта яһау.<br>Текст һәм уның йөкмәткеһе буйынса бирелгән һүрәттәр аша телдең яҙма рәүештә һәм һөйләшеп аралашырға мөмкинлекте иҫбатлау.<br><br>Ижади эш: тик яҙма телмәр менән генә хәбәрләшеү кәрәклегенә осраҡ (ситуация)уйлап әйтеү. |
| **Фонетика.**<br>Блок: «Танышыу» | Телмәр өндәре. Башҡорт теленең һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәре, уларҙы рус теленең өндәре менән сағыштырыу.<br>Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре: һуҙынҡылар- [ә], [ө], [ү]; тартынҡылар - [ҡ], [ғ] [ҙ], [ҫ], [һ], [ң].<br>Һуҙынҡылар: ҡалын - [а], [у], [о], [ы], нәҙек - [ә], [ө], [ү], [э], [и]. | 2 | Әңгәмә: “Беҙ башҡорт теленең өндәре тураһында нимә беләбеҙ?”, алдан өйрәнелгән мәғлүмәттәрҙе нығытыу.<br>Мини-проект: алфавиттан рус һәм башҡорт телендә бер үк яҙылған хәрефтәрҙе күсереп яҙыу. Улар нисек әйтеләләр, әйтеп ишеттереү (һүҙҙәр өлгөһөндә).<br>Күнегеү: “Өндө әйт!” – тәүҙә уҡытыусы, аҙаҡ - алып барыусы бала, түңәрәктә торған уҡыусыларҙың береһенә ниндәйҙер өндө әйтә, уҡыусы уны асыҡлап |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | Ҡаты һәм йомшаҡ тартынҡылар, уларҙың айырмаһы. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар, уларҙың айырмаһы. Тартынҡы өн [й’].<br><br>Рус теленән ингән шышылдаулы тартынҡылар: [ж], [ш], [ч’], [щ’]. Ике өндән торған *е, ю, я, ё* хәрефтәре.<br><br>Һүҙҙә баҫым.<br>Ижек. Һүҙҙә ижектәр һаны. Баҫымлы ижек. Һүҙҙе ижектәргә бүлеү (ябай осраҡтар, тартынҡылар йәнәш килмәгән һүҙҙәрҙә).<br>Уҡыусыларҙың тиҫтерҙәрен сәләмләү формалары, таныш булған һәм таныш булмаған кешегә мөрәжәғәт итеү формалары. | | әйтеп, яуап бирә (мәҫәлән: был ҡалын һуҙынҡы, б… нәҙек һуҙынҡы; был яңғырау / һаңғырау тартынҡы һ.б.)<br>Уйын: “Бирелгән өн менән һүҙ уйла!”<br>Бергәләп эшләү: һүҙҙәрҙе уҡырға, рус теленә тәржемә итергә, нимәһе менән бер-береһенән айырылалар, һығымта яһап, аңлатырға: *баш, биш, таш, түш, теш, тел.*<br>Өндәрҙе телдән сифаттары буйынса баһалау.<br>Диалог: ”Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙең сифаттарын телдән һөйләү.<br>Бирелгән хәрефтәрҙән әйтелгән өндө табып, өнгә характеристика биреү.<br>Күнегеүҙе әйтеп, аңлатып башҡарыу: һүҙҙәрҙә өндәр дөрөҫ бирелгәнме, ниндәй хата ебәрелгән – төҙәтеү. |
| **Графика.**<br>Блок: «Минең мәктәбем» | Өн һәм хәреф, уларҙы айыра белеү. Яҙыуҙа тартынҡыларҙың ҡатылығын башҡорт һуҙынҡылары менән билдәләү: *а, о, у, ы.*<br><br>Яҙыуҙа тартынҡыларҙың йомшаҡлығын башҡорт һуҙынҡылары *ә, ө, ү, э, и* менән билдәләү.<br><br>*Е, ё, ю, я* хәрефтәренең функцияһы.<br>Айырыу билдәләре : *ь* һәм *ъ*. | 4 | Һүҙҙең өн-хәреф моделен моделләштереү.<br>Диалог: “Һүҙҙең өн һәм хәреф составын сағыштырыу”.<br><br>Таблица менән эш: өс графанан торған таблицаны тултырыу – беренсе графала – һүҙҙең хәрефе менән өндәре бер үк һанда, икенсеһендә – өндәр һаны аҙ, өсөнсөһөндә – өндәр һаны хәреф һандарынан артыҡ.<br>Күнегеү: “Тик ҡалын һуҙынҡылар булған һүҙҙәрҙе табырға!” |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | ***В*** хәрефе, ике өндө аңлата: [в] и [w]: башҡорт һүҙҙәрендә ***ваҡыт*** [waҡыт, Вәли], рус теленән ингән һүҙҙәрҙә - [*в*]: *вагон, ваза*. Яҙғанда һәр саҡ ***Вв*** яҙыла.<br>Хәреф булмаған билдәләр: һүҙҙәр араһында буш урын, һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсереү билдәһе.<br><br>Башҡорт алфавиты: хәрефтәрҙең дөрөҫ әйтелеше, килеү тәртибе. Алфавитты һүҙҙәр исемлеген теҙеүҙә ҡулланыу.<br>Темалар:<br>Мәктәптә. Дәрестәр селтәре. Түңәрәк дәресендә. Китапханала. | | “Тик нәҙек һүҙынҡылар булған һүҙҙәрҙе табырға!”<br>Парлап эшләү: ”Һүҙҙә ижектәр һанын билдәләү, уларҙы юлдан юлға күсереү мөмкинлектәрен аңлатыу”.<br><br>Айырыу билдәләре (ь һәм ъ), в хәрефенең һүҙҙә яҙылыуын аңлатыу.<br>Уйын: “Кем һүҙ тураһында яҡшыраҡ һөйләр!”<br>Уйын-ярыш: “Алфавитты ҡабатла!”.<br>Бергәләп эшләү: һүҙҙәрҙе алфавит буйынса теҙеп яҙыу. |
| **Орфоэпия**<br>(бөтә лексик темаларҙа өйрәнелә) | Әҙәби башҡорт теле нормаларына ярашлы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе әйтә белеү (дәреслектә бирелгән һүҙҙәрҙе) | 2 | Дәреслектәге һүҙҙәрҙә баҫымды дөрөҫ ҡуйырға өйрәнеү.<br><br>Дидактик уйын: “Рифма уйлап тап!” ( орфоэпик һүҙлектән һүҙ алып, шуға рифма табыу). Был һүҙҙәр менән һөйләм төҙөү.<br>Пралап эшләү: орфоэпик һүҙлектә бирелгән һүҙҙәрҙе баҫым ҡуйып уҡыу. |
| ***Лексика.***<br>Блок: «Мин һәм минең ғаиләм» | Һүҙ – телмәр берәмеге (танышыу).<br>Һүҙ предметтың атамаһын, сифатын, эш-хәрәкәтен белдерә (танышыу). | 4 | Өйрәтеү диалогы: “Һүҙҙәр ниндәй һорауҙарға яуап була?”<br>“Кем? Нимә? Һорауҙарына яуап биргән һүҙҙәрҙе |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | Темалар:<br>Өй. Ғаилә ағзалары һөнәре һәм шөғөлө. Беҙ нисек буш ваҡытты үткәрәбеҙ. | | күҙәтеү.<br><br>Бергәләп эшләү: “Кем? Нимә? Һорауҙарына яуап биргән һүҙҙәрҙе төркөмләү. Уларҙы руссанан башҡорт теленә һәм киреһенсә тәржемә итеү.<br>Өйрәтеү диалогы: “Ниндәй? һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе күҙәтеү.<br>Текстан “Ниндәй? һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе табып уҡыу һәм яҙыу (әйтеп, аңлатып).<br>Дәреслектәге рус-башҡорт һүҙлеген ҡулланырға өйрәнеү.<br>Мәғәнәләрен аңлатыу кәрәк булған һүҙҙәрҙе табып, һүҙлектән тикшереү.<br>Парлашып эшләү: бирелгән һүҙҙәргә “Нимә эшләй?”, “Нимә эшләне?” һорауҙарын ҡуйырға өйрәнеү.<br>Текстан бирелгән һорауҙар буйынса һүҙҙе табыу.<br>Мәҫәлән:<br>“Кем?”, “Ниндәй?”, “Нимә эшләй?”.<br><br>Мини-проект: дәреслектән “хәреф, һүҙ, өн, ижек, тартынҡы өн, һуҙынҡы өн” һүҙҙәренең тәржемәһен табырға, улар ниндәй өндән башланалар, әйтеп күрһәтеү. |
| **Синтаксис.** | Һөйләм – телмәр бирәмеге (таныштырыу). | 2 | Һөйләм схемаһы менән эш: уны уҡый белеү, схемала |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com
PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| Блок: «Мин һәм минең дуҫтарым» | Һүҙ һәм һөйләм (айырмаһын һәм оҡшашлығын күҙәтеү).<br><br>Темалар: Китап магазинында. Бүләк һайлау (дуҫыма, уҡытыусыға, ата-әсәләргә, яҡындарыма). | | бирелгән мәғлүмәтте үҙгәртә белеү.<br>Тыныш билдәләрен һаҡлап, схема буйынса һөйләм төҙөү.<br>Бергәләп эшләү: бирелгән һүҙҙәрҙән, улар араһында бәйләнеш урынлаштырып, һөйләм төҙөү.<br><br>Төҙөлөшө һәм мәғәнәһе боҙолған һөйләмде төҙәтеү.<br><br>Бәләкәй күләмле текст һәм уның йөкмәткеһе буйынса эш: һүрәттәр аҫтына текстан тейешле өҙөктө һайлап яҙыу, йәки уҡыу.<br><br>Һөйләмдәр теҙелеше боҙолған тексты төҙәтеп, күсереп яҙыу.<br>Бергәләп эшләү: һорауҙар ярҙамында һөйләмдәге һүҙҙәр бәйләнешен тергеҙеү. |
| **Орфография һәм пунктуация.**<br>Блок: «Минең республикам» | Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен ҡулланыу:<br>- һөйләмдә һүҙҙәрҙе айырым яҙыу;<br>- һөйләмде, исемдәрҙе, хайуан ҡушаматтарын ҙур хәрефтән башлап яҙыу;<br>- һүҙҙәрҙе ижектән ижеккә күсереү;<br>- һөйләм аҙағында тыныш билдәләре: нөктә, һорау һәм өндәү билдәһе<br>Тексты күсереп яҙыу ҡағиҙәләрен дөрөҫ ҡулланыу.<br>Тнмалар: | 2 | Наблюдение за словами, сходными по звучанию, но различными по написанию, установление причин возможной ошибки при записи этих слов.<br>Комментированное выполнение задания: выявление места в слове, где можно допустить ошибку.<br>Беседа, актуализирующая последовательность действий при списывании.<br>Орфографический тренинг правильности и аккуратности списывания.<br>Наблюдение за написанием в предложенных текстах |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | Әсәйҙәр байрамы.<br>Байрам өҫтәле артында. | | собственных имён существительных, формулирова<br>выводов, соотнесение сделанных выводов с формулировкой правила в учебнике.<br>Упражнение: запись предложений, включающих собственные имена существительные.<br>Творческое задание: придумать небольшой рассказ, включив в него определённое количество собственных имён существительных |
| **Телмәр үҫтереү:**<br>Блок: «Мине уратып алған донъя» | Телмәр – кешеләр араһында һөйләшеү сараһы.<br>Текст – телмәр берәмеге (таныштырыу).<br>Аралашыу осраҡтары: маҡсаты, кем менән, ҡайҙа, ниндәй шарттарҙа.<br>Телдән аралашыу (диалогты ролдәргә бүлеп уҡыу, видеороликтар ҡарау, видеояҙмалар тыңлау).<br>Уҡыуҙа һәм өйҙә аралашыу ҡағиҙәләре (сәләмләшеү, хушлашыу, ғәфү үтенеү, рәхмәт әйтеү, үтенес менән мөрәжәғәт итеү).<br>**Темалар:** Йәй етте. Беҙ нисек йәйҙе үткәрәбеҙ? | 4 | Төрлө аралашыу осраҡтары төшөрөлгән һүрәттәрҙе ҡарап (сәләмләшеү, хушлашыу, ғәфү үтенеү, рәхмәт әйтеү), уларҙы телдән тикшереп һәм кәрәкле һүҙҙәрҙе, фразаларҙы табып, әйтергә өйрәтеү.<br>Терәк һүҙҙәр ҡулланып, һорауҙы әҙәпле рәүештә кире ҡағыу моделен үҙләштереү.<br>Сәләмләшеү, хушлашыу, ғәфү үтенеү, рәхмәт әйтеү, үтенес менән мөрәжәғәт итеү осраҡтарын сәхнәләштереү.<br>Ғәфү үтенеү буйынса телмәр ҡалыптарын үҙләштереү.<br>Тейешле осраҡҡа тап килгән “тылсымлы һүҙҙәр”ҙе ҡуллана белергә күнектереү.<br>Ижади эш: телмәр этикет ы һүҙҙәрен ҡулланып, аралашыуҙың төрлө төрҙәрен уйлап сығарыу, һөйләү һәм уйнап күрһәтеү.<br>Төркөмдә эш: текста һүрәтләнгән ваҡиғаларҙа телмәр этикет ы ҡулланылғанмы, юҡмы - шуны билдәләргә өйрәтеү.<br>Көлкөлө, юмористик әҫәрҙәрҙә геройҙарҙың телмәр |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | этикеты ҡағиҙәләрен нисек үтәгәндәрен күҙәтеү. Диалогтарҙы ролдәргә бүлеп уҡыу. |

**2 класс – 68 с.**

| Курстың бүлеге, темаһы | Программа йөкмәткеһе | Сәғәттәр һаны | Уҡытыу формалары һәм методтары Уҡыусылар эшмәкәрлегенә характеристика |
|---|---|---|---|
| **Тел тураһында дөйөм мәғлүмәт.**<br><br>Блок: «Мин башҡорт телен өйрәнәм» | Тел кешеләрҙең төп аралашыу сараһы һәм мәҙәниәт күренеше. Донъяла һәм Рәсәйҙә телдәрҙең төрлөлөгө тураһында тәүге төшөнсәләр. Телде өйрәнеү алымдары: күҙәтеү һәм тикшереү.<br><br>Башҡортостан тирәһендә йәшәгән халыҡтарҙың телдәре менән улар йәшәгән республика һәм өлкә атамалары, баш ҡалалары исемдәре менән танышыу аша телдәр төрлөлөгөнә төшөнөү. | 3 | «Тел кешеләрҙең төп аралашыу сараһы һәм мәҙәниәт күренеше» темаһына уҡытыусының һөйләүе.<br>Өйрәнеү диалогы: “Туған тел халыҡтың тарихын һәм мәҙәниәтен өйрәнең сараһы”.<br>Бергәләп телдең бер-беребеҙ менән аралашыу һәм тирә-йүнде, мәҙәниәтте өйрәнеү сараһы булыуына һығымта яһау.<br><br>Проект эш: “Картанан Башҡортостан Республикаһының күршеләрен тап!” Уның менән ниндәй өлкәләр һәм республикалар сиктәш? Улар нисек атала? Баш ҡалалары нисек атала?<br>Төркөмдә эш: был өлкәләрҙең һәм |

PDF-XChange Viewer
Click to buy NOW!
www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | республикаларҙың атамаларын ике телдә(рус [illegible] башҡорт) яҙыу. Унда ниндәй телдәрҙә һөйләшәләр.<br>Бер-береңде аңлар өсөн нимә эшләргә кәрәк?<br>Рәсәйҙәге телдәр тураһында әңгәмә (бергәләп һығымта яһау)<br>Телде өйрәнеү өсөн кешеләрҙең һөйләшеүен күҙәтергә, ишеткәнде, уҡығанды, яҙылғанды тикшереп ҡарарға кәрәклеге тураһында һығымта. |
| **Фонетика һәм графика.**<br>Блок: «Танышыу»<br>Блок: «Минең мәктәбем» | Өндәрҙең һүҙҙең мәғәнәһен айырыу функцияһы.<br>Өн һәм хәрефте бер-береһенән айырыу.<br>Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙы, ҡаты һәм йомшаҡ тартынҡыларҙы, яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙы айырыу.<br><br>Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре, уларҙың хәрефтәре.<br>Ҡатылыҡ һәм йомшаҡлыҡ буйынса парлы һәм парһың тартынҡылар.<br><br>Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙың парҙары һәм парһыҙҙары.<br>Өндө тикшереү ( һуҙынҡы/тартынҡы, ҡаты /йомшаҡ тартынҡы, һуҙынҡы ҡалын / нәҙек.<br>Һүҙҙә һуҙынҡы өндәрҙең йә ҡалын, йә нәҙек килеүе (сингармонизм законы) | 11 | Яҙыуҙа гигиена ҡағиҙәләрен һаҡлап эшләү (нығытыу).<br>Ҡул суҡтарының һығылмалығын һәм хәрәкәтсәнлеген үҫтереү.<br><br>Хәрефтәрҙең һыҙмаһын һәм бер-береһенә ҡушыу алымдарын дөрөҫ башҡарыу. Әкренләп тиҙ яҙыуға күсеү.<br><br>Һүҙҙәрҙә тартынҡы өндәрҙе табыу һәм уларҙы дөрөҫ әйтә белеү.<br><br>Һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеү, уларҙың һанын билдәләү.<br>Өн-хәреф анализ эшләргә өйрәнеү.<br><br>Яҙылған текстағы хаталарҙы табып, төҙәтеү.<br>Уҡытыусы тарафынан бирелг<br>Нахождение допущенных в тексте ошибок.<br>Үҙ эшенә баһа бирергә өйрәнеү.<br>Сингармонизм законын аңлата һәм күҙәтә белеү. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | Яҙыуҙа *ъ* һәм *ь* билдәләрен ҡулланыу.<br><br>*Е, ё, ю, я* хәрефтәре булған һүҙҙәрҙә өн һәм хәрефтәр һаны (һүҙ башынды һәм һуҙынҡыларҙан һуң.<br><br>Һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеү (ике тартынҡы бергә килгән осраҡта *ла*).<br><br>Һүҙлектәр менән эшләгәндә алфавитты ҡулланыу.<br><br>Хәрефте аңлатмаған график саралағҙы ҡулланыу (һүҙҙәр араһында буш урын ҡалдырыу, юлдан юлға күсереү билдәһе, ҡыҙыл юл (абзац), өйрәнелгән тыныш билдәһе).<br>“Хәйерле иртә!”, “Эштәрегеҙ нисек?”, “Ғәфү итегеҙ, зинһар өсөн!”, “Йәй ниндәй илгә ял итергә бараһығыҙ?”, “Яңы уҡыу йылы менән!”, “ Кем бөгөн дежур?” – этик репликалағҙы ҡулланыу.<br>**Темалар:**<br>Беҙҙең класс. Беҙҙең мәктәп – иң яҡшыһы. Аҙна көндәре. Мин яратҡан дәрестәр. Ашханаға барабыҙ. Ашау ҡағиҙәләре. Тиҙҙән каникул. | | Яҙыуҙа *ъ* һәм *ь* айырыу билдәләрен ҡуллана белеү.<br>. *Е, ё, ю, я* хәрефтәре булған һүҙҙәрҙә өн һәм хәрефтәр һаны.<br><br>“Башҡорт теленең өндәре” схемаһы менән эшләргә өйрәнеү, схемаға таянып, өндәргә характеристика биреү.<br><br>Уйын: “Өндө характеристикаһы буйынса таны!”.<br><br>Өндө характеристикаһы буйынса табыу һәм аңлатыу.<br>Өйрәтеүсе диалог: “[й’] үтәгән функциялар.<br>Таблицаны һүҙҙәрҙә уның ҡулланыуына ҡарап тултырыу.<br><br>*Е, ё, ю, я* хәрефтәре өн-хәреф анализында.<br>Төркөмдә эш: бирелгән һүҙҙәрҙе аңлатма һүҙлектән эҙләү.<br><br>Алфавит буйынса һүҙҙәрҙе төркөмләгәндә, эш барышын аңлатып барыу (ни өсөн теге, йәки был һүҙ бында килә? һ.б.) |

| | | | |
|---|---|---|---|
| **Орфоэпия**[1] | Хәҙерге башҡорт әҙәби теле нормаларына тап килтереп, өндәрҙе, уларҙың бергә ҡушылып өйтелен үҙләштереү. (дәреслектәге һүҙҙәр кимәлендә). | – | Дәреслектә бирелгән һүҙҙәрҙе уҡығанда баҫымды дөрөҫ ҡуйырға күнегеү.<br>Уйын: "Рифма уйлап тап!" (орфоэпик һүҙлектән бирелгән һүҙҙәргә). Ошо һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөү.<br>Башҡорт телендә ялғауҙар ҡушыу менән баҫымдың урыны үҙгәреүен күҙәтеү. |
| **Лексика.**<br>Блок: «Мин һәм минең ғаиләм» | Һүҙҙең әйтелеше уның мәғәнәһенә бәйле.<br>Һүҙҙең лексик мәғәнәһе (дөйөм төшөнсә).<br>Мәғәнәһен тикшереү кәрәклеге булған һүҙҙәрҙе айырыу.<br>Һүҙҙең мәғәнәһен текст буйынса, йәки аңлатма һүҙлек ярҙамында асыҡлау.<br><br>Бер һәм күп мәғәнәле һүҙҙәр (ябай осраҡтар, уларҙы күҙәтеү).<br>Башҡорт теленең аңлатма һүҙлеге. Синоним и антоним<br>(таныштырыу).<br>**Темалар:**<br>Беҙ – татыу ғаилә. Мин – ярҙамсы. Аҙыҡ-түлек. Сәй эсергә саҡырабыҙ. Кем иртәнге аш ашарға ярата? Бергәләп көндөҙгө аш эҙерләйбеҙ. Ҡунаҡтар көтәбеҙ. | 6 | Һөйләшеп, аралашыу үҙенсәлектәре: маҡсаты, бурыстары, һөйләшеүселәр составы, урыны, ваҡыты, ҡулланыу саралары.<br><br>Телдән монолог һәм диалог ҡорғанда бөтә сараларҙы ла ҡулланыу  кәрәкме, юҡмы?<br><br>Мәктәптә, дәрестә  телдән аралашҡанда  төрлө телмәр сараларын һәм шулай уҡ башҡа сараларҙы (ым-ишара, һ.б.) ҡуллана белеүҙе баһалау.<br><br>Мәғәнәһе таныш булмаған һүҙҙәрҙе табып,  уны текст буйынса, йә аңлатма һүҙлек аша асыҡлау.<br><br><br>Бер һәм күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе айырыу.<br>Телмәрҙә синоним һәм   антонимды ҡулланыуҙы |

[1] Изучается интегрированно во всех разделах.

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | күҙәтеү.<br>Үҙ-аллы йомаҡтар уйлап сығарыу.<br>Уйын: “Мәғәнәһе ҡапма-ҡаршы булған һүҙҙе әйт!”.<br>Парлап эшләү: бирелгән һүҙҙәргә антонимдар һайлау; текстан эҙләү.<br><br>Мини-проект: 1 төркөм – йәшелсәләр атамаһынан һайлап, борщ бешереүгә рецепт төҙөй; 2 төркөм – ниндәй продукттарҙан бишбармаҡ бешерәләр (рецепт яҙыу). |
| **Һүҙ составы** (морфемика).<br>Блок: «Мин һәм минең дуҫтарым» | Тамыр – һүҙҙең ткп өлөшө. Тамырҙаш һүҙҙәр, уларҙың билдәләре.<br>Тамырҙаш һүҙҙәрҙе синонимдарҙан һәм омонимдарҙан айырыу. Һүҙҙең тамырын билдәләү (ябай осраҡтар).<br>Ялғау – һүҙҙең үҙгәреүсән өлөшө. Ялғау ярҙамында һүҙҙең формаһын үҙгәртеү.<br>Темалар: Минең дуҫым. Ни өсөн мин уны яратам.<br>Йорт хайуандары,йорт ҡоштары. Циркта. Дуҫыма хат. Атайҙар байрамы.Дуҫтарға бүләктәр әҙерләйбеҙ. Ҡотлау открыткаһы. Байрам концерты. | 10 | Уҡытыусының һүҙҙең мәғәнәһен аңлатып, б ер үк мәғәнәгә эйә булған тамырҙарн табрға ярҙам итеүе.<br><br>“Тамыр”, “Тамырҙаш һүҙҙәр” төшөнсәләрен дәреслектә бирелгән ҡағиҙә һә миҫалдар аша өйрәнеү.<br><br>Бергәләп һүҙҙең тамырын табыу өсөн алгоритм төҙөү һәм практик рәүештә һүҙҙең тамырҙарын билдәләргә өйрәнеү.<br>Парлап эшләү: тамырҙаш һүҙҙәрҙе табып, айырыу.<br>Төркөмдә эш: ребустар, кроссвордтар сисеү.<br><br>Үҙ-аллы йомаҡтар, башваткыстар төҙөү, хат һәм ҡотлау открыткаһы яҙыу.<br>Уйын: “Кем күберәк?” – ялғауҙар ярҙамында яңы |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | һүҙҙәр төҙөү. |
| **Морфология**<br>Блок: «Минең республикам»<br><br>Блок «Мине уратып алған донъя» | Бөтәһе 24 сәғәт, шул иҫәптән:<br><br>Исем (танышыу)аңлатҡан дөйөм мәғәнәһе, “кем?”, “нимә?” һорауҙарына яуап бирә, телмәрҙә ҡулланышы.<br><br>Башҡорт телендә “кем?” һорауы тик кешеләргә ҡарата ҡулланыла.<br>Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Исемдәрҙең һаны. | 10 | Үҙ-аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәр. Һорауҙары буйынса исемде таба белеү.<br>Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе уртаҡлыҡ исемдәрҙән айырыу.<br>“Кем?”, “нимә?” һорауҙарына яуап биргән исемдәрҙе айырыу.<br><br>Исемдәрҙең һан менән үҙгәреүе. |
| | Ҡылым (танышыу): дөйөм мәғәнәһе,  “нимә эшләй?, «нимә эшләйҙәр?», «нимә эшләне?», «нимә эшләнеләр?» һорауҙарына яуап бирә,  .<br>Ҡылымдың юҡлыҡ киҫәксәләре, заты һәм һаны (танышыу). | 8 | Ҡылымды һорауҙары буйынса таба белеү. Уларҙың телмәрҙә ҡулланышы.<br>“Нимә эшләй?, «нимә эшләйҙәр?», «нимә эшләне?», «нимә эшләнеләр?» һорауҙары буйынса ҡылымды табырға өйрәнеү.<br>Ҡылымдың затта һәм һанда үҙгәреүе. |
| | Сифат (танышыу): дөйөм мәғәнәһе, “ниндәй?, “ниндәйҙәр”” һорауына яуап бирә. Телмәрҙә ҡулланышы. | 4 | Сифатты һорауҙары буйынса таба белеү. Уларҙың телмәрҙә ҡулланышы.<br>“Ниндәй?, «ниндәйҙәр?»,һорауҙары буйынса ҡылымды табырға өйрәнеү. |
| | Һан (танышыу). Ябай һәм ҡушма һандар. | 2 | Ябай һәм ҡушма һандарҙы айырыу. |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | Темалар:<br>Мин Башҡортостанда йәшәйем. Өфө – Башҡортостандың баш ҡалаһы. Мин ҡалала йәшәйем. Мин ауылда йәшәйем. Экскурсияла. Салауат Юлаев һәйкәле. Һылыуҡай Ағиҙел йылғаһы. Бал ҡортона һәйкәл. Йырлаусы “Ете ҡыҙ” фонтаны. Еңеү паркы<br>Минең өй (минең квартира). Ҡала буйлап саф һауала йөрөү. Тышта һауа торошо. Йыл миҙгелдәре. Башҡортостанда алтын көҙ. “Сөмбөлә” байрамы. Ҡыш етте. Сана шыуабыҙ. Ҡоштар өсөн тағараҡ. Яҙын түтәлдәрҙә. “Наурыз” байрамы. | | Уйын: һандар менән бәйле булған мәҡәлдәрҙе, тиҙәйткестәрҙе, һанашмаҡтарҙы иҫкә төшөрөү.<br>Группалап эшләү: ниндәй әкиәттәрҙә һандар осрай?<br>Парлап эшләү: һандарҙы ике бағанаға бүлеп яҙыу: беренсеһенә –төп һандарҙы, икенсеһенә – рәт һандарын: *биш, егерме, ун дүртенсе, ете, унынсы, ун бишенсе, утыҙ, һикәненсе, ун ете, ун икенсе һ.б.*<br><br>Һайланма диктант: уҡытыусы тексты уҡый, уҡыусылар тик һандарҙы ғына яҙалар.<br>Уйын: “Кем өлгөрҙө?” - уҡытыусы һандар булған һөйләмдәрҙе уҡый, ә уҡыусылар дәфтәргә ишетелгән һандарҙы цифрҙар менән яҙалар. |
| **Синтаксис.**<br>Блок: «Мине уратып алған донъя» | Һөйләмдә һүҙҙәрҙең килеү тәртибе. Һүҙҙәрҙең һөйләмдә бер-береһе менән бәйләнеше (ҡабатлау).<br>Һөйләм – телмәр берәмеге. Һөйләм һәм һүҙ, уларҙың айырмаһы. Һөйләгәндә һөйләм эсендәге бер һүҙҙе айырым, көслө тауыш менән әйтеүҙе күҙәтеү (логик баҫым).<br>Әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләмдәр (хәбәр һөйләм, һорау һөйләм, өндәү һөйләм).<br>Тауыш интонацияһы менән әйтелгән хис-тойғоларҙы биреүсе һөйләмдәр (өндәү һәм | 4 | Һөйләм булмаған һүҙ төркөмдәрен һөйләмдән айыра белеү.<br>Тексла төҙөлөшө боҙолған һөйләмдең аҙағын табып, тейешле тыныш билдәһе ҡуйырға өцрәнеү.<br>Һөйләм аҙағында тыныш билдәләрҙе дөрөҫ ҡуйырға өйрәнеү.<br>Күнегеү: һөйләм аҙағындағы тыныш билдәләргә ярашлы һөйләмдәрҙә тауыш интонацияһын ҡуллана белеүҙе өйрәнеү.<br>Һөйләмдең баш киҫәктәрен табыу.<br>Парлап эшләү: һөйләмде күсереп яҙып, һөйләмдә нимә тураһында һүҙ бара, шуны аңлатҡан һүҙҙе табып, аҫтына һыҙыу (бер-береһенең эшен аҙаҡ |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | өндәү булмаған һөйләмдәр).<br>**Темалар:**<br>Һаумы, йәй! Беҙ яратҡан еләктәр. Урманда ағастар. Ҡайҙа нимә үҫә? Болонда үҫемлектәр.Ҡыр хайуандары. Ҡыр ҡоштары. | | тикшереү).<br>Ижади эш: һөйләмгә мәғәнәһе буйынса тура килгән яңы һүҙҙәрҙе өҫтәү.<br>Текста һөйләмдең сиктәрен табып, тейешле тыныш билдәләре ҡуйыу.<br>Һөйләмдә һүҙҙәрҙең формаһын тейешле итеп үҙгәртеп, баш киҫәктәрҙе яраштырыу.<br>Һөйләмдең нигеҙен һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр өҫтәп, киңәйтеү.<br><br>Ижади эш: бирелгән һүҙҙәрҙән һөйләмдәр төҙөү.<br>Группала эш: бирелгән һүрәт буйынса һөйләмдәр төҙөү.<br>Һорауҙарға яуап биреү аша һөйләмде тулыландырыу. |
| **Орфография һәм пунктуация**[2] | Яңғыҙлыҡ исемдәрҙә, йәнлек ҡушаматтарында, һөйләм башында һүҙҙе ҙур хәрефтән яҙыу. Һөйләм аҙағында тыныш билдәләре.<br>Орфограмма тураһында төшөнсә. Дәреслектән орфографик һүҙлекте ҡулланыу.<br>Яҙғанда үҙ-үҙеңде тикшереп, хаталарҙы төҙәтергә күнектереү:<br>- яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙың сиратлашыуы (китап – китабым); | – | Орфографик һиҙгерлекте формалаштырып, хаталар булыуын алдан иҫкәртә белергә күнектереү.<br><br>Дәреслектәге орфографик һүҙлекте ҡулланырға өйрәтеү.<br><br>Үҙ эшендә текстарҙы, һөйләмдәрҙе тикшерә, баһа бирергә өйрәтеү. |

[2] Изучается интегрировано во всех разделах.

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | -һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсергәндә һыҙыҡса ҡуйыу;<br>-ҡылымдарҙа *–ма, - мә* киҫәксәләрен бергә яҙыу;<br>-һөйләм аҙағында тыныш билдәләре: нөктә, һорау һәм өндәү билдәһе;<br>- яңғыҙлыҡ исемдәрҙә, йәнлек ҡушаматтарында, һөйләм башында һүҙҙе ҙур хәрефтән яҙыу. | | |
| **Телмәр үҫтереү.** «Мине уратып алған донъя» | Һөйләшеү өсөн кәрәкле телмәр саралары һайлап ҡулланырға өйрәтеү (бирелгән һорауға яуап биргәндә, үҙ фекерен белдергәндә).<br>Һөйләшергә өйрәтеү (нисек башларға, дауам итергә, иғтибарҙы йәлеп итергә тамаларға).<br>Практик рәүештә диалог ҡорорға өйрәтеү. Аралашыу этикеты (сәләмләү, ғәфү үтенеү, хушлашыу, рәхмәт әйтеү, һорау менән мөрәжәғәт итеү).<br>Һүрәт буйынса телдән хикәйә төҙөү. Һорауҙар ярҙамында хикәйә төҙөргә өйрәтеү.<br>Текст. Текстың билдәләре: һөйләмдәрҙең мәғәнә буйынса бер-береһенә | 8 | Бирелгән һорауға яуап ҡайтарыу һә үҙ фекерен әйтер өсөн тейешле телмәр сараларын ҡулланырға өйрәтеү. Һөйләшеүҙе башлау, дауам итеү, тамамлау, үҙенә иғтибар йәлеп иттерә белеү күнекмәләренә өйрәнеү.<br>Практик рәүештә диалог ҡорорға өйрәтеү. Аралашыу этикеты (сәләмләү, ғәфү үтенеү, хушлашыу, рәхмәт әйтеү, һорау менән мөрәжәғәт итеү).<br>Һүрәт буйынса телдән хикәйә төҙөү. Һорауҙар ярҙамында хикәйә төҙөргә өйрәтеү.<br><br>Өйрәтеү диалогы: һөйләшеүҙең маҡсатын, бурыстарын, ҡатнашыусыларҙы, урынын, ваҡытын, аралашыу ысулдарын тикшереп, ҡулланырға өйрәтеү. |



PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | бәйле килеүе һәм тамаланған уй-фекерҙе аңлатыуы. Тексттың темаһы. Төп мәғәнәһе. Тексттың башы (исеме). Бирелгән текстҡа исем уйлау. Текст өлөштәренең (абзац) бер-бер артлы мәғәнәүи яҡтан теҙелеп килеүе.<br>Һүҙҙәрҙең һөйләмдә килеү тәртибе һәм абзацтың урыны боҙолоуҙы төҙәтеү. Текст төрҙәре: һүрәтләү, хикәйәләү, фекерләү һәм уларҙың үҙенсәлектәре.<br>Дәреслектәге аңлатма һәм орфографик һүҙлектәрҙе ҡулланыу.<br>Дөрөҫ интонация һаҡлап тексты тасуири уҡыу. Ҡотлау һәм ҡотлау открыткаһы яҙыу.<br>20–35 һүҙҙән торған хикәйәләү тексын һорауҙар аша тулыһынса һөйләп биреү.<br>**Темалар:**<br>Ат – башҡорттоң тоғро дуҫы. Ҡурай моңдары.Ҡымыҙ – шифалы эсемлек. Балыҡта. Беҙҙең олатайҙарҙың һәм өләсәйҙәрҙең яратып уйнаған уйындары: “Тирмә”, “Аҡ тирәк, күк тирәк”.<br>Башҡорт халыҡ әкиәте “Эт үҙенә нисек хужа тапты?”. | | һөйләшеү телмәрен үҫтереү маҡсатында тексты роллдәргә бүлеп уйнау, сәхнәләштереү, халыҡ уйындарын уйнау.<br><br>Ижади эш: төрлө хәл-ваҡиғаға бәйле үҙ диалогтарын ҡороу.<br><br>һөйләшеүҙә этик нормаларҙы һаҡлау, уларҙы ролле уйындар уйнатып, нығытыу.<br>Көндәлек тормошта үҙендең һөйләгәнендә анализлап, этик ҡағиҙәләрҙең үтәлешенә баһа бирергә күнектереү.<br><br>Һүрәттәр, һорауҙар буйынса йәки шәхси күҙәтеүҙәр буйынса телдән хикәйә төҙөргә өйрәнеү.<br><br>Бирелгән текстарға исем уйлау. Төҙөлөшө һәм өлөштәренең урыны алмашынған текстарҙы дөрөҫләү.<br>Текста таныш булмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәһен билдәләргә өйрәнеү.<br>Аңлатма һәм орфографик һүҙлектәрҙе ҡулланырға күнектереү.<br>Аралашыу барышында үҙ фекерен әйтеп, уны дәлилләргә өйрәтеү.<br><br>Тексты башҡа яҙмаларҙан айыра белеү, тексттың |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | темаһын һәм төп мәғәнәһен билдәләй белеү.<br><br>Тексты аңлау: унда бирелгән мәғлүмәт буйынса ябай ғына һығымта яһарға өйрәнеү.<br>Тексты тсауири уҡый белеү.<br><br>20–35 һүҙҙән торған хикәйәләү тексын һорауҙар ярҙамында һөйләй белеү<br><br>Мини-проект: “Минең бүләк” – ҡотлау открыткаһы эшләү.<br>Шәхси эшләү: текстан “ҡ” хәрефенә бөткән һүҙҙәрҙе күсереп яҙыу. Был һүҙҙәргә антоним уйлау. |
| **Резерв – 2 с.** | | | |

**3 класс 68 с.**

| **Курстың бүлеге, темаһы** | **Программа йөкмәткеһе** | **Сәғәттәр һаны** | **Уҡытыу формалары һәм методтары Уҡыусылар эшмәкәрлегенә характеристика** |
|---|---|---|---|
| **Тел тураһында дөйөм мәғлүмәт.** | Башҡорт теле – башҡорт халҡының теле. Телде өйрәнеү алымдары: күҙәтеү, | 2 | Күмәкләп Башҡортостан Республикаһының картаһын өйрәнеү: республиканың сиктәрен, ниндәй |

| | | | |
|---|---|---|---|
| Блок: «Мин башҡорт телен өйрәнәм» | сағыштырыу, анализлау, лингвистик тикшереү ойоштороу.<br>Ауыҙ-тел ижадында халыҡтарҙың йәшәйеше, уларҙың көнкүреше, шөғөлдәре, нисек кейенгәндәр, нимә менән туҡланғандар – шулар сағыла. Бындай мәғлүмәтте фольклорға таянып иҫбатлап буламы? Рус халыҡ әкиәте "Ҡаҙҙар-аҡкоштар"ҙың һәм башҡорт халыҡ әкиәте "Ҡурай"ҙың һүрәттәрен сағыштырып, элек кешеләр ниндәй кейем кейгәндәр, был кейемдәрҙең атамаһын русса һәм башҡортса әйтеп ҡарайыҡ (уҡытыусы ярҙамында). | | өлкәләр һәм республикалар менән сиктәш булыуы шуларҙы билдәләү.<br><br>Әңгәмә: беҙҙең республикала ниндәй халыҡтар йәшәй? Һеҙ улар тураһында нимәләр беләһегеҙ? Ниндәй байрамдар үткәреләә, ниндәй милли аҙыҡтар әҙерләнә, ниндәй йырҙар, бейеүҙәр күргәнегеҙ бар? Кешеләр төрлө телдәрҙә һөйләшәләр, ләкин рус теле ярҙамында бер-береһен аңлай алалар.<br>Республика ерҙәрендә элек-электән башҡорт халҡы йәшәгән. Ул башҡорт телендә һөйләшкән. Шуға ла беҙҙең республика Башҡортостан исемен йөрөтә, йәғни Башҡорт иле тип атала.<br>Бөгөнгө көндә башҡорт теле рус теле менән бер рәттән дәүләт теле тип иғлан ителгән.<br>Республиканың ниндәй символдары бар?<br>Әйҙәгеҙ, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың гимндарын тыңлайыҡ (һүҙҙәре интерактив таҡтала, йә алдан әҙерләнгән ҡағыҙҙарҙа бирелә).<br>Нимә тураһында гимндарҙа әйтелә? Һығымта: тыныслыҡ, дуҫлыҡ, иреклек, традицияларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, телде һаҡлау тураһында.<br><br>Мини-эксперимент: әкиәттәрҙең йөкмәткеһе буйынса төшөрөлгән һүрәттәргә ҡарап, кейем атамаларын ике телдә әйтеү.<br><br>Уҡытыусы аңлатмаһы: Беҙ йәшәгән ер борон- |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | борондан башҡорт халҡы йәшәгән ер. Улар үҙ телендә әкиәттәр, йомаҡтар, мәҡәлдәр уйлап сығарғандар, йырҙар йырлағандар, законлар сығарғандар. Башҡорт теле онотолмаһын өсөн, был телдә халыҡ рус теле менән бер рәттән республикала дәүләт теле тип закон ҡабул иткәндәр. Башҡорттар башҡортса уҡый, белем ала, һөйләшә, аралаша, ғаиләлә башҡорт йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен тергеҙеп, байрамдар үткәреп, йәшәй ала.<br>Бөгөн башҡортса китаптар яҙыла, гәзит-журналдар баҫыла, театрҙар эшләй. Мәктәптәрҙә башҡорт телендә уҡырға теләге булған һәр кем, уны өйрәнә ала. Беҙ ҙә башҡорт телен өйрәнә башланыҡ.<br>Парлап эшләү: һеҙ нисек уйлайһығыҙ, Башҡортостан Республикаһында кем дәүләт башҡорт телен белергә тейеш?<br>Төркөмләп эшләү: карточкала күрһәтелгән һөнәр эйәләре башҡортса белергә тейешме? Әгәр ул телде мотлаҡ белергә тейеш булһа, был һүҙҙең аҫт ына һыҙығыҙ. Аңлатығыҙ, ни өсөн белергә тейеш?<br>Һөнәрҙәр исемлеге: *табиб, мәктәп директоры, завод директоры, һатыусы,кондуктор, баҡсасы һ.б.*<br><br>Диалог: телде өйрәнеү өсөн ниндәй сығанаҡтар ҡулланырға була? |
| Фонетика и графика. | Өндө хәрефтән айырыу. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙе бер-береһенән айырыу. | 6 | Парлап эшләү: бирелгән өндәр төркөмөн ниндәй үҙенсәлектәре буйынса төркөмләп була? |

PDF-XChange Viewer
Click to buy NOW!
www.docu-track.com
PDF-XChange Viewer
Click to buy NOW!
www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| Блок: «Танышыу» | Нәҙек һәм ҡалын һуҙынҡыларҙы айырыу. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар, уларҙың айырмаһы. Йомшаҡ һәм ҡаты тартынҡылар, уларҙың айырмаһы (үтелгәндәрҙе ҡабатлау). Айырыу билдәләре **ь** һәм **ъ**. Был билдәләр булған һүҙҙәрҙә өн һәм хәрефтәр һаны.<br>У һәм ү хәрефтәре һуҙыңҡы өндәр араһында һәм һүҙ аҙағында.<br>Алфавитты һүҙлектәр, белешмә сығанаҡтар, каталогтар менән эш иткәндә ҡулланыу.<br>**Темалар:**<br>Һиңә нисә йәш? Һин ҡайҙа йәшәйһең?<br>"Һинең ғаиләң ниндәй? "Буш ваҡытыңда нимә менән шөғөлләнәһең?" | | Айырыу билдәләре (ь һәм ъ) булған һүҙҙәрҙә өндәр һәм хәрефтәр араһындағы айырманы аңлата белергә күнектереү.<br><br>Проект эше: "Башҡорт һәм рус телендә исемдәрҙең оҡшашлығы һәм айырмаһы.<br><br>Проект эш: ғаиләңдең шәжәрәһен төҙөү.<br><br>Бирелгән текстан һуҙыңҡылар араһында һәм һүҙ аҙағында ***у, ү***<br>өндәре тартыңҡыны аңлатҡан һүҙҙәрҙе күсереп яҙыу.<br><br>Үҙ-аллы эш: мәғлүмәтте системаға һалыу өсөн бирелгән һүҙҙәрҙе алфавит буйынса теҙеп яҙыу.<br><br>Практик эш: кластағы китапхана мөйөшөндә китаптарҙы авторҙар фамилияһыбуйынса алфавит тәртибендә теҙеп сығыу. |
| Орфоэпия | Әйтелеш нормалары буйынса башҡортса һөйләшкәндә һүҙҙәрҙә өндәрҙе, өндәр теҙмәһен дөрөҫ әйтеү (өйрәнелгән һүҙҙәрҙә). | - | Дәреслектә бирелгән һүҙҙәрҙә баҫымды күҙәтеү һәм аңлатыу.<br><br>Дидактик күнегеү: орфоэпик һүҙлектән бирелгән һүҙ менән һөйләм төҙөү.<br><br>Уйын-ярыш: "Баҫымды ҡайҙа ҡуйырға?". |

| | | | |
|---|---|---|---|
| **Лексика.** Блок: «Минең мәктәбем» | Һүҙҙең лексик мәғәнәһе (ҡабатлау). Һүҙҙәрҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе (таныштырыу). Синонимдар һәм антонимдар (таныштырыу), уларҙы төрлө һүҙ төркөмдәренән килгән һүҙҙәргә табыу. Иҫкергән һүҙҙәр (таныштырыу).<br><br>**Темалар:**<br>Белем көнө менән! Мин бөгөн дежур. Башҡорт теле дресендә. Китап – яҡшы дуҫ. Айһылыу Йәғәфәрова – балалар яҙыусыһы. Республиканың халыҡ яҙыусыһы –Ноғман Мусин. | 8 | Һөйләү телмәрен дөрөҫ ҡабул итеү. Текста бирелгән төп һәм өҫтәлмә мәғлүмәтте тыңлап аңлау, текстың төп мәғәнәһен билдәләй белеү, текстың йөкмәткеһен һорауҙар аша һөйләп биреү.<br><br>Һүҙҙе һөйләмдән айырыу. “Һүҙҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе”, “синоним, антоним, омоним” төшөнсәләрен үҙләштереү.<br><br>Һүҙлектәр менән танышыу.<br>Һөйләм менән эш: һүҙҙәрҙе бер-береһенән айырыу, уларҙың килеү тәртибен үҙгәртеү.<br><br>Ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ ҡулланып, тексты, һөйләмдәрҙе күсереп һәм, уҡытыусының әйтеп тороуы буйынса яҙыу.<br><br>Практик эш: уҡыусы үҙенең шәхси аңлатма һүҙлеген төҙөй ала.<br><br>Көлкөлө һүрәттәрҙә һүҙҙәрҙе күсмә мәғәнәлә ҡулланыу осраҡтарын күҙәтеү.<br>Күсмә һәм тура мәғәнәле һүҙҙәрҙе текста ҡулланыуҙы тикшереүгә бағышланған күнегеүҙәрҙе һөйләп, аңлатып башҡарырға күнектереү.<br><br>Парлап эшләү: текста күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе табыу. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | Төркөмдә эш: тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙең аңлатҡан мәғәнәһен сағыштырыу, улар менән һөйләмдәр төҙөү.<br><br>Парлап эшләү: иҫкергән һүҙҙәрҙе бөгөн ҡулланылған заманса синонимдар менән сағыштырыу.<br><br>Парлап эшләү: текстан иҫкергән һүҙҙәрҙе табып, уларҙың мәғәнәһен асыҡлау.<br><br>Проект эш: "Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу" дәреслегендә бирелгән әкиәттәр таянып, иҫкергән һүҙҙәр һүҙлеген төҙөү. |
| **Һүҙ составы (морфемика)**<br>Блок: «Мин һәм минең ғаиләм» | Һүҙҙең тамыры. Тамырҙаш һүҙҙәр. Уларҙың билдәләре. Бер тамырҙан торған һүҙҙәрҙе синонимдарҙан, омонимдарҙан айырыу (терминды әйтмәйенсә). Һүҙҙең тамырын билдәләү(ҡабатлау). Ялғау тураһында ҡабатлау.<br><br>**Темалар:**<br>Олатайым өйрәтеүҙәре. Өләсәйем кәңәштәре. Минең шәжәрәм. Ғаилә байрамы. Йорт эштәрендә ярҙамлашырға ятатам. Һиңә ниндәй китап оҡшай? Минең яратҡан | 6 | "Тамырҙаш һүҙҙәр" төшөнсәһен үҙләштереү. Тамырҙаш һүҙҙәрҙе бер үк Һүҙҙең төрлө формаларынан айыра белергә өйрәнеү.<br><br>Һүҙҙең тамырын уның ялғауынан айыра белеү.<br><br>Ялғауҙар ярҙамында тамырҙаш һүҙҙәр төҙөү. Һүҙҙе составы буйынса тикшереү. |



PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com
PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | шөғөләм. Мин һәм спорт. Йәкшәмбе көнөндә ял. | | |
| **Морфология. Һүҙ төркөмдәре.**<br><br>Блок: «Мин һәм минең дуҫтарым» | Бөтәһе 26 сәғәт, шул иҫәптән:<br><br>*Исем*: дөйөм мәғәнәһе, ниндәй һорауҙарға яуап бирә. Телмәрҙә ҡулланышы. Күплектәге һәм берлектәге исемдәр. Исемдәрҙең килеш һәм һан менән үҙгәреүе. Исемдәргә морфологик (грамматик) анализ. | 6 | Исемдәрҙең беолек һәм күплек формаларын билдәләү.<br>Исемдәрҙең килешен һәм затын билдәләү.<br><br>Исемдәрҙе килештә һәм затта үҙгәртеү.<br>Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙе айырыу.<br>Улар менән һүҙбәйләнештәр төҙөү.<br>Исемдәргә морфологик (грамматик) анализ эшләргә өйрәнеү. |
| | *Сифат*: дөйөм мәғәнәһе, ниндәй һорауҙарға яуап бирә. Телмәрҙә ҡулланышы. Төп һәм шартлы сифаттар (терминды аңлатмайынса). Сифат дәрәжәләре (төп, сағыштырыу, артыҡлыҡ, аҙһытыу). Сифатҡа грамматик анализ. | 4 | Сифаттарҙың яһалышын һәм телмәрҙә ҡулланышын күҙәтеү, практик күнегеүҙәр башҡарыу.<br>Төп һәм шартлы сифаттарҙы бер-береһенән айырыу.<br>Сағыштырыу һәм артыҡлыҡ дәрәжәләрен сағыштырыу, текстан миҫалдар эҙләп яҙыу.<br>Таблицаны тултырыу: беренсе бағанаға –төп сифат, икенсе бағанаға – уның сағыштырыу дәрәжәһе, өсөнсө бағанаға – артыҡлыҡ, дүртенсеһенә – аҙһытыу дәрәжәһен яҙып сығыу.<br><br>Сифаттарҙы исемдәр менән бәйләп, һүҙбәйләнештәр яҙыу.<br>Сифатҡа грамматик анализ эшләргә өйрәнеү. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | |
| | *Алмаш* (дөйөм төшөнсә). Зат алмаштары, уларҙың һанда һәм килештә үҙгәреүе:: *берлектә –мин,һин, ул; күплектә – беҙ, һеҙ, улар.* Алмашҡа грамматик анализ. | 4 | Алмаштарҙы исемдәрҙән айырыу.<br>Бирелгән алмаштарҙы һанда һәм килештә үҙгәртеү.<br>Исемдәрҙе алмаш менән алмаштырыу.<br>Алмашҡа грамматик анализ. |
| | *Ҡылым*: дөйөм мәғәнәһе, нindәй һорауҙарға яуап бирә. Телмәрҙә ҡулланышы. Ҡылымдарҙың заман һәм һан менән үҙгәреүе. Ҡылымдарҙа юҡлыҡты беледереүсе *–ма, - мә* киҫәксәләре. Хәҙерге һәм үткән заман ҡылымдарына берлектә һәм күплектә һорауҙар ҡуйыу.Ҡылымдарға грамматик анализ. | 8 | Ҡылымдың мәғәнәһен һәм телмәрҙә уйнаған урынын аңлау.<br>Ҡылымдың заманда үҙгәреүе һәм уларға ҡуйылған һорауҙар.<br>Ҡылымдың затта үҙгәреүе, уларҙың һорауҙарын билдәләү.<br>*-Ма, -мә* киҫәксәләре ярҙамында ҡылымдың юҡлыҡты аңлатҡан формалары.<br>Юҡлыҡ формаһындағы ҡылымдарҙы раҫлау ҡылымдарына һорауҙар ярҙамында әйләндереү.<br><br>Хәҙерге заман юҡлыҡ ҡылымдарын затта үҙгәртеү.<br><br>Тамыр ҡылымды таныу һәм уарға һорау ҡуя белеү.<br><br>Ҡылымдың грамматик формаларын (һан, заман) күҙәтеү, һығымталар яһау.<br><br>Практик эш: текстан ҡылымдарҙы табып, уларҙың өйрәнелгән грамматик формаларын һанап биреү. |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | Ижади эш: Ҡылымдың заманын үҙгәртеп, текстағы вакиғалар барышын үҙгәртеү.<br>Ҡылымдарға грамматик анализ. |
| | *Һан.* Ябай һәм ҡушма һандар. Телмәрҙә төп һәм рәт һандарын айырыу һәм ҡулланыу. Һандарҙың килеш менән үҙгәреүе. Килеш һорауҙары.<br><br>**Темалар:**<br>Минең тыуған көнөм. Ҡунаҡта үҙенде нисек тоторға? Дуҫтар менән күңелле. Халыҡ уйыны «Прятки – һәпәләк». Өләсәйемә хат яҙам. Яратҡан уйынсыҡтарым. Минең дуҫым компьютер. Аҡбай – ысын дуҫ. Минең бесәйем (К. Ушинский буйынса). Илде һаҡлаусылар байрамы. | 4 | Ижади эш: һандарҙы ҡысҡырып уҡып, һүҙҙәр менән яҙыу.<br>Парлап эшләү: һандарҙы ҡулланып, һорауҙарға яуап биреү ( сәғәт нисә?, күпме?, ҡасан?, ниндәй алыҫлыҡта? һ.б.)<br><br>Исем һәм һан ҡушылмаһын килештәрҙә үҙгәртергә.<br>Мини-тикшереү: текстан (китаптан, гәзиттән) һандарҙы һүҙҙәр менән күсереп яҙыу.<br><br>Һандар диктанты: уҡытыусы карточканан һандарҙы күрһәтә, уҡыусылар был һандарҙы һүҙҙәр менән дәфтәргә яҙалар.<br><br>Һандарҙың төркөмөн билдәләү (ябай һәм ҡушма). |
| **Синтаксис.**<br>Блок: «Минең республикам» | *Һөйләм.* Һорауҙар ярҙамында һөйләм эсендә һүҙҙәр бәйләнешен асыҡлау. Һөйләмдең баш киҫәктәре – эйә һәм хәбәр. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре (төрҙәргә бүлмәйенсә). Йыйнаҡ һәм таралҡау һөйләм. Әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәре. Һөйләмдә өндәш һүҙ. | 10 | Һөйләү телмәрен дөрөҫ ҡабул итеү. Текста бирелгән төп һәм өҫтәлмә мәғлүмәтте тыңлап аңлау, текстың төп мәғәнәһен билдәләй белеү, уның йөкмәткеһен һорауҙар аша һөйләп биреү.<br><br>Һөйләм менән эш: һүҙҙәрҙе бер-береһенән айырыу, уларҙың килеү тәртибен үҙгәртеү. |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | һөйләмдә ***һәм, ләкин*** теркәүестәре менән килгән тиң киҫәктәрҙе күҙәтеү.<br><br>**Темалар:**<br>Башҡортостан – мөғжизәле ер. Өфөләге Дуҫлыҡ монументы. Салауат Юлаев – башҡорт халҡының милли батыры. Өфөлә транспорт. Тирә-яҡты өйрәнеү музейына экскурсия. Фәрит Иҫәнғолов – балалар яҙыусыһы. Мәскәү – беҙҙең илдең башҡалаһы. Нисек сәйәхәт ойошторорға? | | Ҡағыҙәләрҙе дөрөҫ ҡулланып, тексты, һөйләмдәрҙе күсереп һәм, уҡытыусының әйтеп тороуы буйынса яҙыу.<br>Бирелгән өлгөләр буйынса **һөйләмдәр төҙөй белеү** (бер йәки ике составлы).<br>Тауыш ярҙамында хәбәр, һорау һәм өндәү һөйләмдәрҙең интонацияһын **бирә белеү**.<br>Һөйләмдә һүҙҙәрҙең килеү тәртибен **һиҙемләү**.<br>Эйә менән хәбәрҙе һөйләмдә **билдәләй белә**.<br>Һөйләмдәрҙең йыйнаҡ һәм таралыу килеүҙәрен **аңлата белеү**.<br>Йыйнаҡ һөйләмде эйәрсен киҫәктәр менән тулыландырыуға үҙ аллы күнегеүҙәр **үтәй белә**.<br>Һөйләмдең төҙөлөшөн ябай ғына кимәлдә **анализлай белеү**. Уның баш киҫәктәрен табып, аҫтарына **һыҙа белеү.**<br>Һөйләм киҫәктәренең бер-береһенә бәйле килеүен һорауҙар аша билдәләп, күнегеүҙәр **башҡарыу.**<br>Һөйләм нигеҙен **билдәләү**. Уларҙы **айыра белергә**, йыйнаҡ һөйләмдәрҙе тулыландырырға **өйрәнеү.**<br>Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙә тауыш интонацияһы ярҙамында **әйтә белеү**.<br>Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙә һөйләм аҙағында нөктә, һорау, өндәү билдәләрен ҡуя **белеүҙе ныҒытыу.** |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | Ябай һәм ҡушма һөйләмде бер-береһенән **айы[illegible] белеү**.<br>Ябай һөйләмгә бирелгән алгоритм ярҙамында синтаксик анализ **үткәрергә өйрәнә башлау**. |
| **Орфография һәм пунктуация** | Яҙғанда үҙ-үҙеңде тикшереп, хаталарҙы төҙәтеү. Орфографик һүҙлекте ҡулланыу. Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен ҡулланыу:<br>- айырыу ҡатылыҡ билдәһе **ъ**: (Аҡъяр, ҡулъяулыҡ);<br>- айырыу йомшаҡлыҡ билдәе **ь**: (көньяҡ, төньяҡ);<br>- ҡылымдарҙа *–ма, - мә* ҡиҫәксәләрен бергә яҙыу;<br>- һүҙ аҙағында ялғауҙар ҡушылғанда [ҡ], [к], [п] өндәре [ғ], [г], [б] өндәре менән сиратлаша: *кала**ҡ** – калағым; көрә**к** – көрәгем; кита**п** – китабым;*<br>- өндәш һүҙҙән һуң өтөр ҡуйыу. | – | **Ҡ, к, п** өндәренең ялғау ҡушылғанда яңғырау **ғ, г, б** өндәренә әйләнеүен яҙыуҙа дөрөҫ ҡулланырға **тырышыу,** орфографик һүҙлектән ҡарап, **тикшереү.**<br>Рус теле менән сағыштырып, рус теленән ингән һүҙҙәрҙә **ж, ш, щ, ч,** һәм **ц** тартынҡыларынан һуң һуҙынҡыларҙың яҙылышына иғтибар **итеү,** яҙғанда дөрөҫ **яҙырға тырышыу**.<br>Ҡалын айырыу билдәһе **ъ** ҡалын ижектән һуң, нәҙек айырыу билдәһе **ь** нәҙек ижектән һуң яҙылыуҙы белеү һәм яҙғанда дөрөҫ ҡулланыу: *Аҡъяр, көньяҡ.*<br>Һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың бер-бер артлы теҙелеп ҡушылыуын **белеү һәм** яҙыуҙа ҡулланырға **тырышыу**:<br>- ҡалын һуҙынҡылы (**а, о, у, ы**), нәҙек һуҙынҡылы һүҙҙәргә (**ә, ө, э (е), ү и**) һүҙҙәргә нәҙек ялғау **ҡушылыуын;**<br>- **у, ү** өндәре һүҙ башында в хәрефе менән **яҙылыуын**: *Вәсилә, ватты;*<br>- **э** өнө башҡорт телендә тик һүҙ башында ғына яҙыла, |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | ә башҡа урында **е яҙыла**: *эшсе, элекке.* |
| **Телмәр үҫтереү**<br>Блок: «Мине уратып алған донъя» | Аралашыу этикет нормалары: телдән һәм яҙма саҡырыу, үтенес, ғәфү үтенеү, рәхмәт әйтеү, кире ҡағыу;<br>Уҡыу барышында һәм көндәлек аралашыуҙа телмәр этикетын һаҡлау;<br>Диалогта һәм дискуссияла үҙ фекереңде дөрөҫ итеп еткерергә һәм дәлилләргә күнегеү;<br>Икенсе класта башланған текст менән эште дауам итеү: һөйләмдәрҙең мәғәнә буйынса бер-береһенә бәйле килеүе һәм тамаланған уй-фекерҙе аңлатыуы. Тексттың темаһы. Төп мәғәнәһе. Тексттың башы (исеме). Бирелгән текстка исем уйлау. Текст өлөштәренең (абзац) бер-бер артлы мәғәнәүи яҡтан теҙелеп килеүе. Һөйләмдәрҙә алмаштарҙы, синонимдарҙы, *һәм, ләкин* теркәүестәрен ҡулланыу;<br>Текста терәк һүҙҙәр. Һүҙҙең мәғәнәһен аңлатма һүҙлек аша билдәләү.<br>Текст төрҙәрен билдәләү (һүрәтләү, хикәйәләү, фекерләү). Үҙ-аллы текст төҙөү. Хат, белдереү төҙөү. Тексты тейешле мәғлүмәтте аңлау, төшөнөү өсөн, йәки танышыу өсөн уҡыу. | 8 | Бәйләнешле телмәр төрҙәрен үҫтереүгә; дөрөҫ ишетеүгә һәм әйтеүгә практик эш төрҙәрен **утәй белеү**:<br>- килеш ялғауҙарын һорауҙарға яуап иттереп, дөрөҫ **ҡуша**;<br>- терәк һүҙҙәр ярҙамында үҙ аллы бер нисә һөйләмдән торған текст **төҙә**;<br>- бер нисә предметты, күренеште сағыштырып, һығымта **яһай**;<br>- һөйләмде эйәрсән һәм тиң киҫәктәр менән **тулыландыра;**<br>- мәғәнәһе боҙолған тексты дөрөҫ итеп **үҙгәртә;**<br>- проект эшен үҙ аллы **башҡара**;<br>- төрлө сығанаҡтарҙан өҫтәлмә мәғлүмәт **табып,** уны үҙгәртеп **ҡуллана ала;**<br>- эшенә **баһа бирә**;<br>- портфолионы дөрөҫ **тултыра;**<br>- кроссвордтарҙы, йомаҡтарҙы, башватҡыстарҙы үҙ аллы **сисә**, үҙе ябай ғына ижади эште **уйлап сығара.**<br><br>Уҡыу эшмәкәрлегенең төп төрҙәрен үҙләштерә (тыңлау, һөйләү, уҡыу, яҙыу).<br>Телдән монологтың төрлө төрҙәрен ҡороға өйрәнә ( һүрәтләү, хәбәрләү, фекерләү). |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | План буйынса текстың йөкмәткеһен яңғыҙ, йәки коллектив менән бергәләп һөйләү.<br><br>**Темалар:**<br>Тыуған яғым тәбиғәте. Башҡортостан тауҙары. “Минең Уралым” – “Урал батыр” эпосынан өҙөк. Ағиҙел – тыуған яҡтың ынйыһы. Башҡортостан – күлдәр иле. Башҡорт халыҡ йыры “Түңәрәк күл”. Урман – беҙҙең байлыҡ. Ниндәй үләндәр беләһең? Йәшел аптека. Ҡоралай – беҙҙең тәбиғәттең биҙәге. Ат – кешенең дуҫы. Алтын көҙ килә. Көҙгө байлыҡ! Ҡыш етте. Ҡышҡы уйындар. Һаумы, яҙ! Еңеү байрамы. | | Актив һәм пассив һүҙ байлығы үҫешә.<br>Практик рәүештә телмәрҙең диалог һәм монолог формаларын ҡора белә башлай.<br><br>Һөйләшеүҙә этик нормаларҙы үтәргә күнегә.<br>Текст менән эш: уны исемләү, план төҙөү. Бирелгән план буйынса үҙе текст төҙөргә өйрәнә.<br><br>Ҡотлау, саҡырыу, записка, белдереү яҙыу жанрҙары менән танышыу һәм практик башҡара белеү.<br>Знакомство с жанрами поздравления, приглашения, записки и др. и практическое умение составлять их.<br><br>Бергәләп, йәки үҙ-аллы төҙөлгән план буйынса тексты һөйләп биреү.<br>Тексты ныҡлап өйрәнеү , йәки танышыу маҡсатында уҡыу. |
| **Резерв – 2 с.** | | | |

## 4 класс – 34 с.

| **Курстың бүлеге, темаһы** | **Программа йөкмәткеһе** | **Сәғәттәр һаны** | **Уҡытыу формалары һәм методтары Уҡыусылар эшмәкәрлегенә характеристика** |
|---|---|---|---|

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com
PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | ы | |
|---|---|---|---|
| **Тел тураһында дөйөм мәғлүмәт**<br>Блок: «Мин башҡорт телен өйрәнәм» | Рәсәйҙә төрлө милләт халыҡтары йәшәйлекте, улар аралашҡан телдәрҙең дә, мәҙәниәттәрҙең дә төрлө-төрлө булыуын аңлау. Туған тел халыҡтарҙың рухи һәм әхлаҡи байлығы.<br>Башҡорт теле – Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле. Телде өйрәнеү алымдары: күҙәтеү, сағыштырыу, анализлау, лингвистик тикшереү ойоштороу, мини-күҙәтеү, проект эше башҡарыу.<br>Интернет аша башҡорт телен өйрәнеү (һылтанма:<br>https: //balalar.org/ выбрать мультфильм «Колыбельная» (серия 4). Яңы һүҙҙәрҙе яҙып алыу. | 2 | Өйрәтеүсе диалог :"Ни өсөн һәр халыҡ үҙенең туған телен һаҡларға тырыша?" Рәсәйҙә йәшәгән төрлө милләт халыҡтары менән нисек итеп аралашыу мөмкин?" – беҙҙең илдә телдәрҙең күплеге һәм төрлөлөгө, аралашыу өсөн рус дәүләт телен ҡулланыу кәрәклеңә дөйөм һығымта яһала.<br><br>Мини-проект: «Башҡорт телен интернет аша өйрәнәбеҙ". Проект, мини-тикшереү үткәреү өсөн мәғлүмәттәрҙе эҙләүҙә төрлө сығанаҡтарға мөрәжәғәт итеү тураһында һөйләшеү.<br><br>Предметтың бөтә бүлектәрендә лә бирелгән өлгөгә ҡарап, күмәк һәм шәхси проект күнегеүҙәре ойоштороу мотлаҡ һанала. |
| **Фонетика и графика.**<br>Блок: Тема: «Танышыу» | Өндәрҙе һүҙҙән айырым һәм һүҙ эсендә ҡуйылған маҡсат буйынса сағыштыра, төркөмләй белеү. Һүҙгә өн-хәреф анализы эшләү.<br><br>Темалар:<br>Барығыҙға ла хәйерле көн теләйем! Татлы һүҙҙәр. Факиһа Туғыҙбаева – Башҡортостандың халыҡ шағирәһе. Иң | 2 | Мини-проект: "Өндәрҙе ниндәй сифаттары менән тикшерә алабыҙ?"<br>Башҡорт һәм рус телдәренең һуҙынҡыларын сағыштырыу һәм һығымта яһау.<br>Парлы эш: башҡорт һәм рус телдәренең тартынҡыларын сағыштырып, оҡшаш һәм айырмаларын табыу. Бер-береһенә һөйләп, кәңәшләшеп, класс алдында сығыш яһау.<br><br>Төркөмдә эш: өн-хәреф анализын күрһәтелгән алгоритмды өйрәнеү һәм бирелгән һүҙҙәрҙе тикшереү. |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | бәхетле көн! | | |
| **Орфоэпия** | Һөйләшеү һәм уҡыу барышында дөрөҫ интонация һаҡлау. Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү нормалары;<br>Һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешен орфоэпик һүҙлектән тикшерергә өйрәнеү. | – | Дәреслектә бирелгән һүҙҙәрҙә баҫымды күҙәтеү һәм аңлатыу.<br>Орфоэпик һүҙлектән алынған һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөп, уларҙы баҫымды дөрөҫ ҡуйып, уҡып ишеттереү.<br>Парлап эшләү: бирелгән һүҙҙәрҙе рифмаға һалып, дүрт юллыҡ шиғыр уйлап сығарыу.<br>Ижади эш: уҡыу йылы эсендә өйрәнелгән, әйтелеше ауыр булған һүҙҙәрҙе орфоэпик һүҙлеккә ҡарап, сылбыр буйынса ҡысҡырып уҡыу. Дөрөҫ уҡылмаһа, сәпәкәй итеү һәм яңынан дөрөҫләп уҡыу.<br><br>Ижади эш: уҡыу йылы эсендә өйрәнелгән һүҙҙәрҙең исемлеген орфоэпик журналдан алып, уларҙың бөтәһен дә индереп , коллектив хикәйә төҙөү.<br><br>Проект эш: “Ниндәй өндәр башҡорт һәм инглиз телендә бер үк төрлө әйтеләләр?” Миҫалдар килтереп, өйтеп ишеттереү. |
| ***Лексика.***<br>Блок: «Минең мәктәбем» | Телмәрҙә синонимдарҙы, антонимдарҙы, иҫкергән һүҙҙәрҙе (ябай осраҡтарҙы) өйрәнеүҙе дауам итеү һәм ҡулланырға өйрәнеү.<br>Телмәрҙә фразеологизмдарҙы ҡулланыуҙы (ябай осраҡтарҙы) күҙәтеү.<br>**Темалар:**<br>Мәктәптә минең беренсе көнөм. Бына сентябрь етте! Белем – ул хазина. Сәғәт нимә | 2 | Күнегеүҙе аңлатып башҡарыу: текста төшөп ҡалған урындарға бирелгән синонимдар араһынан һайлап, тейешлеһен яҙыу.<br><br>Төркөмдә эш: текста һүҙҙәрҙең урынлы ҡулланылғанмы, юҡмы икәнлеген билдәләү, хаталарҙы төҙәтеү ( тура килгән синонимды һайлау).<br>Һүрәттәр менән эшләү: бирелгән һүрәттәрҙе тура килгән фразеологизмдар менән исемләү.<br><br>Фразеологизм һүҙлеге менән эш итергә өйрәнеү, 2-3 фразологизмды һүҙлектән күсереп яҙыу, уларға тап килтереп, шаян, көлкөлө һүрәт төшөрөү. |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | тураһында һөйләй? Мәктәп урамы. Яҡкаулыҡты яратмайбыҙ! | | |
| **Һүҙ составы (морфемика)**<br>Блок: «Мин һәм минең ғаиләм» | Һүҙҙең нигеҙе. Һүҙҙе үҙгәртеүсе ялғауҙар (ауыл-**ға**). Яңы һүҙ яһаусы ялғауҙар (ауыл-**даш**). Һүҙҙең сотавын тикшереүгә схема. Һүҙҙе схема менән сағыштырыу.<br>**Темалар:**<br>Башҡорт исемдәренең серҙәре. Һау булып үҫәм! Минең яратҡан шөғөл. | 2 | Диалог: “һүҙ төркөмдәре тураһында беҙ нимә беләбеҙ?” (мәғәнәһе, һорауҙары, нимә аңлаталар).<br><br>Парлап эшләү: бирелгән алгоритм буйынса һүҙҙе составы буйынса тикшереү. Ниндәй хаталар булыуы тураһында алдан һөйләшеү.<br><br>Мини-тикшереү: “Башҡорт һәм рус телдәрендә һүҙҙең ялғауында ниндәй оҡшашлыҡ һәм айырма бар?”<br>«В чем отличие и сходство окончаний в башкирских и русских словах?» |
| **Морфология**<br>**Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре.**<br>Блок: «Мин һәм минең дуҫтарым» | Бөтәһе 16 сәғәт, шул иҫәптән:<br><br>**Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре.**<br>*Исем*: исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүе. Эйәлек заты ялғауҙары. Исемдең грамматик үҙенсәлектәре: һан, килештәрҙә үҙгәреүе (ҡабатлау). Исемгә грамматик анализ эшләй белеү. | 2 | Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен бер-береһнән айырыға өйрәнеү.<br>Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүен, рус телендәге килеш һорауҙары менән **сағыштырып,** уларҙың атамаһын **әйтә** белергә өйрәнеү.<br>Килеш исемдәрен, уларҙың ниндәй һорауҙарға яуап биреүен хәтергә төшөрөп, һорауҙарға ярашлы ялғауҙар ҡуя белеү күнекмәләрен башҡарыу.<br>***-ль, -нь, -рь, -брь, -сь, -чь*** хәрефтәренә һәм ҡуш тартынҡыларға бөткән исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүенә күнегеүҙәр башҡарыу.<br><br>Исемде килеш менән үҙгәртеп, “Кемде? Нимәне? Кемдә? Нимәлә? Кемдән? Нимәнән?” һорауҙарына яуап **бирә** белергә өйрәнеү.<br>Исемдәрҙе килеш менән үҙгәрткәндә, ҡушма һүҙҙәр |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | яһағанда барлыҡҡа килгән орфограммаларҙы хәтерҙә ҡалдырырға тырышып, уларҙы яҙғанда дөрөҫ ҡулланып эш итеүгә күнегеүҙәрҙе әүҙем башҡартыу.<br>Исемгә грамматик анализ эшләй белеү. |
| | *Сифат*: Сифат дәрәжәләре (төп, сағыштырыу, артыҡлыҡ, аҙһытыу). Морфологик анализ эшләүҙе ҡабатлау. | 2 | Сифат предметтың төрлө билдәләрҙе аңлатыуын практик күнегеүҙәр башҡарыу аша төшөнөү.<br>Сифатты һөйләмдә һорауҙар аша табырға өйрәнеү. Һүҙҙәрҙән ялғауҙар ярҙамында сифаттар төҙҙөрөргә өйрәтеү.<br>Сифат дәрәжәләре тураһында ҡыҫҡаса төшөнсәләрҙе үҙләштереү һәм уларҙы айыра белергә күнегеүҙәр башҡарыу.<br>Сифатҡа таблица буйынса морфологик анализ яһарға өйрәнеү.<br>Сифатҡа морфологик анализ эшләүҙе нығытыу. |
| | *Алмаш*: Зат алмаштары, уларҙың һан менән үҙгәреүе:: *берлектә – мин,һин, ул; күплектә – беҙ, һеҙ, улар* (ҡабатлау). Урын һәм ваҡыт алмаштары (таныштырыу). | 2 | Алмаш, уның төркөмсәләре (зат алмаштары, эйәлек, һорау, күрһәтеү), алмаштың килеш менән үҙгәреүе тураһында ябай ғына кимәлдә мәғлүмәт алыу.<br>Алмашҡа таблица ярҙамында морфологик анализ бирергә өйрәнеү.<br>Алмаштың исемдәрҙе, сифаттарҙы алмаштырыуы тураһында мәғлүмәт алыу. Уҡытыусы ярҙамында уларҙы табырға өйрәнеү.<br>Практик рәүештә эйәлек һәм зат алмаштары төркөмдәрен һөйләмдә ҡулланыуға күнегеүҙәр башҡарыу. |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | |
| | *Ҡылым*: хәбәр һәм бойороҡ һөйкәлеше формалары. ҡылымдарҙың зат, һан һәм заман менән үҙгәреүе. Ҡылымдың үткән, хәҙерге һәм киләсәк заман формаларына һорау ҡуя белеү. Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымы аңлатҡан эш-хәрәкәттәр. Ҡылымдың һөйләмдә тотҡан роле. Ҡылымға морфологик анализ. | 4 | Ҡылымдың үҙ аллы һүҙ төркөмө булып ни эшләй һорауына яуап биреүен белә, текстан уларҙы таба.<br>Ҡылымдың аңлатҡан мәғәнәһен, заман формаларын аңлата ала.<br><br>Хәҙерге заман ҡылымдарының барлыҡ-юҡлыҡ формалары һәм уларҙың берлектә, күплектә, затта үҙгәреүен, өлгө буйынса эшләй ала.<br>Үткән заман ҡылымдарының затта үҙгәреү формалары менән танышып, өлгө буйынса үҙгәртә.<br>Киләсәк заман ҡылымдарының һанда, затта үҙгәреүе менән танышып, һөйләмдә уларҙы билдәләй ала.<br>*Ҡылымға морфологик анализды бирелгән алгоритм буйынса яһарға өйрәнә башлай.* |
| | *Һан.* Төп һәм рәт һандары. Ҡушма һандарҙың барлыҡҡа килеүе. Һандарҙың килеш менән үҙгәреүе. Һанға морфологик анализ. | 2 | Ябай һәм ҡушма һандарҙы рус телендәге һан төркөмдәре менән сағыштырып, аңлатырға тырыша.<br>Рәт һәм төп һандарының айырмаһын билдәләй белеү.<br>Һанға морфологик анализ яһау күнекмәләрен башҡарырға өйрәнеү. |
| | *Рәүеш* (дөйөм төшөнсә): дөйөм мәғәнәһе, ниндәй һорауҙарға яуап бирә. Телмәрҙә ҡулланышы. | 2 | Рәүештәрҙе текстан таба белә. Ҙорауҙар ҡуйып, уларҙың мәғәнәһен аңлата.<br>Телмәрҙә ҡулланыуын миҫалдарҙа күрһәтә ала.<br>Морфологик анализ эшләүгә өйрәнеү. |
| | *Ярҙамсы һүҙҙәр* (дөйөм төшөнсә): | 2 | Һөйләмдә үҙ-аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәрҙе таба белеү. |



PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | *бәйләүестәр (менән, өсөн); теркәүестәр* (дөйөм мәғәнәһе, телмәрҙә ҡулланышы). ***һәм, ләкин*** теркәүестәре ябай һәм ҡушма һөйләмдәрҙә.<br>**Темалар:**<br>Яратҡан әкиәттәрем. Театр, музей һәм кино яратабыҙ. | | Өйрәнелгән темаларҙа бәйләүестәрҙе һәм теркәүестәрҙе табып, әйтә белергә өйрәтеү. Уларҙы ябай һәм ҡушма һөйләмдәрҙә ҡуллана белеү күнекмәләрен үҫтереү. |
| **Синтаксис.**<br>Блок: «Минең республикам» | Һүҙ, һүҙбәйләнеш һәм һөйләм. Уларҙың оҡшашлығы һәм айырмаһы. Әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәре (хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр).<br>Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре:<br>Аныҡлаусы – предметтың билдәһен, эйәһен, иҫәбен аңлата һәм "ниндәй?, ҡайһы?, кемдең?, нисәнсе?" һорауҙарына яуап бирә.<br>Тултырыусы – предметты аңлата һәм төп килештән башҡа бөтә килеш һорауҙарына яуап бирә.<br>Хәл – эш-хәрәкәттең ҡайҙа, ҡасан, нисек барғанын белдерә һәм һөйләмдә хәбәрҙе асыҡлап килә.<br>Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр. Тиң киҫәкле һөйләмдәр. Ябай һәм ҡушма һөйләмдәр.<br>Ябай һөйләмгә синтаксик анализ. | 4 | Һөйләмдә һүҙҙәрҙең килеү тәртибен һиҙемләү.<br>Эйә менән хәбәрҙе һөйләмдә билдәләй белә.<br>Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәрҙе айыра, текстарҙа уларҙы табып, аңлата белә.<br>Йыйнаҡ һөйләмде эйәрсен киҫәктәр менән тулыландырыуға үҙ аллы күнегеүҙәр үтәргә өйрәнә.<br>Һөйләмдең төҙөлөшөн ябай ғына кимәлдә анализларға өйрәнә. Унын баш киҫәктәрен табып, аҫтарына һыҙып билдәләй.<br>Һөйләм киҫәктәренең бер-береһенә бәйле килеүен һорауҙар аша билдәләп, күнегеүҙәр башҡарыу.<br>Һөйләм нигеҙен билдәләү. Уларҙы айыра белергә, йыйнаҡ һөйләмдәрҙе тулыландырырға өйрәнеү.<br>Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙә тауыш интонацияһы ярҙамында әйтә белеү.<br>Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙә һөйләм аҙағында нөктә, һорау, өндәү билдәләрен ҡуя белеүҙе нығытыу.<br>Һөйләм аҙағында тыныш билдәләрен үҙ аллы ҡуйып, күнегеүҙәр башҡара белеүҙе нығытыу, бер-береһенең |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | **Темалар:**<br>Нимә ул Ватан? Ҡурай тауышы. “Шүлгәнташ” ҡурсаулығы. “Янғантау” санаторийы. Республиканың ҡалалары. | | башҡарған эштәрен тикшереп, баһаларға өйрәтеү.<br>Ябай һәм ҡушма һөйләмде бер-береһенән айыра белеү.<br>Телмәр төрҙәре тураһында төшөнсәләрҙе нығытыу. Уларҙы бер-береһенән айырырға өйрәнеү. Бирелгән текстарҙа телмәр төрҙәрен билдәләү.<br><br>Тексттың төҙөлөшөн билдәләү: башын, төп өлөшөн, аҙағын табырға өйрәнеү.<br>Тексттың төп мәғәнәһен һорауҙар ярҙамында тойомларға өйрәнеү.<br>Текстка исем бирергә һәм төҙөлөшөн тикшерә белергә өйрәнеү күнекмәләрен үҙләштереү. Абзацтың ҡасан ҡуйылыуын, ни өсөн ҡулланылыуын аңлата белеү. Тәҡдим ителгән план буйынса тексты исемләй белеү.<br>Мәғәнәүи яҡтан һөйләмдәре төрлөсә боҙолоп бирелгән тексты яңынан дөрөҫләп төҙөргә өйрәнеү.<br>Ябай ғына кимәлдә үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе ҡулланып, тейешле темаға диалог, монолог ҡорорға өйрәнеү, уларҙы телдән һөйләй йәки яҙма телмәрҙә башҡара белеү.<br>Текстан терәк һүҙҙәрҙе табырға өйрәнеү, улар ярҙамында тексттың йөкмәткеһен һөйләргә өйрәнеү.<br>Сюжетлы һүрәттәр ҡулланып, текст төҙөргә өйрәнеү.<br>Текст буйынса әңгәмәләшкәндә, үҙ фекерен **әйтә**, дәлилләй белергә өйрәнеү.<br>Аралашҡанда телмәр этикетын һаҡлап, әңгәмәселәргә ҡарата ихтирамлы булып һөйләшергә |

PDF-XChange Viewer
Click to buy NOW!
www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | өйрәнеү.<br><br>Тексты уҡып, төп мәғәнәне асыусы һөйләмде табырға өйрәнеү.<br><br>Уҡытыусы биргән һорауҙар, йәки терәк һүҙҙәр ярҙамында кескәй генә күләмле инша яҙырға өйрәнеү.<br><br>Өйрәнеүсе изложение яҙырға, уны бирелгән текст менән сағыштырып, логик яҡтан һөйләмдәр төп теманы асып биргәнме, юҡмы икәнлекте билдәләп, хаталарын төҙәтеп, үҙгәртеп яҙырға өйрәнеү.<br><br>Проект эштәрҙе нисек башҡарыу алгоритмын үҙләштереү, уны башҡарыуға план ҡора белеү һәм үҙ эшен ойоштороорға өйрәнеү.<br><br>Һөйләмдә һөйләмдең эйәрсән киҫәксәләрен (аныҡлаусыны, тултырыусыны, хәлде) һорауҙар ярҙамында билдәләргә өйрәнеү.<br><br>Бәйләүестәр, йәки уларҙан башҡа бирелгән тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе текстан табырға өйрәнеү.<br>Ябай һөйләмгә бирелгән алгоритм ярҙамында синтаксик анализ үткәрергә өйрәнә башлау. |
| **Орфография һәм пунктуация** | 1-се, 2-се, 3-сө кластарҙа өйрәнелгән дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен ҡабатлау. Һүҙҙәрҙең яҙылышын орфографик һүҙлектән тикшерә | – | “Нисек орфограммаларҙың дөрөҫ яҙылын тикшерергә?” темаһына диалог.<br><br>Орфографик ҡағиҙәләрҙе ҡулланыу буйынса бергәләп алгоритм |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | белеү.<br>Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен ҡулланыу:<br>- тиң киҫәкле һөйләмдә тыныш билдәләре (*һәм, ләкин* теркәүестәре менән, йәки теркәүеһеҙ булғанда);<br>- тура телмәр эргәһендә тыныш билдәләре (күҙәтеү);<br>- хәрефтәрҙең һыҙмаһын дөрөҫ яҙыу. | | төҙөү һәм уны ҡулланырға өйрәнеү.<br>Тексте ниндәйҙер орфограмма менән бәйле һүҙҙе хатаһыҙ яҙыу өсөн уны аңлатып, һөйләп башҡарырға күнектереү.<br><br>Хаталар ебәрмәҫ өсөн тәүҙә үҙ эшеңде ентекләп тикшерергә, аҙаҡ – күршең менән дәфтәрҙе алмашып, бер-берегеҙҙең эшен тикшерергә күнектереү. |
| **Телмәр үҫтереү**<br>Блок: «Мине уратып алған донъя» | 1-се, 2-се, 3-сө кластарҙа өйрәнелгәндәрҙе ҡабатлау һәм нығытыу**:** телдән һәм яҙма формала аралашыу (хат, ҡотлау открыткаһы, белдереү һ.б.); диалог, монолог, тексттың темаһын, төп мәғәнәһен билдәләүҙе нығытыу.<br>Бирелгән һәм үҙ аллы төҙөлгән текстарҙы дөрөҫләү, анығлау, яңы һүҙҙәр өҫтәү.<br>Изложение яҙыу: телдән йәки яҙма рәүештә тексттың эстәлеген тулыһынса асып биреү. Телдән тексттың һайлап алынған өлөшөн һөйләү.<br>Сочинение – яҙма эш төрө. Өйрәнеү һәм танышыу маҡсатында уҡыу. Текстаг тейешле мәғлүмәтте эҙләү. Һүҙҙең мәғәнәһен белешмә сығанаҡтарҙан, шулай уҡ федераль исемлеккә индерелгән электрон ресурстар аша эҙләп | 4 | Бәйләнешле телмәр төрҙәрен үҫтереүгә; дөрөҫ ишетеүгә һәм әйтеүгә практик эш төрҙәрен үтәй белеү:<br><br>- килеш ялғауҙарын ҡуйылған һорауҙарға тап килтереп, дөрөҫ ҡушырға өйрәнеү;<br><br>- терәк һүҙҙәр ярҙамында үҙ аллы бер нисә һөйләмдән торған текст төҙә белеү;<br><br>- бер нисә предметты, күренеште сағыштырып, һығымта яһарға өйрәнеү;<br>- һөйләмде эйәрсән һәм тиң киҫәктәр менән тулыландыра белеү**;**<br>- мәғәнәһе боҙолған тексты дөрөҫләп, хаталарын үҙгәртеп, эш итә белә;<br>- проект эште үҙ аллы, тейешле мәғлүмәтте йыйып, башҡара ала;<br>- төрлө сығанаҡтарҙан өҫтәлмә мәғлүмәт табып, уны үҙгәртеп ҡуллана ала**;** |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | ҡулланыу.<br><br>**Темалар:**<br>Тәбиғәт – беҙҙең өй. Йыл миҙгелдәре. Ниндәй гәзиттәр уҡыйһың? Башҡортостан телеканалында һәм “Юлдаш” радиоһында ниндәй тапшырыуҙар оҡшай? | | - эшенә баһа бирергә күнегә;<br>- портфолионы дөрөҫ тултыра;<br>- кроссвордтарҙы, йомаҡтарҙы, башватҡыстарҙы үҙ аллы сисә, үҙе ябай ғына булған төрлө ижади эштәрҙе уйлап сығара.<br>- һүҙҙәрҙе мәғәнә буйынса үҙгәртеп, тейешле килештә ҡуйып, һөйләм төҙә, шулай уҡ 3-4 һөйләмдән торған бәйләнешле текст төҙә белә;<br>- әҙәби әҫәр, сюжетлы һүрәт, терәк һүҙҙәр буйынса хикәйә, йәки әкиәт ижад итә;<br>- телдән бер нисә предметты, йәки күренеште ябай ғына рәүештә сағыштырып һүрәтләй белә;<br>- һөйләмде эйәрсән киҫәктәр менән тулыландыра, тиң киҫәктәр ҡулланып, уның мәғәнәһен тәрәнерәк аса белә;<br>- тексты теманһын, төп мәғәнәһен билдәләй белә, боҙолған тексты мәғәнәһенә ярашлы яңынан ҡора ала;<br>- үҙе һайлаған, йәки уҡытыусы тәҡдиме буйынса алынған тема буйынса проект эшен үҙ аллы башҡара ала;<br>- интернет селтәренән, гәзит-журналдарҙан тейешле мәғлүмәт эҙләп табып, уны кәрәгенсә маҡсатҡа ярашлы үҙгәртеп, яҙма һәм һөйләү телмәрҙә ҡуллана белеү;<br>- программаға ярашлы башҡарылған эштәрен үҙ аллы баһалап, тематик яҡтан төркөмләп, портфолио төҙөп, һаҡлай белә. Кәрәкле ваҡытта өҫтәлмә материалдар индерә, дәрестәрҙә, дәрестән тыш |

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com
PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | эшмәкәрлектә ҡуллана белә;<br>- кроссвордтар, ребустар, йомаҡтар сисә белә.<br>Телмәрҙең диалог һәм монолог формаларын үҙләштереү.<br>Пассив һәм актив һүҙлекте эҙмә-эҙлекле рәүештә байытыу.<br>Бирелгән план буйынса үҙ-аллы текстар төҙөү; текст йөкмәткеһен тулыһынса йәки ҡайһы бер өлөштәрен һайлап алып, изложение яҙыу; изложение элементтарын индереп инша яҙыу; төрлө инша төрҙәрен үҙләштереү ( инша-хикәйә, инша-һүрәтләү, инша – фекерләү).<br><br>Телдән һәм яҙма текстар төҙөү (3–5 һөйләмдән торған): хат, записка, белдереү, баһалама, класс стенгәзите, ижади эштәр йыйылмаһы кеүек яҙма эштәр ижад итеү.<br>Тәҡдим ителгән йәки үҙ-аллы һайланған тема буйынса инша яҙыу.<br>Һүҙҙәрҙең мәғәнәһен белешмә баҫмалар, шулай уҡ федераль исемлеккә индерелгән электрон ресурстар аша тикшереү һәм асыҡлау. |
| **Резерв – 2 с.** | | | |

PDF-XChange Viewer
Click to buy NOW!
www.docu-track.com



## Учебно-методическое и информационно-ресурсное обеспечение

## Учебно-методическая и художественная литература


1. Агишева Р. Л. Фольклор и литература Башкортостана: учебная хрестоматия для детей дошкольного и младшего школьного возраста / Р. Л. Агишева. – Уфа: Китап, 2011. – 175 с.
2. Антология детской литературы (на башкирском языке). – Уфа: Башкирское книжное издательство, 1986. Кн. 2. – Уфа: Башк. кн. изд-во, 1987. – 319 с.
3. Башкирское народное творчество: Том 5. Исторический эпос (на башкирском языке). – Уфа: Китап, 2000. – 392 с.
4. Башкортостан: Краткая энциклопедия (на башкирском языке). – Уфа: Башкирская энциклопедия, 1997. – 672 с.
5. Вахитова Р. К. Самоучитель башкирского языка: учебное пособие. / Р. К. Вахитова, Ф. С. Искужина, Г. Д. Ибрагимов, Э. Ф. Рахимова, Р. Т. Фазлытдинов. – Уфа: Гилем, 2009. – 159 с.
6. Галлямов А. А. Алифба: учебник для башкирских школ / – 14-ое изд. – Уфа: Китап, 2010. – 144 с.
7. Кучеров Е. В. Природа Башкортостана: (Времена года): Кн. для чтения в 3–4-х кл. / Е. В. Кучеров; Рис. авт. – Уфа: Китап, 1994. – 126 с.
8. Кучеров Е. В. Животный мир Башкортостана. / Е. В. Кучеров. 2-е изд. перераб. и доп. – Уфа: Китап, 1994. – 126 с.
9. Муртазина Ф. Ф. Башкирский язык: учебное пособие для 1 класса для изучения родного (башкирского) языка и литературы в общеобразовательных организациях с русским языком обучения (на башкирском языке) / Ф. Ф. Муртазина, З. Г. Нафикова. – 2-е издание. – Уфа: Китап, 2017. – 176 с.

PDF-XChange Viewer
Click to buy NOW!
www.docu-track.com

10. Муртазина Ф. Ф. Башкирский язык: учебное пособие для 2 класса для изучения родного (башкирского) языка и литературы в общеобразовательных организациях с русским языком обучения (на башкирском языке) / Ф. Ф. Муртазина, З. Г. Нафикова. – 2-е издание. – Уфа: Китап, 2017. – 216 с.

11. Нафикова З. Г. Башкирский язык: учебное пособие для 3 класса для изучения родного (башкирского) языка и литературы в общеобразовательных организациях с русским языком обучения (на башкирском языке) / З. Г. Нафикова, Ф. Ф. Муртазина. 2-е издание – Уфа: Китап, 2017. – 160 с.

12. Нафикова З. Г. Башкирский язык: учебное пособие для 4 класса для изучения родного (башкирского) языка и литературы в общеобразовательных организациях с русским языком обучения (на башкирском языке) / З. Г. Нафикова, Ф. Ф. Муртазина. – 2-е издание. – Уфа: Китап, 2017. – 176 с.

13. Нафикова З. Г. Волшебные звуки: методическое пособие: (на башкирском языке) / З. Г. Нафикова, Ф. Г. Азнабаева. – Уфа: Китап, 2010. – 136 с.

14. Нафикова З. Г. Шатлык: программа и конспекты занятий для обучения башкирской разговорной речи детей старшего дошкольного возраста / З. Г. Нафикова. – Уфа: Китап, 2021. – 80 с.

15. Радуга: учебное издание: хрестоматия для детских садов: 2 книга / Сост. Ф. Ш. Ягафарова, М. Б. Юлмухаметов (на башкирском языке). – Уфа: Китап, 1995. – 216 с.

16. Салимов Н. А. Не захотелось куклой стать: Стихи: [Для детей] (на башкирском языке) / Нияз Салимов. – Уфа: Башк. кн. изд-во, 1992. – 46 с.

17. Тулумбаев Х. А. Волшебный подарок: книга для внеклассного чтения в 1 классе русскоязычных школ (на башкирском языке). / Х. А. Тулумбаев, М. С. Давлетшина, Р. А. Абуталипова. – Уфа: Башкирское книжное издательство «Китап», 1995. – 248 с.

18. Урал батыр: Башкирский народный эпос (на башкирском языке). / Проект, вступ. ст., подготовка текстов Ф. Надршиной. – 2-е изд., стер. – Уфа: Информреклама, 2005. – 468 с.

19. Усманова М. Г. Башкирский язык: теория, 5–9. / М. Г. Усманова, Ф. Ф. Абдуллина. – Уфа: Китап, 2006. –128 с.

20. Усманова М. Г. Грамматика башкирского языка для изучающих язык как государственный / М. Г. Усманова. – Уфа: Китап, 2006. – 128 с.

21. Хисамитдинова Ф. Г. Башкирский язык для малышей (на башкирском языке) / Ф. Г. Хисамитдинова. – Уфа: Башкирская энциклопедия, 2002. – 120 с.

## Словари

22. Русско-башкирский, башкирско-русский словарь / Сост. Ф. Г. Хисамитдинова, Р. Т. Муратова. — Уфа: «Маленький гений Башкортостана», Учебно-методический центр «Эдвис», 2014. — 192 с.

23. Русско-башкирский и башкирско-русский переводчик слов и текста онлайн / URL: http://bash-perevod.ru/ (дата обращения: 30.06.2022).

24. Саяхова Л. Г. и др. Русско-башкирский учебный словарь / Л. Г. Саяхова, З. Г. Ураксин, Ф. Ф. Асадуллина, З. Г. Сахипова / Под ред. Л. Г. Саяховой и З. Г. Ураксина. – Уфа: Китап, 2001. – 336 с.

25. Толковый словарь башкирского языка (для школьников начальных классов) / Сост.: Н. Ф. Суфьянова, З. А. Сиразитдинов, З. Г. Ураҡсин. – Уфа: Китап, 2011. – 336 с.

## Информационные ресурсы

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

26. Башкирский язык для 1 класса. Учебное пособие. Муртазина Ф. Ф. и др. (дата обращения: 05.07.2022).

27. Башкирский язык для 2 класса. Учебное пособие. Муртазина Ф. Ф. и др. (дата обращения: 05.07.2022).

28. Башкирский язык для 3 класса. Учебное пособие. Нафикова З. Г. и др. (дата обращения: 05.07.2022).

29. Башкирский язык для 4 класса. Учебное пособие. Нафикова З. Г. и др. (дата обращения: 05.07.2022).

30. Восемь приложений, помогающих изучить башкирский язык // URL: https: //addnrb.ru/novosti/7-prilozhenij-pomogajushhih-izuchat-bashkirskij-yazyk/ (дата обращения: 05.07.2022).

31. Кусимова Т. В мире имён. Словарь башкирских имён [PDF] (дата обращения: 05.07.2022).

32. Мультфильмы, обучающее видео, приложения и игры на башкирском языке // URL: https://balalar.org/ (дата обращения: 05.07.2022).

33. Надршина Ф. А. Башкирские народные песни, песни-предания // URL: https://vk.com/wall-45254497_2121 [PDF] (дата обращения: 05.07.2022).

34. Онлайн-уроки башкирского языка // URL: https://basic.bashlang.ru/course.php (дата обращения: 05.07.2022).

35. Хисамитдинова Ф. Г. Башкирский язык за 25 уроков / Ф. Г. Хисамитдинова, Р. А. Ахмедьянов, И. Р. Ахмедьянова: Серия «Учебная литература» / Электронное издание ДИНИЛ «Интеллектуальный полигон». – Екатеринбург, 2011 // URL: 0391996_696AE_hisamitdinova_f_g_bashkirskiy_yaz. (дата обращения: 05.07.2022).

PDF-XChange Viewer Click to buy NOW! www.docu-track.com

36. Хисамитдинова Ф. Г. Интенсивный курс изучения башкирского языка // URL: Intensivny_kurs_bashkirskogo_yazyka.pdf (дата обращения: 05.07.2022).

37. Электронный учебник башкирского языка для русскоязычных школ // URL: http://tel.bashqort.com/files/doc_download/3-----5-11- (дата обращения: 05.07.2022).